ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 май-июнь (һабанай-һөтәй)

2018

№21 (803)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Сит ризыҡты ашамайыҡсы!



2-3

Яҙғы бал һәм...

праймериз тураһында хәбәрҙәр



4

Кеше яҙмышы хәл ителгәндә...

танышлыҡ һәм туғанлыҡ төшөнсәһенә урын юҡ



8-9

"Ҡыҙҙар уйыны",

йәки меркет-мең ырыуы башҡорттарының бер йолаһы



12-13

ТВ-программа 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июнь аҙағына тиклем һеҙ 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм теләгәндәр квитанцияларын редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһармановаһың "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үсемлектәре" һәм башҡа матур китаптарға эйә була ала. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эшҡыуар булырға ниәтләнеүселәргә кәңәш-теләк еткерәйек әле: уларға ниндәй сифаттарға эйә булыу мотлаҡ?

***Сәлим ВӘЛИУЛЛИН, Туймазы ҡалаһы:*** Оҙаҡ йылдар төҙөлөш өлкәһендә эшҡыуарлыҡ алып барҙым. Бөгөнгө көндә ул эшемде түңәрәкләп, икенсе тарафтарҙы үҙләштерәм, сөнки халыҡтың аҡсаһы юҡ һәм әүҙем төҙөлөш эштәре алып барып булмай. Ә эшҡыуарҙың төп һәләте, минеңсә, алдан күрә белеү. Киләһе айҙа һәм хатта алдағы йылда ғына түгел, ә бер нисә йылдан теге йәки был өлкәлә хәлдәрҙең ниндәй буласағын күҙаллау оҫталығына эйә кеше генә эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшә. Эшҡыуар - ул үҙенә эшләүсе кеше. Тимәк, уның финанс яҡтан аяғында ныҡлы баҫып тороуы ла тик үҙенә бәйле. Йәшерен-батырыны юҡ, тормош ормошҡа әйләнмәһен өсөн янсыҡ буш булмаҫҡа тейеш. Өйрәнелгән, юлға һалынған темпты аҙға ғына кәметһәң, уның эҙемтәләре ҙур юғалтыуҙарға, шул иҫәптән аҡса яғынан да, килтерергә мөмкин. Шуға күрә эшҡыуарлыҡ ҡанына һеңгән кеше хатта ял иткән ваҡытта ла ниндәйҙер стратегик пландар ҡора, киләсәктә файҙалы булырҙай кешеләр менән таныша, үҙенең эшмәкәрлеген киңерәк йәйелдереү өсөн төрлө юлдар эҙләй.

Уҙған быуат аҙаҡтарында һәр икенсе бала үҙен киләсәктә эшҡыуар булараҡ күрә ине. Ләкин уларҙың бик әҙе генә хыялын ысынбарлыҡ итте, сөнки эшҡыуарлыҡты айыҡ, аңлы, тырыш, үҙ-үҙенә талапсан, егәрле кешеләр генә үҙ ихтыярына "бойһондора" ала. Теләкте бойомға ашырыу өсөн махсус китаптар уҡып, төрлө тренингтарға йөрөү генә әҙ. Уңышлы эшҡыуарҙар рәтенә баҫыу өсөн көн һайын нимәлер булһа ла эшләргә кәрәк. Ҡағыҙға яҙып ҡуйған аҙналыҡ пландың 99 процентын үтәү мөмкинлеге тапҡан кеше артабан да үҙ маҡсатынан ситкә тайпылмаясаҡ һәм уңышлы буласаҡ. Эшлекле кешеләр күп, ләкин уларҙың барыһы ла эшҡыуар була алмай, сөнки уңышҡа өлгәшкән эшҡыуарҙарҙың барыһы ла, эшлекле булыуҙан тыш, эске тәртиптәре (самодисциплина) көслө булған шәхестәр.

***Айгөл ИҘЕЛБАЕВА, Өфө ҡалаһы:*** Кем йомоҡ, ауыҙ асып һүҙ әйтергә ҡыймаған, үҙ фекерен аныҡ итеп еткерә белмәгән, оялсан эшҡыуарҙы күргәне бар? Юҡ, әлбиттә, сөнки ундай кеше эшҡыуар була алмай. Ниндәй генә өлкәлә эшмәкәрлек алып барған кеше булмаһын, ул ҡыйыу, сос, үтеп сыҡҡан булырға тейеш. Бөгөнгө көнгә эшҡыуарлыҡтың яңы төрөн уйлап сығарыу мөмкин түгел кеүек, ләкин әленән-әле ҡыҙыҡлы, килемле, тиҙ арала кешене ылыҡтыра алырлыҡ эшмәкәрлек тәҡдим итеп кенә торалар. Тимәк, үҙен эшҡыуарлыҡта күрергә теләгән кеше нимәлер эҙләй, энә тыҡҡыһыҙ булып тойолған өлкәлә лә ниндәйҙер буш уйымды табып эш башлай.

Мин 10 йылдан ашыу һатыу өлкәһендә эшләнем. Үҙемдең эшмәкәрлегемдән сығып, шуны әйтә алам: һәр эштең дә ныҡ уңышлы бер мәле була. Йәйлап ул һүлпәнәйә, килем килтермәй башлай. Ошо ваҡытта уға клиенттар өсөн ҡыҙыҡлы булған, уларҙы йәлеп иткән ниндәйҙер яңылыҡ өҫтәргә йәки бөгөнгө көндә актуаль башҡа төрлө өлкәне үҙләштерергә кәрәк. Бөгөнгө көндә мин ҡалала төрлө форматтағы реклама урындарын ҡуртымға биреү менән шөғөлләнәм. Шулай уҡ оҙаҡламай ҡала халҡына һәм Өфө ҡунаҡтарына яңы төр хеҙмәт күрһәтеү ниәте менән янып йөрөйөм. Уның да уңышлы булырына шикләнмәйем, сөнки мин үҙемдең көсөмә ышанам. Үҙ-үҙенә ышанысы булмаған кеше, ғөмүмән, эшҡыуар була алмай, сөнки ошо сифат үҙе артынан талапсанлыҡты, ныҡышмалылыҡты эйәртеп йөрөтә.

Аҡсаның иҫәп ярата икәнен барыһы ла белә, тик күптәр уны ҡоро һүҙ итеп кенә ҡабул итә. Ә эшҡыуар өсөн ул ҡағиҙә. Был уның һаранлығына йәки аҡса ҡоло булыуына ишарәләмай, ә эшлекле икәнен күрһәтә. Үҙ эшенең әһәмиәтен аңлаған, үҙенең тырышлығын баһалаған кеше генә уңышҡа өлгәшә ала.

Эшҡыуарлыҡ - ир-егеттәр "эше", унда ҡатын-ҡыҙға урын юҡ, тигән фекер йәшәй. Әлбиттә, үҙ-үҙен "булдырған", иң түбән баҫҡыстан башлап уңыштың юғары ҡатламына еткән эшҡыуарҙар араһында ир-егеттәр күберәк. Шулай ҙа гүзәл заттар ҙа уларҙан ҡалышмай. Улар үҙҙәре һайлаған өлкәлә емертеп эшләп кенә ҡалмай, ә өлгөлө ҡатын, бәхетле әсәй булып та өлгөрәләр. Ҡатын-ҡыҙға, эшҡыуарлыҡта юғалып ҡалмаҫ өсөн, алда әйтелгән бөтә сифаттар өҫтөнә уҫаллыҡ та хас булырға тейеш. Эшҡыуарлыҡ етдилек һәм ҡатылыҡ талап итә, ул мәмәйҙәрҙе яратмай һәм ҡабул итмәй. Шуға күрә, ошо сифаттарға эйә булыусылар үҙҙәрен эшҡыуарлыҡта һынап ҡарай һәм уңышҡа өлгәшә алалар, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!



# ӘКИӘТ ҺӨЙЛӘЙ БАЛАЛАР...

## башҡорт телендә

**Ошо көндәрҙә Өфөлә донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсына йомғаҡ яһалды. Туғыҙынсы тапҡыр ойошторолған ярыштың тантаналы өлөшө йылдағыса сағыу, ҡыҙыҡлы, илһамлы һәм рухлы тамашаға әүерелде.**

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

✓ *Эшҡыуарға батмаҫҡа ярҙам итеүсе тағы бер сифат - ул һаҡлыҡ, документтар менән эш итеүҙәге абайлыҡ. Ҡултамға ҡуясаҡ ҡағыҙҙарын иғтибар менән уҡырға өйрәнмәгән эшҡыуар иртәме-һуңмы "тишек кәмәгә" ултырасаҡ.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МАТУР ӨЛГӨ БИРӘЙЕК!

***Рәшиҙә СОЛТАНОВА, БР Ҡатын-ҡыҙҙары союзы рәйесе, С. Юлаев ордены кавалеры:*** Ҡыҙҙарҙың тормошҡа, ғаилә ҡороуға әҙер булмауын күреп борсоламын. Матур туй күлдәге кейеп фотоға төшөү өсөн генә кейәүгә сыҡҡан кеүектәр. Аҙаҡ көндәлек тормош мәшәҡәттәре баҫҡас, ни эшләргә, нисек килешеп йәшәргә белмәйҙәр, ғаиләләге аңлашылмаусылыҡтарҙы айырылышып хәл итәләр ҙә ҡуялар. Ә мин 1950-1954 йылдарҙа әле "Совет Башҡортостаны" гәзитендә "Фәлән-фәләнов фәлән менән айырылышыу тураһында һүҙ ҡуҙғатты, был судта ҡараласаҡ" тигән иғландар баҫылыуын хәтерләйем. Ғаиләләр тарҡалыуы шул тиклем һирәк күренеш булған, хатта халыҡҡа иғлан ителгән был күренеш. Ул ғына ла түгел, йәмғәтселек бер бәләкәй генә ғаилә проблемаһын да күҙ уңынан ысҡындырмаған.

Йәштәребеҙ 30-40 йәшкә етеп тә өйләнешмәй йөрөйҙәр, быныһы ла яҡшы күренеш түгел. СССР осоронда был проблеманы "Буйҙаҡ, яңғыҙ һәм бәләкәй ғаиләле граждандарға һалым" ярҙамында хәл иттеләр, буйҙаҡ ирҙәр дәүләткә һалымды арттырып түләй торғайны. Бөгөн былай ҡарар ярҙамында мәсьәләне хәл итеп булмай, шулай ҙа хөкүмәт кимәлендә ниндәйҙер ҡаты сара күрергә кәрәк. Йәштәрҙең өйләнешергә ашыҡмауы бала саҡтан ата-әсәһенән ниндәй тәрбиә алып, ниндәй мөнәсәбәт күреп үҫеүенә туранан-тура бәйле. Атай кеше ҡатынын хөрмәт итмәй, ҡатыны ирен һанға һуҡмай икән, бер-береһе менән уртаҡ тел таба алмағанлыҡтан, йыш ҡына һүҙгә килешеп торһалар, ошо мөнәсәбәттәрҙе күреп үҫкән ул-ҡыҙҙарының холҡона ла шул һалына. Ҡайһы бер ҡыҙҙар хатта ата-әсәһенең тормошон күҙәтеп, "Бер ҡасан да кейәүгә сыҡмайым" тип ваз кисеп тә ҡуя. Шуға күрә, милләт киләсәген уйлаған кеше тәү сиратта үҙ ғаиләһе эсендә яҡшы мөхит булдырырға, хәләл ефетенә һәм балаларына ҡарата изге мөғәмәләлә булырға тейеш.

Әйткәндәй, бөгөн күптәрҙе борсоуға һалған афәт - йәштәрҙең насар ғәҙәттәргә бирелеүе лә ғаиләлә һалынған тәрбиәнән тора. Сөнки тәрбиә нигеҙе тап ғаиләнән килә, бала саҡтан әҙәпкә өйрәтелгән кеше аҙаҡ ҡайҙа ғына йөрөһә лә, юлында ниндәй кешеләр тап булһа ла, үҙ принциптарына хыянат итмәй. Урамда тәмәке көйрәтеп торған ҡыҙҙарҙы осратһам, ата-әсәһе бармы икән балаларҙың, тигән уй килә. Беҙ йәш саҡта былай ҡылыҡ тураһында уйлауы ла яҙыҡ була торғайны. Ҡыҙҙарыбыҙға әсә тәрбиәһе, улдарыбыҙға атайҙың абруйлы һүҙе етмәй шул. Кешене әрләп йә һүҙ һөйләп кенә бер нәмәгә лә өйрәтеп булмай, үҙ миҫалыңда ғына тәрбиәләргә мөмкин. Шуға, һәр милләттәш өйөндә, эшендә, йәмғиәттә үҙен нисек тотоуы, эргәһендәге кешеләргә ниндәй йоғонто яһауы тураһында уйланһын ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Эшҡыуар булырға ниәтләнеүселәргә кәңәш-теләк еткерәйек әле: уларға ниндәй сифаттарға эйә булыу мотлаҡ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Юлай ҒАРИПОВ, Күмертау ҡалаһы:*** Ни өсөн кеше эшҡыуар булырға хәл итә? Бының сәбәптәре һәр кемдә төрлөсә. Берәүҙәр ошо рәүешле финанс үҙаллылыҡҡа ынтыла. Икенселәргә кемдәндер ҡулы аҫтында эшләү оҡшамай һәм үҙенә үҙе етәксе булырға теләү эшҡыуарлыҡҡа алып килә һәм башҡа сәбәптәр. Ләкин уларҙың барыһы ла уңышлы эшҡыуар булып китмәй. Айырыуса тәүге йылдарҙа ауырға тура килә. Ләкин эшҡыуарҙың стрестарға ҡаршы тора алыу көсө, тиҙ үҙгәреп тороусы шарттарға тиҙ генә яраҡлаша алыуы, көслө һәм профессиональ команда йыйыу һәләте, аҡсаны дөрөҫ бүлә һәм һөҙөмтәле ҡуллана белеүе уға артабан үҫешергә һәм үҙенә лайыҡлы урын табыуына мөмкинлек бирә.

Барыһы ла эшҡыуар булып тыумай. Үҙеңдән эшҡыуарҙы "әүәләп" алырға кәрәк. Ә бының өсөн тәүәккәл булыу мөһим. Әллә ниндәй тауҙар үренә еткерергә мөмкин пландарҙы ҡағыҙҙан "тартып" сығарып, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн нәҡ ошо тәүәккәллек кәрәк тә инде. Эш башлағанда миндә ошо сифаттың үҫешмәүе ныҡ ҡамасауланы. Ләкин үҙемдең ҡурҡыуымды, оялсанлығымды ситкә ҡуйырға һәм тәүәккәл булырға өйрәндем.

Шулай уҡ элек яуаплылыҡ көслө ине миндә. Үҙемдең әйткән һүҙемдә үтәмәү, вәғәҙәләргә ҡул һелтәп ҡарау эшҡыуарлыҡҡа аяҡ баҫҡан ғына ваҡытта хатта дауахана палатаһына алып килде. Тейешле көндә һәм сәғәттә тейешле тауарҙы килтермәйенсә, уларҙың дәғүәһенә ҡаршы ҡыртмырт һөйләшеүемдә оҙаҡ тыңлап торманылар, дөмбәсләп киттеләр. Яуаплылыҡ тойғоһон ошо рәүешле үҙләштерҙем. Бик ҡаты, ләкин аңлайышлы булды.

Эшҡыуарға батмаҫҡа ярҙам итеүсе тағы бер сифат - ул һаҡлыҡ. Мин бында урамда һәр береһенән ҡурҡып йөрөүҙе әйтмәйем, ә документтар менән эш итеүҙәге абайлыҡты күҙ уңында тотам. Ҡултамға ҡуясаҡ ҡағыҙҙарын ҙур иғтибар менән уҡырға өйрәнмәгән эшҡыуар иртәме-һуңмы "тишек кәмәгә" ултырасаҡ.

Барыһы ла оҫта сығыш яһауҫы (оратор) була алмай, ләкин уңышҡа ынтылған эшҡыуар ауыҙында бутҡа бешермәйенсә, һәр фекерен тәртипкә һалып, барыһына ла барып етерлек итеп сығыш яһай белергә бурыслы. Мин үҙем бының өсөн, кино геройҙары кеүек, ауыҙыма сәтләүек тығып, тиҙәйткестәр һөйләнем, ҡысҡырып әҫәрҙәр уҡыным һәм шиғырҙар ятланым.

Эшҡыуарлыҡ тураһында күп һөйләргә була. Ләкин эшҡыуар булырға ниәт итеүсе һәр кем үҙенә генә хас юлды үтә, бер кем икенсене ҡабатламай. Бәлки, ошонаң менән дә эшҡыуарлыҡ ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыстыр ҙа, кем белә.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

УЯН, УЙЛАН...

# СИТ РИЗЫҠТЫ АШАМАЙЫҠСЫ!

**Затыбыҙҙа бер кейәүебеҙ көньяҡ егете һәм шул кейәү ҡунаҡҡа килһә, күпләп емеш-еләк алып килә лә, ҡоротло һурпа, майлы ит булған табындан һуң емеш-еләген батмуслап өҫтәлгә ҡуйып, үҙ ҡулдары менән таҙалап тотторон, һыйлап аптырата ине. Беҙ бының ҡулын рәнйетмәйбеҙ тип, берәр генә алып ҡабабыҙ ҙа, сәйгә ҡусәбеҙ. Ул - беҙҙең емеш ашамауыбыҙға, иткә иҫебеҙ китеүгә, беҙ иһә уның аштан һуң шул емештәрҙе һыпырып һалыуына аптырайбыҙ...**

Минең, мәҫәлән, ауырығанда ла, былай ҙа емеш-еләккә күңел ятмай. Ауырығанда ҡорот иҙеп йәки әскелт ҡымыҙ, һауыға башлағанда һурпа эске, мундирлы картуф ашағы килә. Әфлисун, лимон, гранат, ҡара емеш кеүектәр иҫкә төшөп тә сыҡмай. Уларҙы беҙ ҡунаҡ-фәлән йыйғанда өҫтәлгә ҡуйырға ғына булмаһа, пакет-пакет итеп һатып та алмайбыҙ. Ниңә улай? Бына ошо хаҡта уйланғаныбыҙ булдымы һеҙҙең? Шул ҡыҙыҡ күренештең асылын яңыраҡ ҡына аңлап алдым. Баҡһаң, һәр ерлектең, халыҡтың, климаттың үҙ азығы була икән. Йылы яҡтыҡыларҙың шул емеш-еләк, ҡайһыларҙың - йәшелсә, беҙҙеке итле ризыҡтар һ.б. Бер климаттың ризығын икенсе климат кешеләре ашарға тейеш тә түгел. Ашағанда ла ул ризыҡтар быларға файҙа килтермәй. Киреһенсә, организмды ыҙаныҡан сығарып, хәлһеҙләндерә, көйһөҙләндерә генә. Сит яҡ аҙығы менән бергә төнгә сит, кәрәкмәгән мәғлүмәттәр инә. Мәҫәлән, көньяҡтан килгән емеш-еләктен, шулай уҡ сит яҡтан алып киленгән иттәрҙең, ҡайҙандыр иртә өлгөртөп килтерелгән йылы яҡ картуфының, йәшелсәләренең дә беҙҙең организмға бер файҙаһы ла юҡ. Был хаҡта халыҡ борон-борондан уҡ белгән икән. Иван Грозный әле 1580 йылда уҡ: "Илде баҫып алам тиһәң - сит ризыҡ индер, унан халыҡ ауырыуға һабыша һәм уларҙы ҡулға алыу ҙа ауыр булмаҫ", - ти. Сит яҡ ризығын ашаған хәлдә лә 10 проценттан арттырмаҫҡа кәрәк, уның шунда ғына артыҡ зыяны булмаҫҡа мөмкин. Тимәк, ҡыш көндәре, "витамин" тип, ситтән килгән йәҙәм-алмалар алып ашауыбыҙ елгә аҡса осороу һәм экологик ярашыу законын боҙоу ғына...

Бөгөн сәләмәт тормош алып барыу модаға инде, әммә уның нигеҙендәге сәләмәтлектең бар халыҡҡа ла бер төрлө тәьҫир итмәүен генә уйлаған әҙәм юҡ. Ит ашау зыянлы, тип яҙалар. Ә бит беҙҙең

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге рәсми делегация XXII Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумында ҡатнашты. Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумы 1997 йылдан ойоштороля. Егерме йыл эсендә форум эшлекле даирә вәкилдәренең аралашыуы, Рәсәй, үҫешеүсе баҙарҙар һәм донъя алдында торған төп иҡтисади мәсьәләләрҙе тикшереү өсөн алдынғы донъя майҙансығына әүерелде.

✓ Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡаҙағстан Республикаһының Павлодар өлкәһе делегацияһы менән осрашты. Уны төбәк аҡымы Булат Бакауов етәкләй. Төбәк башлығы билдәләүенсә, Башҡортостандың Ҡаҙағстан менән тауар әйләнеше уҙған йыл йомғаҡтары буйынса 392 миллион доллар тәшкил иткән, шуның 360 миллион доллары - экспорт тауарҙары. Өҫтәүенә, Башҡортостандың БДБ илдәре менән тауар әйләнешенең 40 проценты Ҡаҙағстанға тура килә.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Рәсәй банктарында балыҡ аҙығы һәм балыҡ үрсетеү материалдарын алыуға, тауар аквакультураһы объекттары төҙөүгә, төҙөкләндереүгә һәм яңыса ҡороуға алынған кредиттар буйынса проценттарҙы түләүгә сығымдар өлөшөн ҡайтарыуға республика ҡаҙнаһынан субсидиялар биреү тәртибен раҫланы. Эшҡыуарҙарға кредиттар буйынса сығымдарҙың процентарын ҡаплауға төп ставканан 100 процентҡаса дәүмәлдә ҡайтарыла.

✓ Башҡортостан делегацияһы Рәсәй исеменән Словенияла ауыл хужалығын һәм тауар хәүефһеҙлеген тотороҡло үҫтереү өсөн бал ҡорттарының һәм һеркәләндереүселәрҙең роленә арналған халыҡ-ара конференцияла ҡатнашты. Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда умартасылыҡ тармағының торошо хаҡында һөйләне. Конференцияла ҡатнашыусылар республиканың умартасылыҡ тармағында туплаған тәжрибәһен юғары баһаланы.

✓ 24 һәм 25 майҙа - "Һуңғы ҡыңғырау"ҙы уҙғарыу көндәрендә - Башҡортостан магазиндарында алкоголь һатыу тыйылды. Был тыйыу республика биләмәһендә 2017 йылда ғәмәлгә индерелде. Уны боҙған өсөн штраф ҡаралған. Продукцияны тартып алыу менән йәки унһыҙ штраф вазифалы кешеләр өсөн ул - 20-40 мең һум, юридик шәхестәр өсөн 100-300 мең һум тәшкил итә.

✓ ***Улар беҙҙән күпкә көслөрәк һәм йәшәмешерәк тә, аҡыллыраҡ һәм аңлыраҡ та. Улар беҙҙе йәшәтеүсе һәм һауыҡтырыусы. Тик беҙ генә быны аңламайбыҙ, үләнде мал аҙығы, һис юғы, тәбиғәт матурлығы итеп кенә беләбеҙ.***



## УЯН, УЙЛАН...



кеүек һалҡын ҡыш йылдың яртыһынан күберәген биләгән климатлы ерҙә йәшәгәндәргә иттең зыянлы түгел, ә, киреһенсә, файҙалы ризыҡ икәнен Америка йәки  Мәскәү диетологтарына аңлатыу урынһыҙ. Беҙҙең малдарыбыҙ күберәген һалҡында үҫкән үлән менән туҡлана, уларҙа витаминдар йылы яҡта үҫкән үләндәр менән сағыштырғанда 20-30 тапҡырға күберәк. Улар биргән һөт тә, ит тә тап беҙҙең организмға яраҡлашҡан, беҙ бер-беребеҙҙе туйҙырыусы һәм туҡланыусы булараҡ, быға тиклем йөҙҙәрсә йылдар тулыландырып, йәшәтеп килгәнбеҙ. Ит ашағандан берәүҙең дә ғүмере ҡыҫҡармаған, көсө бөтмәгән, сәләмәтлегенә зыян килмәгән. Бөгөн килеп, ит зарарлы, имеш. Сит ит зарарлы, ят яҡтарҙан, илдәрҙән килтерелгәне ала көстө лә, хәлде лә, ә үҙебеҙҙеке түгел.

Балды ла беҙ ҡайҙан килгәнен булһа ла тота ла алабыҙ. Баҡтиһәң, ул да тик үҙ ерлеге кешеләренә генә хеҙмәт итә торған нәмә икән. Йыш ҡына тау яҡтарынан килгән, Ҡытайҙан алынған, Украина болондарында йыйылған бал һатыла. Улар осһоҙораҡ та. Тик был бал беҙҙең халыҡ организмында бөтөнләй эшкәртелмәй, шунлыҡтан, ят мәғлүмәт ҡалдырыуҙан башҡа шифаһы ла булмай, тиелә. Мәҫәлән, мин үҙем Бөрйән балынан башҡа балды ауыҙыма ла ала алмайым - шундуҡ аллергия бирә. Хәйбулла, Архангел районынан алынған бына тигән хуш еҫле, ыуыҙ балдарҙы ашағандан аяҡ һуҙа яҙғаным булды. Ә тыуған яғымдың балын тайыштабан ише шапылдатҡанда ла була. Был да үрҙә әйтелгәндәргә тере миҫал.

Диетаға ултырыусылар күп хәҙер. Бигерәк тә яҙ-йәй ябығыусылар, организмдарын таҙартыусылар һаны арта. Һәр кем ниндәйҙер һөҙөмтәле һәм тиҙ ярҙам итеүсе ысулдар эҙләй. Унан китә әллә ниндәй тибет медицинаһы, япон диеталары, диңгеҙ минералдары һәм башҡалар. Ә был ысулдарҙың береһе лә беҙҙең төбәк халҡына килешмәгәнлеген, килешмәү генә түгел, иммунитетҡа үтә лә зыян килтереүен, нервыларҙы ҡаҡшатыуын, төрлө ағзаларҙы зарарлауын белгәндәр бик аҙ. Бөтөнләй сит ерҙә үҫкән үләндәрҙән ыуылған порошоктар, беҙҙең яҡта булмаған диңгеҙ үҫемлектәренән яһалған коктейлдәр, ят ризыҡтарҙан төҙөлгән менюлар, әлбиттә, сит климат кешеһенең (йәғни, беҙҙең) организмын шок хәленә индерә һәм ул ҡыҫҡа ваҡыт эсендә күп ауырлығын юғалта, ябыға, кибә. Организм был хәлдә икешәр йыл һуҙымында йөрөргә лә мөмкин икән, әммә ул яйлап был торошонан ысҡына һәм ҡапыл ҡартая, йәки төрлө ағзалар эштән сыға, нервы ауырыуҙары барлыҡҡа килә. Һәр хәлдә, был диеталарҙың аҙағы хәйерле булмай. Был тәңгәлдә лә бары тик үҙ ерлегебеҙ ризыҡтарынан төҙөлгән менюлар, диеталар, аҙыҡтар булыуы зарур.

Ҡасандыр Себергә эшкә барған беҙҙең яҡ халҡы цинга ауырыуына дусар булған. Ә бит был сир менән себерҙекеләр интекмәгән, улар ашаған болан итендә С витамины етерлек булған, ә ул витаминды боландары бер айлыҡ ҡына йәйҙәрендә йыйып өлгөргән. Хәҙер инде төрлө тарафтарҙан йыйылған халыҡтар Себерҙә лә үҙ иммунитеттарын барлыҡҡа килтерҙе. Әммә һәр яҡтан килтерелгән аҙыҡ, яһалма һөт һәм башҡа тәғәмдәр был кешеләрҙең организмын бөтөнләй башҡа төрлөгә әйләндергән инде. Ундағыларҙың тәнендә лә, аңында ла ерлек хәтере юйылғандыр, күрәһең. Был күренештең эҙемтәләре иһә икенсе, ҙур һәм шулай уҡ артыҡ хәйерле булмаған мәсьәлә.

Арғаяш районында теплицалар төҙөп, эшләп, йәшәп ятҡан ҡытайҙар күп. Шулар яҙ башынан ҡара көҙгә тиклем тиклем үлән-маҙарҙы тамыры менән ҡырып йыйып ала икән. Беҙҙең тапап йөрөгән йәшеллекте. Ағас араларындағы ҡаҙаяҡ үләнен тоҡлап-тоҡлап йыйып киптерәләр, тип аптырап һөйләй таныштар. Ысынында беҙ был ағас аралары тулып ултырған үлән хаҡында исеменән башҡа бер нәмә лә белмәйбеҙ. Хәтерегеҙҙәме, ботаника дәресендә шул ҡаҙаяҡтың нисек үҫкәнен, ҡасан аталанғанын, төҙөлөшөн өйрәнеп ултырҙыҡ. Ә файҙаһы тураһында, уны ниндәй ваҡытта йыйып, нимәгә ҡулланырға икәнлеген өйрәткән фән булманы. Бына Токио халҡы йылына 300 тонна ҡаҙаяҡ үләнен ашай һәм 25-30 йылға оҙағыраҡ йәшәй ҙә.

Ерҙә иң беренсе булып үҫемлектәр яралған һәм уларҙың үҙ энергияһы, улар ерҙе лә, күкте лә, ҡояш йылыһын да, ысыҡ һалҡынын да, миҙгелдәр үҙгәрешен дә беҙҙән күпкә ныҡ кәрәк тоя. Улар беҙҙән күпкә көслөрәк һәм йәшәмешерәк тә, аҡыллыраҡ һәм аңлыраҡ та. Улар беҙҙе йәшәтеүсе һәм һауыҡтырыусы. Тик беҙ генә быны аңламайбыҙ, үләнде мал аҙығы, һис юғы, тәбиғәт матурлығы итеп кенә беләбеҙ.

Тән йәш һәм матур һаҡланһын өсөн көнөнә икешәр литр һыу эсергә кәрәк, тигәнде йыш уҡырға була. Эсеп ҡарағанығыҙ бармы сәй һәм башҡа шыйыҡлыҡтарҙан башҡа икешәр литр һыу? Организм быны ҡабул да итмәй. Сөнки был уны көсләү. Һыуҙы йәнең күпме һорай, шулай эсергә кәрәк. Артығы, көсләп ҡойолғаны ул һине ҡоро сайҙырып, файҙалы матдәләреңде йыуҙырып алып ҡына үтәсәк. Артыҡ һыу үҙе үк ағыу була ала. Быны ла белергә кәрәк.

Тағы ла кешенең булмышын иң тарҡатыусы нәмәләр - дарыуҙар. Аптекаларҙа һатылған химик препараттар. Был система үҙе бер иҡтисад донъяһы, уны бик әүҙем рекламалайҙар, унан милларлаған суммала килем алалар һәм, әлбиттә, дарыуҙарҙан баш тартыуға саҡырған мәғлүмәтте нисек тә өҫкә сығармау өсөн йәнтәсмән көрәшәсәктәр ҙә. Һәм кеше үҙе лә ана шул препараттар менән һәлкәүерәк, моңһоҙораҡҡа әйләнә бара. Яйлап тәбиғәт менән бәйләнешен онота, һиҙгерлеге юйыла, тойоу күҙәнәктәре тоноҡлана.

Хәҙер медицина университеттарында табип булып сығасаҡ студенттарға үлән дауалары дәрестәре инмәй ҙә икән. 1938 йылдарҙа әле һәр практика үтеүсе доктор иң башта үлән гербарийҙары буйынса һынау тотҡан. Үләндәрҙе белһә, дауалауға рөхсәт иткәндәр, белмәһә - юҡ. Ә үләндәрҙе әҙәмдәр меңәр йылдар дәүерендә үҙҙәрендә һынап белгән. Дарыуҙар кеүек, сысҡан-ҡомаҡтарҙа ғына һыналмаған улар.

Яҙ етһә, беҙ хәҙер витаминдар эсә башлайбыҙ. Йәнәһе, ҡыштан һуң, йәнәһе, ауырлы ҡатындарға, йәнәһе, балаларға... Яһалма витаминдар улар япраҡ йә еләк түгел, улар - синтетика. Беҙҙең организм уларға ҡаршы тора ла, һаҡлана ла алмай. 1 грамм С витамины ғына ла беҙгә кәрәкле дозанан 25 тапҡырға артыҡ. Был осраҡта бер төймә витаминды 1 литр һыу менән эсергә кәрәк. Был хаҡта, әлбиттә, беҙгә бер табип та әйтмәй. Синтетик витаминдар организмыбыҙға көсләп индерелеп, бары тик һәләкәт кенә яһай. Ә үләндәр аша ингән витаминдар организмға "һөжүм" итмәй, уны "яулап алмай", уларҙың кәрәклеһе генә һеңә, ә ҡалғаны үҙ юлы менән сығарыла ла.

Шуның кеүек, зыянлы аҙыҡ һәм дауалау ысулдары күп ул беҙҙә. Мәҫәлән, йодлы тоҙ алабыҙ. Ә ул йодтың тоҙ һауытын асҡас уҡ осоп бөткәнен белмәйбеҙ. Икенсе көн был тоҙобоҙҙа йод әҫәре ҡалмай. Был осраҡта, йодлы тоҙ ҡулланғы килгәндә, аптеканан һоп-һоро диңгеҙ тоҙон алығыҙ. Таҙартылмаған, тәм-том, еҫле майҙар ҡушылмағанын, иң осһоҙон. Был тоҙҙо ябай тоҙ кеүек ашҡа ҡулланырға мөмкин.

Йодтың иһә кешегә файҙаһы ҙур. Рус армияһында һалдаттарҙың рухын күтәреү өсөн араҡы бирелһә, борондан Һиндостан, Египет армияларына йодлы иҙелмәләр таратылған. Быны Наполеон да армияһында ҡулланған. Йод етешмәү аң кимәле түбәйәнеүгә килтерә. Йод ул интеллект дарыуы. Уны бигерәк тә мәктәптә уҡыған балаларға бирергә кәрәк. Баланың хәле бөтә, йоҡоһо туймай, хәтере насарая, башы ауырта, гемоглобины төшә икән - уға йод етешмәй. Рәсәйҙә 35 процент халыҡ, үҙе лә белмәйенсә, йод етешмәүҙән ауырый һәм кәрәкмәгән дауалар ала.

Традицион медицина, тигән термин алда йөрөй бөгөн. Традицион медицина - ул беҙҙең медицина түгел, ул рәсми медицина. Ул донъя кимәленән күҙәтеү ул. Ә беҙҙең медицина - халыҡ медицинаһы. Беҙҙең медицина ул гирудотерапия, йәғни һөлөк һалыу, массаждар, мануаль терапия, йәғни табиптың һөйәкте, быуындарҙы, эске ағзаларҙы ҡул ярҙамында дауалауы (һылауҙар, быуын ултыртыу, һөйәкте төҙәйтеү һ.б.). Ә иң беренсе сираттағыһы - үҙ ерлегебеҙҙә үҫкән үләндәр, емеш-еләк, ағас ҡабығы, үҫемлектәр менән дауаланыу. Ә ауырымауҙың, сәләмәт булыуҙың иң тура юлы - үҙ ерлегеңдәге ризыҡтар менән туҡланыу.

Бөгөн беҙҙең медицина донъя буйынса 130-сы урынды биләй. Батша заманында ул 8-се, ә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 15-селә була. Япон медицинаһы алдынғылар сафында, сөнки унда табиптарҙың 50 процентына ғына дарыу ҡулланыу рөхсәт ителә, ҡалған яртыһы бары тик үләндәр менән генә дауалау хоҡуғына эйә. Уларҙа файҙалы үҫемлектәрҙең 160 төрө генә бар, ә беҙҙә? Ошларҙан сығып, аңлы булайыҡсы...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Уҙған көндәрҙә Өфөләге Конгресс-холда үткән II республика ата-әсәләр форумының пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов тәүгә "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалын тапшырҙы. Наградалар менән бала тәрбиәләүҙәге ҡаҙаныштары, ғаилә ҡиммәттәрен һәм йолаларын һаҡлауға һәм нығытыуға ҙур өлөш индергәндәре өсөн дүрт ғаилә билдәләнде. Бөтә бүләкләнгән ғаиләләр 100 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата бүләк ала.

✓ 9-10 июндә Сибай ҡалаһында һәм Баймаҡ районында "Урал аръяғы-2018. Уңайлы инвестиция мөхите - эшҡыуарлыҡты үҫтереү нигеҙе" иҡтисади форумы ойошторола. Форум эшендә 300-ҙән ашыу делегат - федераль һәм төбәк власы органдары, ҙур сәнәғәт предприятиелары, фәнни үҙәктәр һәм белем биреү ойошмалары, кесе һәм урта эшҡыуарлыҡҡа булышлыҡ итеү һәм уларҙы үҫтереү институттары вәкилдәре ҡатнаша.

✓ Рәсәй сифат системаһы 82 сауҙа маркаһының "Крәҫтиән" класындағы (72,5 процент майлылыҡтағы) аҡ майын тикшергән һәм уның һөҙөмтәләрен баҫып сығарған. Сифатлылар исемлегенә "Бәләбәй" майы ингән. 10 май төрө сифатһыҙ тип танылған, шул иҫәптән "Крестьянское из Башкирии" һәм "Сулимовское "Башкирское" майҙары. Әммә был ризыҡтар республикаға ҡарамай - уларҙы Силәбе предприятиелары етештерә, тип билдәләне Рәсәй сифат системаһы белгестәре.

✓ Өфөлә бензиндың хаҡы айына бишенсе тапҡыр ҡиммәтләнде. Баш ҡала водителдәре һуңғы тапҡыр хаҡ артыуын уҙған аҙнаның аҙағында күҙәткәйне. Шаршамбы, 23 майҙа, Өфө заправкаларында яңы прайс-лист күрһәтелгән. Хаҡ бер юлы 60 тингә күтәрелгән. Шулай итеп, АИ-92 "Атум" маркалы бензин хәҙер 40,30 һум, АИ-95 "Атум" - 42,60 һум, АИ-92 - 39,70 һум, дизель яғыулығы 42,90 һум тора.

✓ 23 майҙа Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы ашығыс ултырышҡа йыйылды. Айына бишенсе тапҡыр бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡтарҙың артыуы уға сәбәпсе булды. Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәт етәкселеге хаҡтың объектив күтәрелмәгән осрағында саралар күрергә вәғәҙә итте.

✓ *Праймериз - ул кандидаттарҙы һайлау буйынса ҡыҙыҡлы процедура. "Берҙәм Рәсәй" кеүек гигант масштаблы партиялар илдә күп түгел, шуға күрә уның сафындағы иң яҡшы ағзаларҙы, иң яҡшы идеяларҙы асыҡларға кәрәк.*



ҠЫҪҠАСА

## ЮЛДАР, ЮЛДАР...

✓ **Баш ҡалала "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" проекты сиктәрендә Өфө шоссеһын ремонтлайҙар.** Яҡын арала юл хеҙмәттәре юл буйлап ямғыр аға торған ҡорамалдар ҡуйырға йыйына. Уй-ниәттәре буйынса, улар урамды ямғыр һәм ирегән һыуҙан ҡотҡарырға тейеш. "Өфө шоссеһы урамындағы эштәр менән бәйле 2018 йылдың 11 авгусына хәтлем Рәсәй урамынан Чудский урамына тиклем участкала транспорттың бер яҡтан күтәрелеүе ойошторола", - тип асыҡлыҡ индерҙе белгестәр. Был участкала эштәрҙең ҙур күләмле булыуы сәбәпле тығындар барлыҡҡа килеүе ихтимал, тип иҫкәртте юл хеҙмәттәре. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" программаһына бөтәһе Өфөләге 52 урам ингән, 2018 йылда йүнәтеләсәк участкаларҙың дөйөм оҙонлоғо - 81,6 саҡрым.

✓ **Өфө үҙәгендә бер айҙан ашыу ваҡытҡа транспорт хәрәкәте сикләнә.** 17 майҙан 24 июнгә тиклем Мостай Кәрим менән Чернышевский урамдары киҫелешендә хәрәкәт ябыла. Был йылылыҡ магистрален ремонтлау менән бәйле. Өҫтәүенә Мостай Кәрим урамында хәрәкәт итеү - тулыһынса, ә Чернышевский буйынса иһә юлдың яртыһы ябыла. Шулай уҡ Төньяҡ инеү юлынан Чудинов урамына тиклем Октябрь проспектына тиклемгә майҙанда юл ремонтлау эштәре алып барыла. Уның оҙонлоғо 2,1 саҡрым тәшкил итә. Хәҙер был участкала хәрәкәт ауырлашҡан - бында асфальтты элекке ҡатламдан таҙартыу, шулай уҡ люктарҙы алмаштырыу эштәре бара, юл ҡатламын капиталь ремонтлауҙы 20 октябргә тиклем тамамлау ҡуҙаллана, тип хәбәр итә Өфөнөң Орджоникидзе районы хакимиәте.

✓ **Өфөлә Ҡорбан байрамына Ҡорбан салыу үҙәге булдырырға ниәтләйҙәр.** Республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Илшат Фәзрахманов һүҙҙәренсә, байрамға малды баш ҡалалағы 18 мәсет биләмәһендә саласаҡтар. Яңы ойошторолған Ҡорбан салыу үҙәге ветеринар оҙатыу документын электрон формала рәсмиләштерергә, идентификацияланған малды салырға һәм тейешле экспертизалар үткәрергә мөмкинлек бирәсәк, тигән ышаныста властар. Ҡорбан салыу үҙәге Өфө янындағы Зинино ҡасабаһында булаcаҡ тип ҡуҙаллана. 2018 йылда мосолмандарҙың изге Ҡорбан байрамы 21 августа билдәләнә.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Баш ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәне өс төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин булды: уҙған аҙнаның иң сағыу ваҡиғалары; алдағы аҙнала үтәсәк саралар һәм айырым мәҡәләгә торошло көнүҙәк темалар.**

# ЯҘҒЫ БАЛ ҺӘМ...

## праймериз тураһында хәбәрҙәр

Беренсе төркөм мәсьәләләре буйынса Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Муниципаль берәмектәр конгресы ағзаларының отчет-һайлау йыйылышында ҡатнашыуы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп китте. "Был сараның әһәмиәте шунда: бөгөн Рәсәйҙә граждандарҙың урындағы үҙидаралыҡҡа, ҡанундар сығарыу эшмәкәрлегендә ҡатнашыуға, урындағы үҙидаралыҡ темаһы буйынса үҙ тәкдимдәрен Федерация Советына, РФ Дәүләт Думаһына, РФ Хөкүмәтенә әҙерләп ебәреү хоҡуғын тормошҡа ашырыуҙың һөҙөмтәле системаһы формалаштырыла. Иң яҡшы муниципаль практикаларҙы ил буйынса таратыу менән дүрт ҙур ойошма: Урындағы үҙидаралыҡтың Бөтә Рәсәй советы, Муниципаль үҙидаралыҡтарҙың Бөтә Рәсәй конгресы, Баш ҡалаларҙың һәм эре ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһы, Рәсәй ҡалалары союзы шөғөлләнә. Был ойошмаларҙың барыһында ла Өфө етәксе органдарҙа вәкәләткә эйә һәм шул арҡала абруйлы федераль майҙансыҡтарҙа баш ҡаланы борсоған һорауҙарҙы, мәсьәләләрҙе күтәреп сыға, Рәсәйҙә урындағы үҙидаралыҡ системаһын артабан үҫтереү буйынса тәкдимдәр һәм инициативалар менән сығыш яһай алабыҙ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Уҙған йыйылышта ла ойошма эшмәкәрлегенә һәм киләсәккә пландар кеүек мөһим мәсьәләләр ҡаралды. Пландар бик етди, тәү сиратта улар РФ Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә билдәләнгән сараларҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтелә. Шуға күрә, коллегалар, барлыҡ материалдарҙы һәм тәкдимдәрҙе дөйөмләштереп, йыйылышта әйтелгәндәрҙе киләсәктә ҡулланма итеп алырға кәрәк".

Шулай уҡ Бөтә Рәсәй кимәлендә үткән "За бег" ярым-марафонында быйыл Өфөнөң дә ҡатнашыуын айырып күрһәтергә кәрәк. Беренсе тапҡыр ғына уҙғарылыуына ҡарамаҫтан, ул 1500 өфөлөнө йыйҙы. "Ойоштороусыларҙың заманса ҡарашын билдәләр инем. Сара йүгереү буйынса Европа ойошмаларының иң яҡшы стандарттарына тап килә. Ҡатнашыу өсөн 450-2000 һум түләргә кәрәк булыуға ҡарамаҫтан, мең ярым кешенең теләк белдереүе ҡыуаныслы. Йүгереүселәр юғары кимәлдә хеҙмәтләндерелде.

Был саранан бер көн алда, 19 майҙа, "Динамо" стадионында пенсионерҙарҙың ҡала спартакиадаһы үтте. Спортсылар еңел атлетика, йөҙөү, өҫтәл теннисы, электрон ҡоралдан атыу, сатраш, дартс, ҡатнаш эстафета буйынса көс һынашты. Командаларҙың иң яҡшы вәкилдәре республика этабындағы ярышта көс һынашасаҡ, еңеүселәр Новосибирскиҙа үтәсәк Бөтә Рәсәй ярыштарында республика данын яҡлаясаҡ. Был бик мөһим сара һәм Өфөлә спорт менән шөғөлләнеүсе өлкән йәштәгеләр өсөн тиҫтәләрсә сара ойошторола. Уҙған аҙнала ололарҙың "Яратам һине, тормош!" 7-се художество үҙешмәкәр фестивале үтте. 17 майҙа урындарҙа һайлап алыу турын үтеүсе 30 коллективтың концерты булды. Унда еңеүселәр 4-5 октябрҙә Ололар көнөнә һәм Ғаилә йылына арналған гала-концертта сығыш яһаясаҡ. Артабан да был йүнәлештә эшмәкәрлекте көсәйтергә кәрәк, сөнки баш ҡалала 300 меңдән ашыу оло йәштәге граждан йәшәй. Уларҙың үҙ мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыуы өсөн уңайлы шарттар тыуҙырырға кәрәк", - тип билдәләне Ирек Ишмөхәмәт улы һәм алда торған аҙнаның да ваҡиғаларға бай буласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Ысынлап та, был аҙнала республиканың барлыҡ мәктәптәре сығарылыш синыфы уҡыусылары менән хушлаша, ә инде баш ҡалала ошо уңайҙан сираттағы Яҙғы бал үтә. Ул Ленин урамынан, Сығарылыш синыфы уҡыусылары аллеяһынан башлана. Бында һәр кем кисәге мәктәп уҡыусыларының киләсәктә кем булырға теләүе, уларҙың ниндәй профессия һайлауы менән таныша аласаҡ. "Уфанет" компанияһы ойошторған сараның төп темаһы булып тыуған төбәк, тыуған край тора. Һәм, әлбиттә, йылдағыса, бейеүҙәр, төрлө сюрприздар көтә.

"27 май 1000 велосипедсы көнө үтәсәк. Ул Ленин исемендәге майҙандан башланып, "Ватан" паркында тамамланасаҡ. Велопарадтың оҙонлоғо - 10 километр. Унда барлыҡ йәш категорияһындағы велосипедсыларҙың ҡатнашыуын көтәбеҙ", - тине Ирек Ялалов. Ойоштороусылар кешеләрҙән велосипедсы яһап, элекке рекордты яңыртырға теләй. Ленин исемендәге майҙанда теркәү иртәнге сәғәт 8-ҙә башланып, велопарадҡа старт 10-да бирелһә, "Ватан" паркында күңел асыу саралары киске 5-кә тиклем дауам итәсәк.

Шулай уҡ был көндә традицион "Йәшел марафон" үҙенә саҡыра. Бер үк ваҡытта ул Рәсәйҙең 56 ҡалаһында, сит илдәрҙә үтә. Унда өфөләрҙән 150 кеше ҡатнашасаҡ. Маршрут Зорге урамынан башланып, Урман паркы зонаһы, Ғафури паркы аша үтәсәк. Бындай марафон беренсе тапҡыр 2012 йылда уҙғарыла һәм ошо ваҡыт эсендә унда 600 меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Был проект хатта БМО-ның тирә-яҡ мөхитте һаҡлау программаһы буйынса планетаның экологияһын үҫтереүҙәге өлөшө өсөн наградлана.

Баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтар өсөн тағы бер яңылыҡ һәм иғтибарға лайыҡ сара - ул да булһа ҡала майҙандарын мәҙәни саралар менән тултырыу маҡсатында АРТ-мөхит булдырыу. Хәҙер августа тиклем паркатарҙа төрлө концерттар һәм мәҙәни-күңел асыу саралары ойоштороласаҡ. Уларҙың анонстары менән ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында танышырға мөмкин.

Барыбыҙға ла мәғлүм булыуынса, быйыл көҙ БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға һайлауҙар үтәсәк. Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та алдан тауыш биреүҙә - праймеризда ҡатнашасағын белдерҙе һәм үҙенең ҡарарын былай тип аңлатты: "Мин - "Берҙәм Рәсәй" партияһының һәм төбәк сәйәси советының ағзаһы. Праймериз - ул кандидаттарҙы һайлау буйынса ҡыҙыҡлы процедура. "Берҙәм Рәсәй" кеүек гигант масштаблы партиялар илдә күп түгел, шуға күрә уның сафындағы иң яҡшы ағзаларҙы, иң яҡшы идеяларҙы асыҡларға кәрәк. Бының өсөн иң яҡшы ысул - дебаттар. 3 июндә праймеризда ҡатнашыусылар өсөн тауыш бирергә саҡырам. Шулай итеп эшебеҙҙең команда стилен, властың республика органдары менән бер командала булыуыбыҙҙы, тыуған ҡалабыҙҙың һәр аныҡ урамында, һәр ихатаһында, тотош ҡалабыҙҙа барлыҡ киң ҡоласлы проекттарҙы тормошҡа ашырыуға берҙәм тотоноуыбыҙҙы күрһәтергә теләйбеҙ. Мин партия яҡлылар һәм партия ағзалары фирҡәгә ҡала халҡы араһында абруй яуларға ярҙам итергә бурыслы, тип уйлайым".

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә 14-15 июндә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын дауалау буйынса I Рәсәй-Ҡытай конгресы үтә. Форумда сит илдәрҙән меңдән ашыу белгес һәм 35 ҡунаҡ ҡатнаша. Дауалау алымдарын һәм операцияларҙы трансляциялауҙы тикшереү генә түгел, шулай уҡ генетика, молекуляр биология, яңы дарыуҙар тармағы буйынса кардиологиялағы фундаменталь тикшеренеүҙәр менән танышыу ҡуҙаллана.

✓Рәсәй тимер юлдарының тимер юлында, Башҡортостан биләмәһенән йөрөгән ҡала яңы поездарында йәрәхәтләнеүҙәрҙе кәметеүгә йүнәлтелгән "Иғтибар - балалар!" акцияһы башланды. Май һәм июнь айҙарында компания белгестәре ҡала яңы поездарында уҡыусылар өсөн хәүефһеҙлек дәрестәрен үткәрә.

✓Өфөлә быйыл йәй туғыҙ пляж ойошторола. Уларҙың һәр береһе алдан тикшерелә һәм махсус пляж инвентаре менән йыһазландырыла, тип хәбәр итә Өфөләге Граждандарҙы яҡлау идаралығының матбуғат хеҙмәте. Әле ҡотҡарыусылар пляж миҙгеленә әҙерлек алып бара. Өфөләге эҙләү-ҡотҡарыу отряды водолаздары рәсми пляждарҙың һыу яткылыҡтарын таҙартыу менән шөғөлләнә.

✓Өфөлә 6-8 июндә Халыҡ-ара экология форумы, Экология марафоны һәм III "Экология. Технологиялар. Тормош" махсуслаштырылған күргәҙмәһе үтә. Республика Хөкүмәтендә тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйылған. Иң яҡшы технологияларҙы индереүҙе үҫтереү форумдың төп темаһы була.

✓ Быйыл Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры 98-се театр миҙгелен япты һәм шунда уҡ Йәйге театр миҙгелен асты. Ул 29 июнгә тиклем дауам итә һәм ай дауамында тамашасыларҙы балалар һәм өлкәндәр өсөн спектаклдәр менән ҡыуандыра. 20 июнь Александро Касонаның "Иң бәхетле төн!" пьесаһы буйынса яңы премьера көтөлә. 99-сы театр миҙгелендә театр бинаһында ҙур ремонт сәбәпле, спектаклдәр башҡа сәхнә майҙансыҡтарында үтә.

✓1 июндән 31 октябргә саҡлы ҡала яңы электричкаларында үҙең менән велосипед йөрөтөү бушлай була. Өҫтәүенә йөктә алыр өсөн бер ниндәй документ тултырырға кәрәкмәй. Велосипедты бушлай йөрөтөү буйынса акция велохәрәкәткә булышлыҡ итеүгә йүнәлтелгән.

*КӨН ҠАҘАҒЫНА*

# СЕБЕШТЕ - КӨҘ,

## белемде яҙ һынайҙар...

**Уҡыусыларҙың ғына түгел, ата-әсәләрҙең дә берсә тулҡынланып, берсә хәүефләнеп көткән мәле етте. Тулҡынланып, сөнки сығарылыш уҡыусылары мәктәпте тамамлай, каникулға сыға, улар менән бергә ата-әсәләр өсөн дә "каникул" башлана. Хәүефләнеп, сөнки һәр ата-әсә балаһының имтихандарҙы нисек тапшырырын уйлап борсола.**

Ҡала округы хакимиәте өсөн дә был мәсьәлә ошо көндәрҙә көнүҙәк темаларҙың береһенә әүерелә. Ни тиһәң дә, имтихан тапшырыу пункттарының әҙерлеге, уларҙа хәүефһеҙлек таьмин итеү, кәрәк ваҡытта медицина ярҙамы күрһәтеү һәм башҡа ошондай ойоштороу эштәре өсөн муниципалитет һәм тейешле хеҙмәттәр яуаплы. Шуға ла сираттағы оператив кәңәшмәлә муниципаль белем биреү ойошмаларын тамамлаусыларҙы дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына әҙерләү төп темаларҙың береһе булды һәм уның буйынса Өфө ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова бәйән итте.

"Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы - урта һәм төп белем биреү программаһын үҙләштереүҙе йомғаҡлаусы мотлаҡ имтихан, - тип башланы сығышын Елена Роберт ҡыҙы. - 11-се синыфты тамамлаусыларҙың йомғаҡлау аттестацияһы - Берҙәм дәүләт имтиханы, ә 9-сы синыф өсөн Төп дәүләт имтиханы формаһында уҙғарыла. 2009 йылдан алып БДИ формаһы мотлаҡҡа әүерелде. Йомғаҡлау имтихандары һөҙөмтәләре юғары һәм урта һөнәри уҡыу йорттарында ҡабул итеү һынауы булараҡ ҡарала. Ағымдағы уҡыу йылының яңылығы булып 9-сы синыфты тамамлаусылар өсөн рус теленән йомғаҡлау әңгәмәләшеүен һынап ҡарау тора, йәғни был форма рус теленән әҙәбиәтен уҡытыу концепцияһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә уҡыусыларҙың телмәр үҫешен тикшереү өсөн индерелде. Быйылға уның һөҙөмтәләре уҡыусыларҙы дәүләт йомғаҡлау имтиханына инеүгә рөхсәткә йоғонто яһамаясаҡ. Киләһе йылдарҙа инде йоғонтоһо буласаҡ. Был апробацияла ҡаланың 8 мәғариф учреждениеһынан 700 бала ҡатнашты.

Быйыл 9-сы синыфтарҙан - 10417, 11-селәрҙән 4936 уҡыусы, уҙған йылғы сығарылыштарҙан 394 кеше Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырасаҡ. 9-сы синыф дүрт предмет: рус теле һәм математика - мотлаҡ, һәм ике фәндә - һайлау буйынса имтихан бирә. Аттестат алыу өсөн уҡыусыға барлыҡ дүрт предметты ла кәм тигәндә өс мәрәйгә тапшырырға кәрәк. Быйыл 9-сы синыфтар араһында йәмғиәтте өйрәнеү, информатика һәм ИКТ, физика, биология иң популяр предметтар булып иҫәпләнә. 11 синыфтарҙан күпселек математиканы, артабан йәмғиәтте өйрәнеү, физика, информатиканы һайлаған. Быйылғы уҡыу йылы 1-се, 9-сы, 11-се синыфтар өсөн 25 майҙа тамамаланһа, башҡа синыфтар өсөн 31 майға тиклем дауам итә. Уҡыу йылы һуңында йәйге каникул ваҡытында балаларҙың сәләмәтлеген һаҡлау, уларҙың мәшғүллеген таьмин итеү, йәйге ялдарын ойоштороу мәсьәләләре буйынса ата-әсәләр йыйылыштары үтә".

Елена Роберт ҡыҙының сығышынан һуң Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙенең сираттағы тос ир һәм мәр һүҙен әйтмәй ҡалманы. "Һуңғы ҡыңғырау тантанаһы көнөндә ҡаланың сауҙа нөктәләрендә алкоголле эсемлектәр һатыу тыйыла. Беҙ ата-әсәләрҙе был бала саҡ менән хушлашыу байрамы, шулай уҡ сығарылыш кисәләре кафеларҙа йәки рестарандарҙа түгел, ә икенсе тыуған йортҡа әйләнгән белем усағында үтергә тейешлегенә инандырҙыҡ. Был, минеңсә, һәр йәһәттән дә: киләсәктә бөгөнгө уҡыусыларҙың һағынып һөйләр хәтирәһе, хәүефһеҙлек күҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә лә, ябай әхлаҡ ҡағиҙәләренән ҡарағанда ла дөрөҫ. Һуңғы ҡыңғырау һәм сығарылыш кисәләрен төнгө клубтарҙа үткәреү - хата ҡараш. Әлбиттә, минең менән бәхәсләшә лә алаһығыҙ, әммә әлегә ҡала дилбегәһе беҙҙең ҡулда һәм беҙ шулай уйлайбыҙ. Беҙҙе хуплаған ата-әсәләр комитеттарына рәхмәт. Бергәләшеп, белем усаҡтарына мәктәп формаһын кире ҡайтарҙыҡ бит. Баш тартыуы еңел булды, әммә кире ҡайтарыу ауырға тура килде. Хәҙер сығарылыш синыфы уҡыусыларына ҡарағыҙ әле - күҙҙәр ҡамаша! Тимәк, мәктәпкә бәйле сараларҙы айыҡ үткәреү ҙә тиҙҙән ғәҙәти күренеш кеүек ҡабул ителә башлаясаҡ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы һүҙен йомғаҡлап.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ПОЧЕТЛЫ КЕНӘГӘЛӘ УЛАР

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте төбәк һәм Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиадаларҙа еңеү яулаған һәләтле уҡыусыларҙы тәбрикләне.**

Бала кешенең бәләкәй генә уңыштарын да күрә белеү, хыял ҡанаттарын һындырмай дәртләндереп тороу үтә мөһим. Был хаҡта заман ата-әсәләре яҡшы белә: балаларының һәләттәрен асыу өсөн бәләкәйҙән төрлө түңәрәктәргә йөрөтә, ҡыҙыҡһынған һөнәре менән профессиональ рәүештә шөғөлләнергә ярҙам итә. Өфө ҡала хакимиәте етәкселеге тап бына шундай күңелдәренә аң-белемгә, ижадҡа ынтылыш һалынған балаларға йыл да наградалар тапшыра.

Быйыл баш ҡаланың төбәк һәм Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиадаларҙа еңеү яулаусы 136 уҡыусыһы сертификаттар алды. Тантаналы сара астрономия, информатика, физика, математика предметтары буйынса төбәк олимпиадалары призерҙарын тәбрикләүҙән башланды. Артабан гуманитар йүнәлеш, тәбиғәт фәндәре, туған һәм сит телдәр буйынса төбәк олимпиадаларында еңеүселәр рәтенә ингән уҡыусылар бүләкләнде. Уларға ҡотлау һүҙҙәрен еткереп, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов былай тине:

- Өфөлә һәм Башҡортостанда һәләтле балаларға ярҙам итеү йәһәтенән бик күп эштәр башҡарыла, төрлө олимпиадалар, конкурстар, саралар үткәрелә, - тине Сынтимер Биктимер улы уҡыусыларҙы һәм уҡытыусыларҙы ҡотлап. - Былылғы 2017-2018 уҡыу йылында Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаларында 23 предмет буйынса Өфө мәктәптәрендә белем алыусы 65 мең уҡыусы ҡатнашҡан. Улар араһынан 15 уҡыусы олимпиадаларҙың йомғаҡлау этабында иң юғары күрһәткестәргә өлгәшкән. Һеҙҙе егәрлелек, түҙемлек, яуаплылыҡ кеүек сифаттар берләштерә. Уңышҡа өлгәшеү өсөн иң мөһиме үҙ көсөңә ышаныс талап ителә. Һеҙҙе ошондай ышаныс уятыусы ата-әсәләрегеҙгә, уҡытыусыларығыҙға, тәрбиәселәрегеҙгә рәхмәтемде белдерәм...

Шулай уҡ Сынтимер Биктимер улы Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың, һәләтле уҡыусылар республиканан ситтә юғары белем алған хәлдә лә, яраҡган ҡалаларына ҡайтып, ата-әсәләре нигеҙ һалған матур традицияларҙы дауам итер, тигән теләк һүҙҙәрен еткерҙе. Һәләтле балаларҙы тәбрикләү тантанаһы Өфө ҡалаһының талантлы йәштәренең Почетлы кенәгәһенә тәүге исемдәрҙе теркәү, уҡыусыларҙың ҡултамғаларын алыу менән тамамланды.

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА.**

*БАШ ҠАЛАМ*

**Бына нисәнсе тапҡыр инде республика буйынса "Музейҙар төнө" уҙа. Был ваҡытта телӛгән һәр кем телӛгән музейға сәйәхәт ҡыла ала. Был юлы үткәрелгән сараның шәмбенән йәкшәмбегә ҡарай уҙғарылыуы ла уңайлы булды - эш ваҡыты түгел, бер ҡайҙа ашығаһы юҡ.**

# МУЗЕЙҘАР БУЙЛАП...

Бәләкәй ҡыҙым менән был төндө В.И. Лениндың йорт-музейынан башланыҡ, сөнки, ни тиһәң дә, 19 май элек Пионерия көнө була торғайны һәм был дата менән бала саҡ хәтирәләре бәйле. Лениндың йорт-музейында беренсе тапҡыр 1985 йылда булғайным. Әле лә барыһы ла нәҡ элеккесә, әйтерһең дә, бында тарих үҙе туҡтап, ҡатып ҡалған. Ҡыҙым балалар өсөн Ленин тураһындағы китаптар менән танышты, Надежда Крупская менән ҡыҙыҡһынды. Музейҙа 1938 йылда А. И. Крылов аша Н. К. Крупская тапшырған сәғәт - ҡәҙерле ҡомарткы булып һаҡлана. Шулай уҡ 1986 йылда А.Н. Романовтың ҡабырсаҡтар ҡулланып башҡарған эше иғтибарҙы йәлеп итте.

Артабанғы юлыбыҙ "Мираҫ" галереяһына илтте. Бында билдәле рәссамдарҙың картиналары менән таныштыҡ. Почта музейында ла бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәт белдек. Нуленсе километрҙа фотоға төштөк. Һәр музейҙа оҙаҡҡа туҡталдыҡ. Башҡортостан Республикаһының Милли әҙәбиәт музейы филиалы - Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында ҙур китап күргәҙмәһе ҡаршыланы. Шулай уҡ бүлмәләрҙең береһендә күргәҙмә-сауҙа ойошторолғайны. Ваҡыт һиҙелмәй ҙә үтте. Шулай ҙа ҡыҙымды Нестеров исемендәге музейға инергә күндерҙем.

Ғөмүмән, алты сәғәт буйы баш ҡаланың музейҙарын ҡыҙырып, бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәт алып, һыңғай кисерештәр, хистойғоларға байып ҡайттыҡ. Һәм башта шәп бер фекер яралды: "Музейҙар төнө" кеүек бер кисте баш ҡаланың иҫтәлекле урындарына экскурсия ла ойоштороһон ине ул, Өфөлә бындай урындар бик күп, иҫке ҡалала хатта һәр йорт - үҙе бер тарих, тигәндәй. Юҡһа, уларҙың күптәрен балалар, йәштәр генә түгел, хатта беҙ, ололар ҙа, белмәйбеҙ. Әгәр ошондай сара ла ойошторолһа, был ғаилә менән бергәләп ял итеүҙең, үҙеңде үҫтереүҙең, камиллашыуҙың бер ысулы булыр ине, минеңсә. Эйе, хәҙер бөтөн мәғлүмәтте интернеттан табырға мөмкин, әммә бөтөн ғаилә менән ысынбарлыкта тарихи урындарҙа йөрөү, үҙ күҙҙәрең менән күреү - ул бөтөнләй башҡа тойғолар тыуҙыра, үҙенсәлекле тәрбиә сараһы ла булып тора.

**Алтынай НУРЫЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Яҡындан насар күрһәң...

❖ 5-10 секунд алыҫҡа ҡарағыҙ, күҙҙәрегеҙҙе ҡыҫығыҙ, 3-5 мәртәбә асып-йомоп алығыҙ. Күнегеү күреү һәләтен яҡшырта, мускулдарын әүҙемләштерә. 1 аҙна дауамында эшләгеҙ. Әммә күҙгә операция яһалһа, аҡ һалһа, был күнегеүҙәр тыйыла.

### Холестерин

❖ Холестеринды кәметеү өсөн 2-3 шаҡмаҡ юғары процентлы ҡара шоколад ашарға.

❖ 300 г әстерхан сәтләүеген, күрәгә, кипкән йөҙөм, 2 лимонды ҡабығы менән (орлоғон ташларға) ит турағыстан үткәрергә лә, 300 г бал ҡушып болғатырға. Ашағандан һуң 1-әр балғалаҡ ҡабул итергә.

❖ Һуған, һарымһаҡ, тәмләткес үләндәр, ҡуҙаҡлылар, дингеҙ аҙыҡтары, әстерхан сәтләүеге, һоло бутҡаһы һәм таҙартылған үсемлек майы холестеринды төшөрөүгә ярҙам итә.

### Шәкәр ауырыуына ҡаршы

❖ 300 г туралған һуғанға 100 г бал, 600 г ҡоро шарап һалып, 2 тәүлек төнәтергә, йыш ҡына болғатып торорға. Һөҙөргә һәм ашар алдынан 3-4 ҡалаҡ эсергә.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 4-5 башлы һуғанды әрсеп, ваҡ итеп турарға ла, 2 литрлы быяла һауытҡа һалырға һәм өҫтөнә сыҡҡансы ҡайнаған һәм һыуытылған һыу ҡойорға. Төнәтмәне ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3 мәртәбә 1/3 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 17 көн. Быяла һауытҡа көн һайын 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу өҫтәп торорға, төнәтмәне бүлмә йылылығында һаҡларға. Был дауаны йылына 1 мәртәбә эшләргә.

### Сөгөлдөр

❖ Сөгөлдөр ҡан баҫымы юғары булыуҙан һаҡлай. Ул магнийға бай. Ҡан баҫымы күтәрелгәндә 1:1 күләмендә сөгөлдөр һутына бал ҡушырға һәм 1 стакан эсемлекте көнө буйы 3-4-кә бүлеп эсеп бөтөргә.

❖ Ҡан ҡуйырғанда ла сөгөлдөр һуты файҙалы, тирене лә йәшәртә, организмға шлактар ултырыуҙан да һаҡлай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Евразияла йәшәгән күсмә халыҡтарҙың тарихында ҡыпсаҡтар ҙур урын тота. Заманында улар Дунайҙан алып Иртышҡа тиклем йәшәгән һәм башҡорттарға ла уларҙың йоғонтоһо көслө булған.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Ибраһим бәйғәмбәрҙең Вавилон халҡы менән бәхәсләшеүе

Ә кешеләр: "Яндырығыҙ уны һәм аллаларығыҙға уны еңергә ярҙам итегеҙ", тигән. Кешеләр ҙур соҡорға утын тултырып, ут төртә һәм Ибраһимды аяҡ-ҡулынан бәйләп, таҡтаға һалып, утҡа төшөрә. Ә Ибраһим бер туҡтауһыҙ: "Лә илләһи иллә анта собханаҡа лаҡа-л-хамд валака-л-мөлк, лә шәриҡә ләҡ",тип ҡабатлай, йәғни "Алла, Һинән башҡа бер ни юҡ, бөтөн дан һәм хакимлыҡ һинең ихтыярында, Һиңә тиңләшеүсе бер кем юҡ". Кешеләр Ибраһимды уттан тартып сығарғас, ул: "Хәсбуналлаһу үә ни мал-л-вәкил", йәғни "Беҙгә Алланан башҡа бер ни кәрәкмәй. Ул беҙҙең Ярҙамсыбыҙ һәм Ышанысыбыҙ", ти. Ә Алла: "Беҙ уттың Ибраһим өсөн һалҡын һәм хәүефһеҙ булыуын бойорҙоҡ. Улар уны үлтерергә уйлағайны, беҙ уны үҙ ихтыярыбыҙ менән ҡотҡарҙыҡ, ә тегеләр ҙур юғалтыу кисерҙе. Ибраһим ысын мәғәнәһендә Нух бәйғәмбәрҙең тоғро эйәрсене булып, кешеләрҙе бер Аллаға ғына ышанырға өндәне, динле булырға саҡырҙы. Ул үҙенең Хакимына күп аллалыҡтан азат булған саф йөрәгенән мөрәжәғәт итте", ти.

### Исмәғилдең тыуыуы

Ибраһим бәйғәмбәр Алланан үҙенә яҡшы нәҫел биреүен һораған. Аллаһы Тәғәлә уның үтенесен ҡабул итеүен һәм уны үтәйәсәген белдергән. Оҙаҡ йылдар Иерусалимда йәшәгәндән һуң бәйғәмбәрҙең ҡатыны Сара: "Алла мине бала табыуҙан мәхрүм иткәс, һин Хәжәргә өйләнә алаһың. Бәлки, ул өмөттәреңде аҡлап һиңә балалар табыр", тигән. Хәжәр ауырға ҡала һәм хакимәһе Сара алдында ғорур йөрөй башлай. Сара унан бик көнләшә һәм Ибраһимға Хәжәр менән нисек теләйһең, шундай мөнәсәбәттә бул, ти. Ҡурҡыуға ҡалған Хәжәр бер шишмә янына килә. Шунда уның алдында фәрештә пәйҙа була һәм тиҙҙән ул табасаҡһың, уға Исмәғил тип исем ҡушығыҙ. Улың кешеләр араһында айырым урын биләйәсәк, тип Хәжәрҙе тынысландыра. Хәжәр Аллаға рәхмәт уҡый. Тиҙҙән ир балаһы тыуа һәм уға Исмәғил тип исем ҡушалар. Был ваҡиға Исхаҡ тыуғанға тиклем 13 йыл алдан, Ибраһим бәйғәмбәр 86 йәшендә саҡта була. Ибн Ҡасир әйтеүенсә, Сараның көнләшеүе сиктән сыға һәм ул күҙем алдында йөрөмәһен, тип Ибраһимға Хәжәрҙе ҡыуып сығарырға ҡушҡас, Алланың ҡушыуы менән бәйғәмбәр ҡатынының үтенесен үтәр өсөн Хәжәрҙе улы менән алыҫҡа, хәҙерге Мәккә ҡалаһы урынлашҡан ергә алып бара. Әл-Бохари билбау таҡҡан беренсе ҡатындың да Хәжәр булыуын бәйән иткән. Хәжәр билбауҙы Саранан эҙен яҙлыҡтырыу маҡсатында тағыр була, йәғни ул ҡайҙа барһа ла, билбауы эҙҙәрен һепергән. Ибраһим бәйғәмбәр улы Исмәғил һәм Хәжәр менән донъя гиҙеп оҙаҡ йөрөгән һәм бер мәл улар Зәм-Зәм шишмәһенән төньяҡтараҡ Изге йорт янына килеп етә. Ул ваҡытта Мәккәлә һыу ҙа булмай һәм кешеләр ҙә йәшәмәй әле. Бәйғәмбәр бер турһыҡ һыу менән финик емештәрен ҡалдырып, Хәжәр менән улын ташлап ҡайтып китә. Хәжәр уның артынан йүгерә һәм: "Ибраһим! Нисек инде һин беҙҙе бер кешеһеҙ, һыуһыҙ, ризыҡһыҙ ерҙә ҡалдыраһың?" - тип ҡысҡыра. Яуап бирмәгәс, ишетмәгәндер, тип ҡабат һорай. Бәйғәмбәр һаман өндәшмәгәс: "Беҙҙе бында ҡалдырырға Алла ҡуштымы?", - ти. Ибраһим "эйе" тигәнде аңлатып баш ҡаға. "Улайһа, Алла беҙҙе астан үлтермәҫ", тип Хәжәр балаһы янына китә. Ибраһим юлын дауам итә һәм Хәжәр үҙен күҙҙән юғалтыр ергә тиклем, йәғни Санийаға еткәс артына боролоп ҡарай ҙа, ҡулдарын күккә күтәреп: "Эй, Аллам! Мин нәҫелемдең бер нисәүһен Мәккәнең тәғәм ризыҡ үҫмәгән үҙәнендә, Һинең кешеләргә ҡағылырға тыйған, тирә-яғын хәүефһеҙ иткән Изге йортоң эргәһенә урынлаштырҙым. Уға теҙләнеп намаҙ уҡыр өсөн уларға мәрхәмәтле бул! Йортоңа хаж ҡылырға йөрөр, үҙҙәре менән емеш-еләк килтерһендәр өсөн саф йөрәкле кешеләрҙе ылыҡтыр. Улар намаҙ уҡып, Һинең Мәрхәмәтеңә рәхмәтен белдерһен", тип ялбарған.

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ТАҒЫ ЛА БАШҠОРТ ХАН

**"Бөйөк Башҡорт иле", "Башҡорт хан" китаптарының авторы Йәдкәр Бәширов менән сираттағы осрашыу мәлендә китаптарҙағы уҡыусы өсөн бик тә ҡыҙыҡ булған, әммә артыҡ сурытылмаған факттар, тарихи мәғлүмәттәр менән ҡыҙыҡһындым. Сөнки бөгөн күптәр был хандың булыу-булмауы йәки уның тап башҡорттоҡо булыуы һәм булмауы хаҡында ла бәхәс ҡора. Ошо урында әсенеп әйткем килә: ни өсөндөр беҙ булған данымыҙҙы, шәхестәребеҙҙе имеш-мимеш, шик-шөбһә аҫтына ҡуйырға яратабыҙ. Унан һуң был мәғлүмәттәрҙе икенсе халыҡтар "үҙҙәренеке" итеп күрһәтһә генә саң ҡаға башлайбыҙ. Әлеге мәл Башҡорт хан менән дә шулай булмаҡсы.**

➔ **Йәдкәр Әхәт улы, китаптарығыҙҙа телгә алынған ҡыпсаҡтар, половецтар һәм… башҡорттар араһындағы бәйләнештәрҙе асыҡлап китегеҙ әле. Ни өсөн был халыҡтарҙың башлығы Башҡорт хан булып сыға?**

- Урыҫ йылъяҙмаларын уҡып сыҡҡас, арҡырыға ла, буйға ла ентекләп өйрәнелгән был яҙмаларҙан бөгөн ниндәй ҙә булһа яңы нәмә табыу ҙа мөмкин түгел һымаҡ. Әммә ентекләберәк ҡараһаң, бар икән унда беҙҙең күҙҙән йәшерелгән факттар ҙа. Улай ғына ла түгел, был ҡомартҡыларҙың асылыр серҙәре байтаҡ әле. Бына, мәҫәлән, XII быуат ваҡиғаларын һүрәтләгән йылъяҙмаларҙа бер нисә тапҡыр ғына телгә алына Башҡорт хан. Шунда ла ул бушҡа ғына алынмай, ул Рәсәй дәүләтенең үтә мөһим ваҡиғаларында үҙәк ролдәрҙең береһен үтәгәнгә эләгә яҙмаларға.

Евразияла йәшәгән күсмә халыҡтарҙың тарихында ҡыпсаҡтар ҙур урын тота. Заманында улар Дунайҙан алып Иртышҡа тиклем йәшәгән һәм башҡорттарға ла уларҙың йоғонтоһо көслө булған. XI быуатта ҡыпсаҡтар Ҡара диңгеҙҙең төньяғына үтеп инә һәм бер нисә иттифаҡҡа берләшеп, шунда таралып ултыра. Урыҫтар тап бына шул ҡыпсаҡтарҙы половецтар тип атай. Аҙау диңгеҙе буйында өс иттифаҡтың береһен төйәк итәләр. Урыҫ йылъяҙмалары был диңгеҙҙе Луко-морье тип йөрөтә. XII быуатта Аҙау ҡыпсаҡтарының Тоғлой, Изай, Осолуҡ, Көбәк, Башҡорт исемле данлы хандары була. Башҡорт хандың ошондай исем йөрөтөүен ғалимдар ҡыпсаҡтар араһында башҡорттарҙың күп булыуы менән бәйләй. Ғәҙәттә, хандарҙың исеме лә уның милләт атамаһы менән алына йәки тотош халыҡтар бер хан исемен ала. Был осраҡта "Башҡорт" тигән исем уның халҡы исеменән алынған.

Башҡорт хан Уралда йәшәһәләр ҙә көньяҡ менән ныҡлы бәйләнеш тотҡан һәм ҡыпсаҡтарҙың барымта-ҡарымталарында әүҙем ҡатнашҡан боронғо башҡорттар менән бәйле. Шулай итеп, Ҡара диңгеҙ ярының төньяғындағы Аҙау ҡыпсаҡтары араһында төрлө тарихи осорҙарҙа көньяҡ урыҫ далаларының сәйәси һәм этник тарихында мөһим роль уйнаған башҡорт ырыуҙары ла булған.

XI быуат аҙағында көнбайыш ҡыпсаҡ иттифаҡтарын Аҙау ханы Бәнәк берләштерә. Уның ерҙәре Днепрҙан Бугҡа тиклем һуҙыла. Үҙенең оҙон ғүмере буйына ул Рус дәүләтенең беренсе дошманы булып ҡала. XII быуат башында Бәнәк баш булған иттифаҡ көсһөҙләнә башлай һәм яйлап бер нисә ҙур ғына урҙаға тарҡала һәм уларға Бәнәктең яҡындары баш булып ултыра. Ә Башҡорт ошо хандарҙың береһе нәҫеленән. Уның туғаны, күрәһең. Бәнәккә бик яҡын кеше булғандыр, сөнки атаһы урҙаһынан киткән Бәнәктең улы Свенш (Суныш) тап шул Башҡортҡа килә һәм уның сардары булып тоғро хеҙмәт итә. Был Бәнәк менән Башҡорттоң туғандар һәм икеһенең дә башҡорттар булыуын иҫбатлай.

➔ **Урыҫ дәүләтенең эске һуғыштары мәлендә кенәзлек Башҡорт хандан ярҙам һорай, тиеләр. Ни өсөн ярҙам итә уларға хан? Бында ниндәй сәйәсәт күҙаллана?**

- 1147 йылда Владимир Мономахтың ейәне Изяслав Мстиславович бөйөк кенәз титулын ала һәм тәхеткә ултыра. Уға ҡаршы Ростов-Суздаль кенәзе Юрий Долгорукий һуғыш башлай. 1149 йылда Долгорукий һәм уның менән иттифаҡтағы ҡыпсаҡтар Изяслав Мстиславовичты тар-мар итеп, Киевты ала. Икенсе йылына Изяслав Долгорукийҙы ҡаланан ҡыуып сығара. Унан Долгорукий Чернигов кенәздәренә һәм XII быуаттың илленсе йылдарындағы иң көслө Аҙау хандарының береһе булған Башҡорт ханға мөрәжәғәт итә. Башҡорт хан ярҙамға килә, сөнки Мономах нәҫелдәренең бер-береһе менән дошманлашыуы уның өсөн ҡулай ғына була. Берләшкән хәлдә улар ҡыпсаҡтарға ҡаршы ҙур көс була алыр ине. Быны яҡшы аңлаған хан ярҙам итеүҙән баш тартмай. Хатта кенәздәр тәүге бәрелештән һуң мәсьәләне тыныс юл менән хәл итергә ниәтләп уйлашҡанда ла Башҡорт хан ҡаршы төшә. Ярҙам һораған урыҫ дәүләте лә ҡыпсаҡ яугирҙарының хәрби хәрәкәттә нисек сос һәм етеҙ булыуын күҙ уңында тота. Һәм урыҫ яугирҙарының был ҡурҡыу белмәҫ һәм ҡыраҕай ғәскәр алдында шом йөрөткәнен дә яҡшы белә улар. Йәғни, ике яҡ та бер-береһен үҙ мәнфәғәтендә файҙалана.

Ҡыпсаҡ һуғышсыларының әрһеҙлегенә миҫал ғына ҡарап кит-

*АФАРИН!*



# ӘКИӘТ ҺӨЙЛӘЙ БАЛАЛАР...

## башҡорт телендә

**(Башы 1-се биттә).**

Конкурстың район кимәлендә быйыл 98 балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре, 202 уҡыусы, мәғариф учреждениеларынан 86 фольклор коллективы ҡатнашҡан. Шулар араһынан ҡала кимәленә 21 мәктәпкәсә йәштәге бала, 22 уҡыусы, 13 балалар баҡсаһы коллективы, 17 дөйөм белем биреү учреждениелары коллективы үткән. Конкурс шарттарына ойоштороусылар йыл да берәй үҙенсәлекле үҙгәреш индереп тора. Былтыр тәүге тапҡыр "Йәнһүрәттәр һәм анимацион фильмдар" номинацияһы булдырылһа, быйыл "Ғаилә менән сәхнәләштереү" тигән номинация өҫтәлгән. Унда туған халҡының ауыҙ-тел ижадын, йолаларын, телен, рухиәтен балаларына тапшырыуҙы мөһим бурысы итеп һанаған 12 ғаилә ҡатнашҡан. Донъя халыҡтарының тарихи һәм мәҙәни мираҫына һаҡсыл ҡараш булдырыу маҡсатында ойошторолған конкурста ҡатнашыусылар башҡорт, урыҫ, үзбәк, ҡаҙаҡ, белорус, тажик, һинд, әрмән, ҡытай, поляк, фин, нанай, эскимос халыҡ әкиәттәрен һөйләгән.

Конкурстың жюри рәйесе билдәле тележурналист Сәрүәр Сурина тамаша тураһында тәьҫораттарын белдереп, Өфөлә ошондай сара үткәреү ата-әсәләрҙең, тәрбиәселәрҙең һәм уҡытыусыларҙың фиҙаҡәр хеҙмәтенә нигеҙләнгән булыуы тураһында телгә алды. Ысынлап та, сәхнә түренә күтәрелеп балҡып торған йәш әкиәтселәр күрһәткән һөҙөмтә тәү сиратта ошо кешеләрҙең тырышлығы, эшенә мөкиббәнлеге һәм туған теленә һөйөүенә нигеҙләнгән. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та нәҡ шуға бөтәһенең дә иғтибарын йүнәлтте һәм рәхмәтен белдерҙе. "Балаларҙы сәхнәгә әкиәт һөйләргә сығырға әҙерләү еңел эш түгел. Балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә балаларға туған теленә, тыуған иленә һәм халҡына ҡарата һөйөү тәрбиәләү өсөн шарттар булдырылған икән, һәр кем үҙ ғаиләһендә лә шул шарттарҙы булдырһын. Киләсәктә лә шарттарҙы һаҡлап

✓ ***Башҡорт хан ҡыпсаҡ ырыуҙарының йыйылмаһы булған ҡоман-ҡобау ырыуынан була. Уның сығышы Көньяҡ Уралдан. Хандың резиденцияһы Нәмжан ҡалаһында урынлаша һәм уны 2000 меңлек һыбайлы һаҡлап тора.***



# ТУРАҺЫНДА

кәндә лә, аңлашылыр. Бәрелеш алдынан Заруба тигән ҡаласыҡ янында Днепрҙы йөҙөп сығырға кәрәк була. Юрий үҙенең ғәскәрен кисеүгә туплап, әллә күпме ваҡытты юғалта. Ә Башҡорттоң яугирҙары аттарында бөтөн ҡорал һәм кәрәк-ярағы менән бергә йылғаға ташлана ла тиҙ генә йөҙөп тә сыға. Уларҙың ышығында Долгорукийҙың һуғышсылары ла ҡайыҡтарға ултырып, арьяҡҡа сыға һәм башҡорттар менән бергә Изяслав ғәскәрен сигенергә мәжбүр итә. Ошо бәрелештә Башҡорт хандың сардары Свенш һәләк булып ҡала.

Әлеге һуғышта һәләк булған кенәз Владимир Давыдовичтың ҡатыны Ольганың, улын алып, Башҡорт ханға ҡасыуы ла сәйәси күҙлектән сығып эшләнә, тип иҫәпләнә. Был хаҡта, әлбиттә, тарихсы П.Глубовский 1884 йылда былай тип тә яҙа: "Бындай ҡылыҡтың сәбәбе - тол ҡатындың йөрәгендә тоҡанған һәм уны һылыу дала егетенә алып киткән мөхәббәт". Бындай бәйләнештәргә тағы ла бер миҫал: 1185 йылда кенәз Игорь черниговлыларҙан ҡасып, ҡоман ханы Ҡыпсаҡта ята. Ә Ҡыпсаҡ менән Башҡорт хандың ейәне Ғабдулла бик яҡын була. 1187 йылда инә кенәз билдәле Ҡоншаҡтың ҡыҙын ҡатын итеп алып ҡайта һәм далала үткәргән туйынан тыш, үҙҙәрендә лә туй үткәреп, ҡатынының хоҡуҡтарын нығыта.

Күреүегеҙсә, Рус менән Даланың мөнәсәбәте шул тиклем тығыҙ була, Гумилев уны хаҡлы рәүештә симбиоз тип атай, йәғни ике организмдың бер-береһенә бәйле булып йәшәүе. Шулай итеп, Иван Грозныйға тиклем бик күп йылдар элек үк боронғо башҡорт ҡәбиләләренең бер өлөшө Көнсығыш Европалағы сәйәси хәл-ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнаша һәм ҙур ғына роль уйнай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быларҙы урыҫ тарихсылары һәм мәктәп дәреслектәренең авторҙары аңлата алмай һәм ғүмер баҡый урыҫтарҙың төрки халыҡҡа ҡаршы көрәшен һүрәтләй. Ә беҙ үрҙә һөйләгән Рус дәүләте эсендәге һуғыштарҙа урыҫтар менән төрки халыҡтар берләшеп, шундай уҡ урыҫтар менән төрки халыҡтарға ҡаршы ла һуғышҡан. Ваҡыты шундай булған. Сәйәси хәлдәр шуға килтергән.

➔ **Башҡорт хандың исеме лә, уның хаҡындағы мәғлүмәттәр ҙә бығаса беҙҙең тарихи даирәлә булманы. Әммә, шулай ҙа, ул беҙгә бер бөгөн һәм ҡапыл килеп ингән шәхес түгел, шулай бит? Ырыуын һәм килеп сығыу ерлеген билдәләп буламы хандың? Башҡорттан башҡа беҙҙең тағы ла ниндәй хандарыбыҙ булған?**

- Асылда, Башҡорт хан беҙҙең Салауат Юлаев, Алдар батыр, Батырша кеүек билдәле һәм данлы батырҙарыбыҙ менән бер рәттән, дөрөҫөрәге, шул теҙмәнең башында торорға тейеш. Үкенескә ҡаршы, беҙ тарихыбыҙҙы Рәсәй тарихы аша ҡарап ҡына өйрәнгәнбеҙ. Унда телгә алынған шәхестәребеҙҙе генә беләбеҙ. Төпкәрәк, тәрәнгәрәк ҡарарға тартынабыҙ, ҡурҡабыҙ, иҫбатлауҙан унайһыҙланабыҙ һәм башҡалар. Ә бит беҙҙең тарих бик борондан килә.

Башҡорт хан ҡыпсаҡ ырыуҙарының йыйылмаһы булған ҡоман-ҡобау ырыуынан була. Уның сығышы Көньяҡ Уралдан. Хандың резиденцияһы Нәмжан ҡалаһында урынлаша һәм уны 2000 меңлек һыбайлы һаҡлап тора.

Бик боронғо тарихи яҙмаларҙан башҡорттоң Иҙел, Бүләр илдәрендә хакимлыҡ иткән ҡайһы бер хандары билдәле. Мәҫәлән, Туксы йәки "Таҙбаш" - ҡырылған баштар - батшаһынан һуң уның улы Бортас - Бөрйән йәки Бөрйәнбай (Буржантай) (б.э.т. 683-633йй) хакимлыҡ итә. Ул ҡамыр халҡын тар-мар итә һәм "Камыр батыр" тигән исем ала. Буртас ерендә саҡ-ҡыпсаҡтарын индерә. Унан һуң уның улы Мәжи (Мәжи-Аҙаҡ) батшалыҡ итә. Унан, Ҡол-Ғәли яҙмалары буйынса, Буртас һәм Мәжиҙән һуң



Әлүәр, Мағыҙ, Атай, Силәр, Ҡылбур, Тарғыҙ. Был заманда дәүләт "Ете ил", йәғни ете ырыу - Иҙел исемен йөрөтә. Алтыш ханлыҡ иткән мәлдә Иҙел иле алты бүлеккә ҡала. Алтыштың улы Ҡама батыр була. Ҡама батыр хакимлығында Иҙел иле Бүләр итеп үҙгәртелә. Быларҙан тыш, тарихта тағы ла бик күп билдәле ырыу башлыҡтары, хакимдар бар. Улар бик күп, исемлектәрен "Башҡорт хан" китабында ырыуҙарына бүлеп биргәнмен. Ҡыҙыҡһыныусылар шунда табып ҡарай ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күреүегеҙсә, был өлкәлә ни тиклем күберәк ҡыҙыҡһынаһың, ул шул тиклем арбай һәм тарих төпкөлөнә алып китә. Автор әйтмешләй, дөрөҫлөктө табыуҙан һәм өҫкә сығарыуҙан ҡурҡырға ярамай. Битарафлыҡ арҡаһында беҙ былай ҙа күп рухи ҡиммәтәребеҙҙән, шәхестәребеҙҙән ҡолаҡ ҡаҡтыҡ. Бөгөн Башҡорт ханды ноғайҙар ҙа, ҡырғыҙҙар һәм башҡа халыҡтар ҙа үҙҙәренеке итеп күрһәтмәксе. Ә беҙ исеме менән үк "ҡыҫҡырып" торған батырыбыҙҙың сығышын шик аҫтына ҡуябыҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

---

ҡалып, ошо йоланы дауам итерлек эш алып барайыҡ", - тине Сынтимер Биктимер улы тамаша залында йыйылған халыҡҡа төбәп.

Сәмле, көсөргәнешле һәм тулҡынландырғыс бәйгелә уҡыушылы сығыш яһаусылар конкурстың йомғаклау кисәһендә үҙ оҫталығын тағы бер тапҡыр күрһәтә алды. Улар араһынан абсолют еңеүселәр төрлө номинациялар буйынса билдәләнде. "Әкиәтте яңғыҙ башҡарыусылар" номинацияһында 95-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Арыҫлан Ҡырымсурин һәм Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының беренсе синыф уҡыусыһы Мәликә Исхаҡова Гран-при алды. "Әкиәтте сәхнәләштереү" номинацияһында 144-се балалар баҡсаһы һәм Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының фольклор коллективтары иң оҫта башҡарыусылар тип табылды. "Ғаилә менән сәхнәләштереү" номинацияһында Ленира һәм Ирек Үтәевтарҙың ғаиләһе иң юғары баһаға лайыҡ булды. Улар ҡыҙҙары - 64-се гимназия уҡыусыһы Вилиә һәм 166-сы башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Ильгина менән әкиәт сәхнәләштергән. Балалар өсөн мауыҡтырғыс, ижади ҡараш талап иткән номинацияларҙың береһе - "Йәнһүрәттәр һәм анимацион фильмдар". Был йүнәлештә беренсе урынды 249-сы башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Ҡаранай Миңлеғолов һәм З. Биишева исмендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы уҡыусылары Самира Шәрипова, Рафаэль Алешкин, Айсилә Миңлебаева яуланы. Әйткәндәй, Миңлеғолов Ҡаранай иң кесҡәй ҡатнашыусыларҙың береһе булды, уға ни бары ике йәш тә алты ай тулған. "Р" хәрефен ҡаймаҡлы мискәлә төшөрөп ҡалдырған Мыраубай кеүек һөйләшкән был малай сәхнәлә үҙен иркен тотоп, "Хәйләкәр себеш" тигән башҡорт халыҡ әкиәтен шартлатып һөйләне. Ул балалар баҡсаһында әкиәттәр һөйләүҙәрен нык ярата, машиналар менән уйнай һәм шиғырҙар ҙа һөйләй белә икән. Ошолар тураһында үҙенән һорашҡан арала "Мышы" тигән шиғырҙы һөйләп, "вәт" тип тел күрһәтергә лә өлгөрҙө шуҡ, телсәр һәм ҡыйыу малай. Ә быйыл яңғыҙ башҡарыусылар араһында иң юғары баһаға лайыҡ булыусы Арыҫлан Ҡырымсурин бар яҡлап та талантлы бала булып сыҡты. Ул "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалының төрлө тапшырыуҙарында төшә, "Юлдаш" радиоһы тапшырыуҙарында ла ҡатнашҡаны бар, "Сулпылар" конкурсында ла йырлаған. "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсы бик оҡшаны, миңә уйынсыҡ машина бүләк иттеләр, - тип тәьҫораттары менән бүлеште Арыҫлан. - Мин футбол, хоккей уйнарға яратам, йырлайым һәм бейейем дә. Балалар баҡсаһында русса һөйләшһәк тә, мин башҡорт телен яҡшы беләм, "Тамыр"ҙа ла, өйҙә әләй менән дә башҡортса ғына һөйләшәм". 23-сө мәктәптең 4 синыф уҡыусыһы Иршат Шәрипов та башҡорт телен бәләкәйҙән белә. "Төлкө менән ҡырмыҫҡа" ҡырғыҙ халыҡ әкиәтен һөйләп, призлы урын яулаған малай бик етди һөйләште, киләсәктә кем буласағы тураһында ғына әлегә белмәй, 8 класҡа еткәс уйларымын әле, ти.

Әйткәндәй, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсында ҡатнашыусылар ошо малайҙар кеүек һәр яҡлап та талантлы, ҡыйыу, тырыш һәм, иң мөһиме, туған телен яратҡан рухлы балалар. Туғыҙынсы тапҡыр үткәрелгән ярыш тап шундай балаларҙы ғына туплауы күптән ғәҙәти һәм тейешле хәлгә әүерелгән булһа ла, йыл да яңы исемдәр асҡан конкурс менән һоҡланыу тойғоһон йәшереп булмай. Илдең, милләттең киләсәге ниндәй булырын тап бына ошондай сараларҙа күреп, күҙаллап ҡайтырға була ла инде. Ә "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсы рухлы, халыҡтың ауыҙ-тел ижадынан аҡыл туплаған, тарихын һәм мәҙәниәтен хәтерендә тотҡан, туған телен яҡшы белгән быуын үҫеп килеүен сағылдыра.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

## ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Нәҡшбәндиә туғанлығының тарихы үҙ алдына йәйһә ҡыҫҡырып зекер әйтеүҙең өҫтөнлөктәре тураһында бәхәстәр менән тулы. Нәҡшбәндиә суфыйҙары, үҙ алдына зекер әйтеүҙе мотлаҡ һанап, үҙҙәренә оҡшаш Йәсәүиә туғанлығынан бик иртә айырымланған.

XIX быуатта Йәсәүиә туғанлығы Ҡазанда бөтөнләйгә онотолоп бөтмәһә лә, бында бөтәһе лә суфый-нәҡшбәндиәселәрсә үҙ алдына зекер әйтеүҙе артығыраҡ күргән. Мәҫәлән, 1861 йылда Кокандтан килгән ниндәйҙер дәрүиш Һарытау эргәһендәге бер ауыл кешеләрен ҡыҫҡырып зекер әйтергә өгөтләй башлағас, был ваҡиға яңъял тип баһалана, һәм ошо хаҡта мосолмандарҙың Ырымбурҙағы Дини йыйылышына тиҙ арала хәбәр ителә.

Нисек кенә булмаһын, З. Рәсүлевты ғәйепләү, уның өҫтөнән ошаҡтар яҙыу әллә ни ҡатмарлы булмаған зекер әйтеү ысулы арҡаһында ғына килеп сыҡҡан, тип уйларға ярамай. Минзәләүи уратыбыраҡ һәм кинәйә менән: "З.Рәсүлевтың дошмандары, теләһә ниндәй мосолманға ябып булмаҫтайҙы ла уға ябып, уны сихырсылыҡта ғәйепләнеләр", - тип яҙған. В. Бартольд мәғлүмәтенә ярашлы, З. Рәсүлев шулай уҡ махсус рөхсәт булмайынса хаж ҡылып, ғәҙәти булмаған яңылыҡтар алып ҡайтыуҙа ғәйепләнә. Һуңғыһы З. Рәсүлевҡа ҡарата булған дошманлыҡтың, Хиджаз һәм Төркиә тарафтары йоғонтоһона шик-шөбһә менән ҡарап, динилектең һәм дини белем биреүҙең бохараса моделенә тоғро ҡалырға теләгән ҡәҙимселек рухындағы дини даирәләрҙән сығыуын раҫлай. Волга-Урал төбәге мосолмандары, ортодоксаль тойғолары тиҙ генә кителеп бара торған халыҡ буларак, дини мәсьәләләр буйынса бәхәстәргә һәм яңылыҡтарға әүәҫ булып тойола. Юҡҡа, Ризаитдин Фәхретдинов үҙенең "Аҫар" исемле китабында мосолмандарҙың Диниә назаратына бер туҡтамай яуып торған күп һанлы ошаҡтар тураһында яҙмаҫ ине. Мәүлән Хәлид үҙе лә Сөләймәниәлә һәм Бағдадта дошманлыҡҡа дусар булып, уның Истанбулдағы беренсе вәкилдәре урындағы танылған шәйехтәрҙең бер өлөшө тарафынан тәрән шик-шөбһәләр менән ҡаршы алына. Ғөмүмән, Хәлидиә туғанлығының әүҙемлеге һәм амбициялылығы үҙе үк хәүеф тыуҙырған, күрәһең.

З. Рәсүлев Абдулхәким Сардаҡлының рухи ҡарамағында булыуынан бер ваҡытта ла ваз кисмәгән; ул хатта "Аль - фауаидуль-аль - мухимма" китабында үҙенең суфыйҙар туғанлығына ике мәртәбә алынғанлығын күрһәтеп, бының суфыйсылыҡта һирәк күренеш булмағанлығын иҫкә ала. Шулай ҙа З. Рәсүлев өҫтөнән яҙылған тәүге ошаҡ һәм ғәйепләүҙәрҙең шәйех Абдулхәким Сардаҡлы эйәрсәндәре ҡоронан булыуына шик юҡ. З. Рәсүлевтан тәүге һорау алыу Әлмәт ауылында Искәндәр бән Хәбибрахман тигән берәүҙең өйөндә уҙғарыла; бында күп һанлы ғәләмдәр (мосолмандарҙың танылыу тапҡан абруйлы заттары) араһында бәхәсле һорауҙар буйынса фәтүәләр (дини-юридик ҡарарҙар) сығарыуға йәлеп ителеүе менән билдәлелек алған Ургенч ғалимы Ишнияз бән Ширнияз да була.

**(Дауамы бар).**

✓ *Айырылышыусы ғаиләнең йәки бер туғандарҙың мөлкәт бүлешеү эштәрендә ҡатнашыу әхлаҡи йәһәттән ауырға тура килә. Бер ваҡыт айырылышып йөрөгән ир менән ҡатындың 5 алтын ҡалағын бүлергә "ярҙамлаштым".*



# КЕШЕ ЯҘМЫШЫ

**танышлыҡ һәм туғанлыҡ**

**Законды ихтирам иткән йәмғиәттә генә тәртип һәм тотороҡлолоҡ булырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта һәр гражданин үҙенең хоҡуғы боҙолған осраҡта закон тарафынан яҡлау табасағына ышаныс менән йәшәргә тейеш. Әлеге ике күрһәткестең тик береһе генә аҡһауы ла тәртиптең ҡаҡшауына килтерәсәк. Ил халҡының ҡанундарҙы һанлауын дәүләт һиҙгер күҙәтә, ә граждандарға хоҡуҡтарын яҡлау өсөн үҙҙәренә тырышырға кәрәк. Ә бындай ярҙамды беҙ, башлыса, адвокаттарҙан көтәбеҙ һәм ниндәйҙер хәлде ҡануниәткә ярашлы йырып сығыр өсөн уларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Тәү ҡарашҡа адвокаттың эшмәкәрлеге менән яҡшы таныш кеүекбеҙ, ләкин уның да ябай күҙгә эленмәгән нескәлектәре бихисап. Шулар хаҡында адвокат Айҙар Рамаҙан улы ВӘЛИТОВ бәйән итә.**

## Кем ул адвокат?

Ҡыҫҡаса әйткәндә, һәр адвокат хоҡуҡ белгесе, ләкин бөтә юристар ҙа адвокат түгел. Улар бер-береһенән айырылғыһыҙ төшөнсә, ләкин айырмалыҡтары ҙур. Адвокат тик судта ғына сығыш яһамай, ә физик һәм юридик шәхестәргә төрлө хоҡуҡи мәсьәләләр буйынса ярҙам күрһәтә ала. Ләкин шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер ойошма штатында хоҡуҡ белгесе булараҡ штатта тора алмай. Шулай итеп, хоҡуҡ белгесе - ул һөнәр, ә адвокат ошо һөнәрҙең айырым бер статусы, тип әйтергә була.

Күптәр уйлағанса, адвокат үҙенең яҡланыусыһын аҡлау йәки уға мөрәжәғәт итеүсенең эшен нисек тә еңеү менән тамамлау өсөн ҡануниәттә "тишектәр" эҙләүсе түгел. Шулай уҡ минең эшмәкәрлегем, телевизор экрандарынан күрһәтелгәнсә, матур итеп хәбәр һөйләүгә генә лә ҡайтып ҡалмай. Мин, адвокат булараҡ, юридик йәһәттән әһәмиәткә эйә мәғлүмәт эҙләйем, документтарға хоҡуҡи тикшереү үткәрәм, эшкә ҡағылышлы төрлө фактарҙы асыҡлайым, шаһиттар, тәфтишселәр, төрлө ойошма һәм дәүләт органдары хеҙмәткәрҙәре менән аралашам. Тәбиғи, бөтә тупланған мәғлүмәтте грамоталы һәм ышанысл итеп ҡағыҙға теркәү һәм уны суд процесында һөйләү ҙә адвокаттың функцияһына инә. Беҙ теге йәки был эштә хоҡуҡи ярҙам ғына күрһәтәбеҙ һәм бер ниндәй ҙә өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә түгелбеҙ. Хоҡуҡ һәм ҡануниәт өлкәһендәге төплө белем һәм уны клиентыбыҙҙың мәнфәғәтендә дөрөҫ итеп ҡулланыу - беҙҙең төп һәм берҙән-бер ҡоралыбыҙ.

Адвокатлыҡ эшен алып барыу ниндәйҙер сикләүҙәр ҙә ҡуя. Мәҫәлән, миңә эшҡыуарлыҡ менән булышырға ярамай. Адвокат булыуҙан тыш, тик ғилми, ижади һәм белем биреү өлкәһендә генә эшмәкәрлек алып барырға хоҡуҡлымын.

## "Терпе" геройынан - хоҡуҡ белгесенә

Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылында тыуып үҫтем. Бөгөнгө көндәге һөнәремә нигеҙ нәҡ бала саҡта һалынды, тип әйтә алам. Әсәйем ғүмер буйы мәктәптә уҡыу-уҡытыу бүлеге мөдире булып эшләне. Ауылда уҡытыусы балаһына талап көслө була, миңә лә унан тос ҡына өлөш эләгә ине. Бала саҡта малайҙар һуғышмай торамы инде! Беҙҙең ауыл малайҙары ла йыш ҡына сәкәләшеп алыр ине. Ошондай алыштарҙың ҡатнашыусыһы булараҡ та, ситтән генә ҡарап тороусы ролендә лә директор кабинетында күп әрләндем. Хатта һуғыштарҙа бер ниндәй ҡатнашлығым булмаһа ла, миңә мотлаҡ эләгә ине. Шулай уҡ мәктәптә башҡалар баш түбән йөрөп тә күренмәһәләр, мин саҡ ҡына шаярһам да, "Терпе" геройына әйләнә торғайным. Әлеге һәм башҡа төрлө ғәҙелһеҙлектәр менән бала саҡтан осрашҡас, үҙ-үҙемдә законлы нигеҙҙә яҡларға өйрәнеү маҡсатында, аңлы рәүештә Башҡорт дәүләт университеты Сибай институтының юридик факультетына уҡырға индем. Ләкин уҡыу йортон тамамлап ҡына адвокат булып китеүе мөмкин түгел. Беренсенән, университетта үҙләштергән теорияны практикала дөрөҫ ҡуллана белеү өсөн тәжрибә туплау мөһим. Ғөмүмән, хоҡуҡ белгестәре араһында тик бишлегә генә уҡыусы студент булып та, эшләй башлағас, белем кимәле тик өслөк кенә икәнлеген аңлағандар йыш осрай. Шуға күрә, адвокат статусы алып яңы эшләй башлаған йәш белгес менән оҙайлы тәжрибәһе булған "карт бүре"не тиңләштереп булмай, әлбиттә. Адвокат статусын алыу ҙа еңелдән түгел. Уның өсөн хоҡуҡ өлкәһендә ике йыллыҡ эш стажы булыуы мөһим. Һәм әлеге стаж, әйткәндәй, ҡулға диплом алып эшләй башлағандан һуң ғына һанала башлай. Мин, мәҫәлән, уҡыуҙы тамамлап, 10 йыл хоҡуҡ өлкәһендә эшләгәндән һуң ғына, тейешле имтихандарҙы тапшырып, үҙемдең адвокатлыҡ конторамды астым. Әлегә тиклем Урал арьяғы райондары, ҡалаларында күберәк эшләһәм, хәҙер эшмәкәрлегемде бөтә Башҡортостан һәм шулай уҡ Рәсәй киңлектәренә лә йәйелдерҙем. Төрлө төбәктә әллә нисә эште бер юлы алып барыуы оҡшай. Ошондай көсөргәнешлек мине профессиональ йәһәттән үҫтерә, үҙ һөнәремә тулыраҡ "сумырға" булышлыҡ итә.

## Һөнәрем үҙенсәлектәре

Тиҫтә йыллыҡ адвокатлыҡ тәжрибәм үҙ эсенә төрлө эштәрҙе һыйҙыра. Тәү ҡарашҡа, уларҙың ҡайһылары оҡшаш кеүек булһа ла, һәр эш индивидуаль, барыһының да ниндәйҙер үҙенсәлеге бар. Әлеге ваҡытта адвокат һөнәрендә төрлө тар тармаҡтарҙа махсуслашырға мөмкин. Берәү тик енәйәт эштәре менән генә шөғөлләнә, икенселәр арбитраж йәки граждандар өлкәһенә китә. Әйтергә кәрәк, был йүнәлештәр үҙҙәре үк бер нисә тармаҡҡа бүленә. Хеҙмәт, ғаилә бәхәстәрен яйлаусы, юл хәрәкәте ваҡиғаларын көйләүсе булып эшләүсе адвокаттар бар. Шулай уҡ тик хәрби йәки медицина өлкәһендә генә эшмәкәрлек алып барыусы хоҡуҡ яҡлаусылар ҙа күп. Һәм, ғәҙәттә, адвокат бер йүнәлеште генә ала һәм шуның буйынса эшләй. Миңә бөтә өлкәлә лә үҙемдең һөнәри көсөмдө һынап ҡарау, төрлө суд процестарында ҡатнашыу оҡшай. Шулай ҙа айырылышыусы ғаиләнең йәки бер туғандарҙың мөлкәт бүлешеү эштәрендә ҡатнашыу әхлаҡи йәһәттән ауырға тура килә. Бер ваҡыт айырылышып йөрөгән ир менән ҡатындың 5 алтын ҡалағын бүлергә "ярҙамлаштым". Һәр береһенә икешәр ҡалаҡ эләкте, ләкин берәүһен бер нисек тә бүлә алмай былар. Ҡалаҡты экспертизаға ебәреп, хаҡын билдәләтергә тура килде. Һөҙөмтәлә, береһе ҡалаҡты үҙенә алып, уның хаҡының яртыһын икенсеһенә бүлеп бирҙе. Уйлап ҡараһаң, бер ҡалаҡ ошондай нервы түгеүгә, кисәге парҙың бер береһенә бысраҡ өйөүенә, оҙайлы суд эштәрендә ҡатнашыуға торошломо инде! Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та.

Ә бер ҡарында ятып, бер икмәкте ашап үҫкән туғандарҙың матди байлыҡ бүлә алмайынса, ҡан дошманға әйләнеп бөтөүе һуң! Ҡурҡыныс күренеш. Бигерәк тә һуғыш ветерандарына аҡсалата ярҙам күрһәтә башлағандан һуң ошондай эштәр һаны ныҡ артты. Ветеран үлеп китә, ә балалары аҡсаны бүлә алмайынса, йылдар дауамында суд тупһаһын тапай, бер-береһенә эт кеүек ташланып, әсе һүҙҙәр әйтеп бөтә. Миҫал итеп алғанда, биш бер туғандың миллион һум аҡсаны бүлә алмайынса талашыуы күңелдә нимәнелер һындыра. Ғәҙел бүлгәндә, һәр береһенә 200-әр мең һум аҡса тейә. Ошо сумманың туғанлыҡ ептәрен өҙөүгә сәбәп булып тора алыуына хайран ҡалаһың.

Адвокат булараҡ судта сығыш яһап, еңеү яулаған осраҡта икенсе яҡ өсөн мин донъялағы иң насар кеше булып ҡалам. Улар быны минең һөнәрем итеп түгел, ә шәхсән үҙем менән бәйләп ҡабул итә. Был кеше психологияһы һәм уның менән көрәшеү мәғәнәһеҙ. Шуға күрә, төрлө насар һүҙҙәргә, яла яғыуҙарға иғтибар итмәҫкә, негативтан ситләшеп, йөрәккә яҡын алмаҫҡа тырышам.

Ҡурҡытыу, хатта янауҙар ҙа булып тора. Суд барышында ике яҡ бер-береһенә нимә генә әйтешеп бөтмәй, адвокатҡа ла елле генә эләгә. Суд еңел процесс түгел, унда барыһы ла ҙур стресс кисерә, үҙҙәрен ҡулда тота алмаҫҡа ла мөмкиндәр. Ошондай ваҡыттарҙа тыныслыҡ һаҡлай белергә, уларға эйәреп, эмоцияларына бирелеп китергә ярамай. Адвокат өсөн һалҡын ҡанлылыҡ һаҡлай белеү мөһим.

Адвокатты врач менән тиңләргә мөмкин. Табип кешенең сирен бөтөрөү өсөн тырыша, ә адвокат клиентына хоҡуҡи ярҙам күрһәтә. Сирле кеше табипҡа үҙенең бөтә ауырыу билдәләрен йәшермәйенсә асып һалғанда ғына, табип уға дөрөҫ дауалау курсы яҙып, аяҡҡа баҫтыра ала. Адвокат та эште энәһенән ебенә тиклем белгәндә генә үҙенең яҡлау йүнәлешен дөрөҫ билдәләйәсәк. Үҙең белгәнсә дауаланырға ярамаған кеүек үк, беҙҙең өлкәлә лә үҙалылыҡҡа урын булмаҫҡа тейеш.

*АЙҘАР ВӘЛИТОВ:*

*Минең өсөн кеше яҙмышы хәл ителгәндә дуҫ, туған тигән төшөнсә юҡ. Ғөмүмән, хоҡуҡ өлкәһендә эшләүсенең һөнәри эшмәкәрлегендә бындай күренеш бөтөнләй булмаҫҡа тейеш.*



## Адвокат этикаһы

Адвокат менән клиенттың хеҙмәттәшлеге тәүге консультациянан башлана һәм нәҡ ошо ваҡытта закон вәкиле һәм уға мөрәжәғәт итеүсе араһында бәйләнеш урынлаша. Адвокат үҙенең һөнәри тәжрибәһенә таянып, квалификациялы юридик консультация бирергә бурыслы. Ул дөрөҫ кәңәш биреп кенә ҡалырға түгел, ә кәңәштең клиент тарафынан дөрөҫ аңланыуын да тәьмин итергә тейеш. Әгәр ҙә адвокаттың һүҙҙәрен клиент яңылыш аңлаһа, мәсьәлә уның аҡыл кимәленең түбән булыуында түгел, ә адвокаттың үҙ фекерен аңлайышлы итеп асып һала белмәүендә, тип әйтер инем. Мин, адвокат булараҡ, эште бар яҡлап та өйрәнеп, клиентыма уның бөтә ыңғай һәм кире яҡтарын асып һалырға, судҡа мөрәжәғәт иткән осраҡта эштең һөҙөмтәле булыу-булмауын профессиональ йәһәттән күҙаллап, уға еткерергә тейешмен. Ләкин мин бер ҡасан да "Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ", тип, 100 процент гарантия бирә алмайым һәм быға хоҡуҡым да юҡ. Был хаҡта "Адвокаттар этикаһы"нда ла аныҡ яҙылған. Адвокаттың эшмәкәрлеге уңлы-һуллы буш вәғәҙәләр таратыуға түгел, ә эш барышында дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәнеүгә һәм клиентының ышанысын аҡларға тырышыуға ҡайтып ҡалырға тейеш. Ҡайһы бер адвокаттар тәүге осрашыуҙа уҡ үҙҙәрен бөтә һорауға ла яуапты белеүсе итеп күрһәтергә тырыша. Ләкин нәҡ әлеге ситуацияға ҡағылышлы бөтә хоҡуҡи акттарҙы ла белеп бөтөү мөмкин түгел, сөнки көн дә тиерлек яңы закондар ҡабул ителә, хоҡуҡи норматив акттар баҫыла. Һәм уларҙың һәр береһе актуаль була. Шуға күрә, эште бар яҡлап ентекле өйрәнеү, бөтә мәғлүмәтте тәфсирләп тикшереү мөһим. Ниндәйҙер һорауға яуап белмәүҙән оялмайым. Белер-белмәҫ көйө яуап биреп, һуңынан үҙемдең яңылышҡанлығымды асыҡлау күпкә уңайһыҙыраҡ минең өсөн. Ошондай "белемле" адвокат менән осрашҡандан һуң, икенсе хоҡуҡ белгесенә лә мөрәжәғәт итергә кәрәк, тигән фекерҙәмен.

Минең өсөн адвокат этикаһын ғына түгел, ә кешелек сифаттарын да һаҡлау мөһим. Мәҫәлән, икенсе адвокаттың эше менән ҡәнәғәт булмайынса миңә килгән клиентым менән бер ҡасан да үҙемдең коллегамдың шәхесен, уның эшмәкәрлеген тикшермәйәсәкмен, уның алымдарына баһа бирмәйәсәкмен.

**✓ *Адвокат менән кәңәшләшеп эшләүҙе практикалау граждандарҙы күп бәләләрҙән ҡотҡарыр ине. Беҙҙең илдә, ҡыҙғаныҫҡа күрә, ошо практика үҫешмәгән. Идеалда һәр кешенең, ғаиләнең шәхси адвокаты булырға тейеш.***

# ХӘЛ ИТЕЛГӘНДӘ...

## төшөнсәһенә урын юҡ

### Адвокаттың эш хаҡы

Адвокаттар палатаһында уларҙың хеҙмәтенә хаҡ ҡуйыу регламенты бар. Ләкин ундағы һандар рекомендацияланған сумма. Мин, мәҫәлән, үҙемә эшләйем һәм эш хаҡымдың ниндәй күләмдә булыуы тик минән тора. Әгәр ҙә эшем булмаһа, судтарҙа ҡатнашмаһам, клиенттарымдың мәсьәләһен хәл итмәһәм, аҡсаһыҙ буласаҡмын. Шуға күрә, эшемде сифатлы һәм намыҫлы башҡарһам ғына, клиентымдың хәтерендә мәғлүмәтле, үҙ эшен яҡшы башҡарған белгес булып ҡаласаҡмын. Шулай итеп, минең эш хаҡым клиенттарымдың күпме булыуынан тора. Ә уларҙың һаны, үҙ сиратында, минең эшмәкәрлегемде нисек ойоштороуға бәйле. Йәшерәһе түгел, адвокаттың исеме ни тиклем популяр, уға шул тиклем күберәк клиент киләсәк. Эш башлағанда һин тәүҙә билдәле булыу өсөн тырышаһың, ә һуңынан популярлыҡ һинә "эшләй".

"Белемһеҙ берҙе еңер, белемле меңде еңер", тигәнде иҫтә тотоп, даими рәүештә хоҡуҡи белемемде камиллаштырам, төрлө курстарға йөрөйөм. Үҙ өҫтөндә эшләгән адвокаттың оҫталығы йылдан-йыл шымара һәм, тәбиғи, уның хеҙмәте лә ҡыйбатыраҡ була. Тик университет белеме менән генә ултырған адвокатҡа әҙ түләп, судта еңелгәнсе, үҙ белемен бөтә яҡлап адвокат менән кәңәшләшәләр. Ә беҙҙә - киреһенсә: ниндәйҙер хәл килеп сыҡһа, кеше тәүҙә бөтә туған-танышын йәлеп итеп, үҙе йүгереп ҡарай ҙа, эш хәл ителмәгәндәй булһа, адвокатҡа килә. Ахыр сиктә, эш уның файҙаһына тамамланмаһа, адвокат ғәйепле килеп сыға. Шуға күрә, күп эштәрҙе башлар, ҙур сығымдар талап иткән ниндәйҙер килешеүҙәр төҙөр алдынан адвокат менән кәңәшләшкәндә күп бәхәстәр тыумаҫ, мутлашыусылар тишек кәмәгә ултыртып китмәҫ ине. Адвокат менән кәңәшләшеп эшләүҙе практикалау граждандарҙы күп бәләләрҙән ҡотҡарыр ине. Беҙҙең илдә, ҡыҙғаныҫҡа күрә, ошо практика үҫешмәгән. Идеалда һәр кешенең, ғаиләнең шәхси адвокаты булырға тейеш һәм уны проблема килеп сыҡҡас түгел, ә ошо мәсьәләне булдырмаҫ өсөн йәлеп итергә өйрәнергә кәрәк. Ошоно аңламай әле беҙҙең халыҡ. Консультацияға түләнгән аҡса килеп тыуған проблеманы хәл итеүгә түгелгән сығымдарҙан күпкә әҙ.

Башҡа илдәрҙә әхлаҡи зыян күреүҙе аҡсалата компенсациялау тураһында суд ҡарарҙары йыш сығарыла. Әхлаҡи зыян - кешенең тойғоларынан көлөүҙе, уның эске донъяһын кәмһетеүҙе баһалау, тигәнде аңлата. Хаҡтар миллионлаған долларға тиклем барып етә. Беҙҙә быңдай практика йыш күҙәтелмәһә лә, шулай уҡ бар. Кемдеңдер һүҙе, эше, аҙымы менән икенлау мөһим: эштең уңышы адвокаттың таныш-тоношлоғона түгел, ә профессиональ кимәленең ниндәй булыуына бәйле. Минең судья, прокурор булып эшләүсе курсташтарым күп һәм улар менән төрлө суд ултырышында осрашырға тура килә. Ләкин бер кем дә танышлыҡҡа баҫым яһамай, дуҫлыҡты үҙ маҡсатында ҡулланырға тырышмай, тик законға ғына таянып, үҙенең эшен башҡара.

Йәшереп тораһы юҡ, ҡайһы бер адвокаттар үҙенә күберәк клиент йәлеп итеү маҡсатында "Унда минең дуҫым прокурор", "Ултырышты таныш судья алып барасаҡ", тип әйтергә мөмкин. Ундай "белгестәрҙән" баш баҫып ҡасырға кәрәк. Әгәр ҙә мөрәжәғәт итеүсенең эше баштан уҡ уңышһыҙлыҡҡа дусар икән, бер ниндәй танышлыҡ та уны тартып сығара алмаясаҡ. Бер судья ла, танышлыҡ йәки дуҫлыҡ хаҡына, үҙенең исеменә тап төшөрмәйәсәк.

### Дәүләт билдәләһә...

Бөтә адвокаттар ҙа, үҙҙәренең шәхси эштәренән тыш, дәүләт тарафынан кемделер яҡлау өсөн тәғәйенләнергә мөмкин. Быңың өсөн төбәктең һәр районында һәм ҡалаһында график төҙөлә. Адвокаттар, графикка ярашлы, берәр аҙна дежурҙа була. Шуға күрә, берәйһенә дәүләт тарафынан тәғәйенләнгән адвокат кәрәк булған осраҡта, дежурлығым тура килһә, ғәйепләнеүсе нес яңғыраһа, ул мотлаҡ ҡәнәғәтләндерелергә тейеш. Судта дәүләт тарафынан билдәләнгән йәки адвокат килтергән, башҡорт йәки урыҫ телдәренән махсус белеме булған тәржемәсе сығыш яһай ала. Ул урыҫ теленән башҡортсаға йәки башҡорт теленән урыҫсаға тәржемә эшләй һәм уның өсөн ул дәүләттән эш хаҡы ала.

### Хоҡуҡи тапшырыуҙар тураһында

Телевизорҙың ниндәй каналын асма, унда суд процесы барған тапшырыуҙы күрергә мөмкин. Ни бары 30-40 минут эсендә судья барыһын да тыңлап, хәлдең айышына төшөнөп, һорауҙарына яуаптар табып өлгөрә. Ғәйепләнеүсе лә, дәғүәсе лә, шаһиттар ҙа бөтәһе лә асыҡ һәм теманан ситләшмәй генә яуаптар бирә. Ғөмүмән, быңдай тапшырыуҙан һуң суд барышын еңел генә итеп күҙ алдына килтерәһең. Ләкин ысынбарлыҡ бөтөнләй башҡа. Күп осраҡта эштәр бер генә суд барышында хәл ителмәй. Аҙналар, айҙар һәм хатта йылдар дауамында ҡаралырға мөмкин. Шуға күрә, әлеге тапшырыуҙарҙы илдең суд системаһын тулыһынса асып һалыусы булараҡ ҡабул итергә ярамай. Ошондай тапшырыуҙарҙы ҡарап, хәҙер ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрен иҫ киткес шәп хоҡуҡ белгесе тип һанай башланы. Улар хатта башҡаларға кәңәш бирергә лә

та үҫтереүсе белгескә күберәк түләп, эште үҙ файҙаңа тамамлау күпкә отошлораҡ икәнен аңлап етмәүселәр ҙә бар. Халҡымдың "Һаран ике түләй", тигән мәҡәле тап ошо турала һөйләй түгелме?

Адвокаттың сығымдары күп. Әгәр ҙә адвокаттар палатаһында йәки коллегияһында торһаң, иғәнә индерәһең. Минең кеүек адвокат кабинеты тотоусылар дәүләткә һалым түләй. Унан тыш, ҡуртымға офис тотоу, ярҙамсыңа эш хаҡы, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр, юл сығымдары - барыһына ла клиенттарҙың минең хеҙмәтем өсөн түләнгән аҡсанан бүленә. Ә ул минең башҡарған эш күләменә барып тоташа.

Ваҡыт та бик баһалы төшөнсә бөгөнгө көндә. Шуға күрә, түләү эштең хәл ителеүенә ни тиклем ваҡыт бүленеүенә лә бәйле.

### Сит илдә нисек?

Сит илдә адвокатлыҡ хеҙмәте киң йәйелгән. Ҡабартып әйткәндә, унда хатта магазиндан сәйнүк алырға булһалар ҙа се берәүҙе рухи көсөргәнеш кисерергә мәжбүр итеүен, уның күңелен ғазапҡа һалыуын иҫбатлауы ауыр, әммә мөмкин. Кәмһетеү, мыҫҡыл менән һәр кемдең осрашыуы ихтимал. Интернет селтәрендә ағыу сәсеүселәр ҙә күп. Телевизор йондоҙҙары, билдәле йырсылар, ҙур эшҡыуарҙар, сәйәсмәндәр араһында ошо нигеҙҙә үҙ-ара мөнәсәбәттәр йыш асыҡланһа ла, ябай халыҡ араһында эште судҡа тиклем алып барып еткерергә тырышыусылар әҙ.

### Дуҫ һәм туғанлыҡ төшөнсәһе

Минең өсөн кеше яҙмышы хәл ителгәндә дуҫ, туған тигән төшөнсә юҡ. Ғөмүмән, хоҡуҡ өлкәһендә эшләүсенең һөнәри эшмәкәрлегендә быңдай күренеш бөтөнләй булмаҫҡа тейеш. Хәҙерге йәмғиәттең бер үҙенсәлеге бар. Адвокат кәрәк булған осраҡта кеше үҙ эшенең оҫтаһы булып танылған белгесте түгел, судья, прокурор, полиция органдарында таныштары күп булған адвокатты эҙләй. Ләкин шуны аңянына барырға бурыслымын. Уның ниндәй статья буйынса ғәйепләнеүенә ҡарамайынса, адвокат булараҡ законлы яҡлау тәьмин итергә тейешмен. Минең бурысым - енәйәтсенең хоҡуҡи хәлен еңеләйтеү. Закон һүҙенә таянып, енәйәттең бөтә булған нескәлектәрен күҙ уңында тотоп, ғәйепләнеүсегә еңелерәк яза биреүҙе йәки уны бөтөнләй аҡлауға өлгәшергә тырышыу һөнәри тәғәйенләнешем. Шуға күрә, "Ана, ул үлтереүсене яҡлай", "Бурҙы һыуҙан ҡоро сығарҙы", тип, адвокатты ғәйепләү урынһыҙ, сөнки ул ни бары үҙенең эшен эшләй. Шул уҡ табип, мәҫәлән, сирлене дауалауҙан баш тартырға хоҡуғы булмаған кеүек, дәүләт тарафынан тәғәйенләнгән адвокат булараҡ сығыш яһағанда, мин кемделер яҡлауҙан баш тарта алмайым. Ә шәхси адвокат булараҡ мөрәжәғәт иткәндә, әлбиттә, был эшкә тотоноу йәки баш тартыу минең ихтыярымда.

Беҙҙең республикала Конституция менән ике дәүләт - урыҫ һәм башҡорт телдәре билдәләнгән. Шуға күрә, суд процесында ҡатнашыусы һәр кем үҙенә ҡулай телдә сығыш яһарға хоҡуҡлы. Быңдай үтетартынмай, былай ҙа башы ҡаңғырып, нимә эшләргә белмәй йөрөгән кешене нығыраҡ буталдыра. Шулай ҙа әлеге тапшырыуҙарҙың граждандарға үҙ хоҡуҡтарын белергә ярҙам итеүен дә инҡар итергә ярамай. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа үҙ хоҡуғын яҡшыраҡ төшөнә башлаған граждандарҙан судҡа бирелгән дәғүәләр һаны артты. Тик ниндәй осраҡта ла профессиональ хоҡуҡ белгесе менән кәңәшләшеп эшләү мөһимлеген тағы берҙе һыҙыҡ өҫтөнә алам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хоҡуҡ системаһының бер тағаны булған адвокатлыҡ тураһында һөйләшеү барышында Айҙар Рамаҙан улы адвокаттарҙың төрлөһө булыуын билдәләне. Улар араһында намыҫлыһы һәм выжданһыҙы, ышаныслыһы һәм буш мискә кеүек күп гөрһөлдәгән, әммә эшенең рәте-сираты юҡ хоҡуҡ яҡлаусыларҙы осратырға мөмкин, тине ул. Нисек кенә булмаһын, суд тупһаларын тапауға һәм адвокат ярҙамына мохтаж булыуға көнөбөҙ төшмәүен теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

*ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН*

# КЕМ МИНАУАТ?

**Дөрөҫтөрмө-юҡмылыр, йәүкә телефон аша ир менән ҡатын, ғаилә мөнәсәбәттәре хаҡында донъяның төрлө мөйөштәренән ҡыҙыҡлы вә ғибрәтле мәғлүмәттәр килеп тора. Уларға түҙеп кенә торабыҙ. Шуларҙың араһынан мине һуңғы арала иң ныҡ аптыратҡаны - Африканың бер иленән килгәне. Баҡтиһәң, унда йәшәгән халыҡтың йолаһы буйынса, ҡатын хыянат иткән осраҡта уның ирен төрмәгә ултырталар икән...**

Дөрөҫтөрмө-юҡмылыр, ошо хаҡтағы мәғлүмәт беҙгә килеп еткәс, ауылдағы бер апай: "Ней атаһы..." - тип бот сабып аптырауын белдергән икән, был хаҡта уға "Йәүкә телефон" аша хәбәр ташыусы икенсе бер апай: "Нәҡ шулай, балаларының атаһын төрмәгә ултырталар!" - тип, теге хәбәргә йүкә шына ҡыҫтырып та ебәргән. Шунан һуң был хәбәр ауылдың рәсми мәғлүмәт сайтына барып эләккән, тейме-нейме...

Мәсьәләнең төбөнә һыу ҡойоп, төйөп ҡараһаҡ, ысынлап та, был осраҡта ир кеше минауат бит. "Шәй, яҡшы иргә хыянат итәләрме? Яҡшы ир янында бүрәнә лә ҡатынға әүерелә, икенсенән, ҡатынын үҙенә хыянат итерлек итеп тәрбиәләгән икән, ир минауат инде. Тимәк, Африканың был илендә иң гуманлы закон сығарғандар..." тип әйткән тейме-нейме был ике ҡатынды тыңлап тороусы өсөнсө ҡатын...

Ярай, әллә ҡайҙа, ер аяғы ер башында ятҡан Әфректә барған ир менән ҡатын, ғаилә мөнәсәбәттәрен артабыраҡ ҡуйып, биртабанға үҙебеҙҙә барғандарына күсәйек. Әлеге ваҡытта ауылдарҙың вә Өфөнөң "Йәүкә телефон" агентлығында бер рәсми мәғлүмәт сәйнәлә. Ул да булһа - Дәүләт Думаһының дәүләт төҙөлөшө һәм ҡануниәт буйынса комитеты бергә йәшәүҙе законлы никахҡа тиңләштергән закон проектын хупламаған. Закон проекты менән биш йыл йәки уртаҡ балалары булғанда ике йыл дауамында "бергә йәшәгән һәм уртаҡ хужалыҡ алып барған ир менән ҡатындың билдәләнгән тәртиптә теркәлмәгән ғаиләһен" ғәмәлдәге никах мөнәсәбәттәренә тиңләргә тәҡдим ителгән. Комитет башлығы Павел Крашенинников билдәләүенсә, хатта законлы никахта ла оҡшаш билдәләрҙең күҙәтелмәүе ихтимал. Ир менән ҡатындың төрлө ҡалаларҙа ғына түгел, төрлө илдәрҙә йәшәүе һәм уртаҡ милеге лә булмауы ихтимал, тип өҫтәгән икән.

"Йәүкә телефон" блогерҙарының был мәсьәләгә үҙ ҡарашы бар. Улар был закон проектының хупланыуы илебеҙҙә күп ҡатынлылыҡ институтын да закон булараҡ таныуға алып киләсәк, тип белдерәсәк. Ни өсөн тигәндә, төрлө урындарҙа төрлө ҡатындарҙан балалары булған ирҙәрҙең дә байтаҡ икәнен иҫәпкә алғанда, был закон ул балаларҙың әсәләре араһында ҡаршылыҡты арттырасаҡ ҡына. Был ҡатындар балаларҙың атаһын үҙ ғаиләһенә килтерер өсөн законлы рәүештә суд юлын тапай башлаясаҡ. Кем белә, бәлки, илебеҙҙең закон сығарыусылары күп ҡатынлылыҡ институтын хуплағас, беҙ был мәсьәләгә тағы бер тапҡыр әйләнеп ҡайтырбыҙ әле.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**✓ Башҡорттар иһә ҡыпсаҡ цивилизацияһының туранан-тура вариҫтары, сөнки борон замандарҙа, ҡыпсаҡтар төрки ҡағанатты етәкләгән осорҙа уҡ, формалашҡан рухи берҙәмлек Башҡортостан ерендә әле лә ныҡ һиҙелә.**






### "Һин үҙең кем, ҡатын?"

*Ҡыпсаҡтарҙы шундуҡ*
*танйыйым мин*
*Егәренән, һынсыл ҡараштан.*
*Беҙҙе Хоҙай һибелеп ер өҫтөнә*
*Мәрйен булыр өсөн яралтҡан.*

...Донъяның мәңгелек серҙәрен, йәшәү фәлсәфәһен аңларға тырышырҙан алда беҙ һәммәбеҙ ҙә тирә-яғыбыҙҙағы кескәй донъяны, ғаилә мөнәсәбәттәрен, ырыу-нәҫелебеҙҙе аңларға тырышабыҙ. Беҙ ни өсөн башҡорт тип аталабыҙ? Ни өсөн тирә-яҡ ауылдарҙа ғына ла кешеләр төрлө телдә һөйләшә, инаныстарыбыҙ, рухи таяныстарыбыҙ ҙа бер төрлө түгел? Дөрөҫ, һуңғы тиҫтәнән ашыу йылдар тирәһендә мәғлүмәт сараларындағы асыҡлыҡ, тарихи дөрөҫлөккә ынтылыш артҡаны бирле мин һорау билдәһе ҡуйған төшөнсәләргә ярайһы дөрөҫ яуаптар табыла бара. Быға республикала киң таралған "Шәжәрә байрамдары"ның йоғонтоһо ла зур. Дөрөҫөн әйткәндә, барлыҡ Башҡортостан районлары һәм ауылдарында ойошторолған был байрам алдынан уҙғарылған "ҡаҙыныу" эштәре, архив материалдарын аҡтарыу ниҫаҡлы табыш һәм асыштарға юлыҡтырҙы. Башҡортостан Юлдаш телевидениеһының "Башҡорттар" программаһында ғына ла беҙҙең әлеге сиктәрҙә йәшәгән республикабыҙ халҡы ғына түгел, Силәбе, Пермь, Ырымбур өлкәләре, Татарстан Республикаһының Аҡтаныш, Аҙнаҡай, Бөгөлмә райондарында ғүмер итеүсе милләттәштәребеҙ ҙә үҙҙәренең кем, ниндәй тамырлы һәм сығышлы булыуын асыҡлай башланы. "Без үзебез башкорт ырыуыннан булып чыгабыз", тип һөйләп тора улар. Әммә быуат буйы тирәһе аңы томаландырылған был милләттәштәребеҙҙең аяныслы яҙмышы йөрәкте һыҙлатмай ҡуймай.

Мин үҙем башҡорттарҙың ҡыпсаҡ ырыуынанмын. Атайым яҡлап та, әнейем яҡлап та. Әнейемдең ҡартатаһы Арыҫланбәк Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылына әлеге Ишембай районындағы Көҙән ауылынан килеп төпләнгән булған. Арыҫланбәковтарҙың һәр быуынында ла муллалар бар.

Ҡыпсаҡтарҙың ғүмер итмеш даирәһе киң. Рухи донъяһы иһә аңғарып та, төшөнөп тә бөтмәҫлек тәрәнлек һәм киңлектәрҙән ғибәрәт. Бер һүҙ менән әйткәндә, үҙҙәрен Күктең Төркиҙәре, йыһан ҡатнашсылары тип атаусы был арий ҡәүеменең донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшөн баһалап бөткәндәре йә булмаһа, баһаларға теләгәндәре юҡ әле. Ни өсөн? Мин уны үҙемсә шулай аңлатам: балалар, ата-әсәһен нисек кенә хөрмәт итһә лә, асылда, уларҙың көнитмеш, рухи һәм илаһи инаныстарын инҡар итеү аша яңылыҡҡа ынтылыусан. Эволюция, дөрөҫөн әйткәндә, емереүҙән башлана. Емермәй тороп, яңыны төҙөп булмай. Әммә... Кешелек, яңылыҡҡа ынтылам, тип, хәрәбәләр аҫтына саф алтынды ла күмеп ҡуйырға һәләтле шул.

Ә ҡыпсаҡтарҙы, улар ниндәй генә телдә һөйләшмәһен, мин шунда уҡ танйыйым. Нисек тип әйтәйем икән... Төҫтәренән, үҙҙәрен тотошонан, һөйләшеп киткәндә темалар даирәһе һәм донъяға мөнәсәбәтенән... Уларҙың холҡондағы ниндәйҙер бәҫ, мәртәбә тойғоһонан.

Киевтың Крещатик урамын ҡыҙырыуым хәтеремдә. Сит ҡалала күп нәмә аңлайышһыҙ, шуға күрә, урамда осраған кешеләрҙән теге-был адрес, ҡайһы бер маршрут хаҡында һораштырмау мөмкин түгел. Мин Крещатикта үҙемә генә билдәле эксперимент уҙғарып маташтым. "Бынау ханым мотлаҡ ҡыпсаҡ ул", - тип ҡарар итәм дә үҙемдең хаҡлы булыуымды һынар өсөн, туҡтатып, ниндәйҙер һорау бирәм. Һәм, әлбиттә, яңылышмайым. Ниндәйҙер энергия, ихласлыҡ, һөйкөмлөлөк, кешегә ҡарата ихтирам һәм үҙ мәртәбәһенә тоғро "хохлушка"лар ике-өс һүҙҙән үк ихласлығын асып та һала. Уларҙың ҡыпсаҡлыҡ асылы һинең дә күңеленә май булып яғыла. Ҡыпсаҡтар бәрелеп-һуғылып барыусан түгел. Донъя ҡыпсаҡтарҙыҡы, иркен, ул - һинеке. Ә был Дон казактарын, христиан динле булыу сәбәпле, "украин" тип теркәгән совет перепистарының аяуһыҙлығында зәңгәр йә йәшел күҙле, сикә һөйәктәре бүлтәйеберәк торған "яңы украинкаларҙың" ни ғәйебе?

Ҡыпсаҡлыҡтары барыбер төҫ-ҡиәфәтендә, холоҡ-фиғелендә ярылып ята ла баһа! Хәйер, әйттем дә, һағышланып ҡуйҙым: был тик ҡан хәтере генә сырамытыр һиҙемләүҙәрем, бәлки, кемгәлер уйҙырма кеүек тә күренер. Әммә генетиктар әйтеүенсә, ҡан хәтере үтә мәғәнәле һәм тотороҡло субстанция икән ул. Беҙ йыш ҡына ҡан аралашыу, шул арҡала ҡан боҙолоу хаҡында шөбһәләнеп һөйләп ҡуябыҙ. Баҡһаң, бер милләттең ҡаны икенсе милләттеке менән бер ваҡытта ла ҡатнашмай икән. Урыҫ менән башҡорттан тыуған балаларҙа йә урыҫ ҡаны ғына, йә башҡорт ҡаны ғына ағыусан. Хатта ҡатнаш ғаиләләге балаларҙың береһенең ҡаны башҡорттоҡо, икенсеһенеке урыҫ булыуы ихтимал икән. Ҡан хәтере, тимәк, үтә көслө һәм тотороҡло субстанция булып сыға.

Ҡыпсаҡлыҡ Мортаза Рәхимов, Нурсолтан Назарбаев, Илһам Әлиев (атаһы Гейдар Әлиев), Минтимер Шәймиев, Олжас Сөләймәнов, Марат Аҙнабаев, Ноғман Мусин, Ғәлим Хисамов, Флорид Бүләков, Рауил Бикбаев, Әхмәт Сөләймәнов, Әхәт Ҡотләхмәтов һәм башҡа һәм башҡа телгә алынмағандарҙан бөркөлөп тора түгелме ни? Ниндәйҙер битарафһыҙлыҡ, алға ынтылыш, үҙ-үҙенә тоғролоҡ, донъя мәшәҡәттәренең ваҡлығынан бөгөлөп төшмәү ғәләмәте бар уларҙа.

Дөрөҫ, тарихи ваҡиғалар арҡаһында, күп милләттәр араһына мәрйен булып сәселгән, әммә шул, үҙҙәрен ассимиляциялаған милләттәргә телен, инаныстарын һәм рухи ныҡлығын индергән ҡыпсаҡтарҙы тарих тәгәрмәсе аҫтында тапалғаны, милләт булараҡ үҙҙәрен һаҡлап ҡала алмағаны өсөн битәрләргә, улар ижад иткән мәҙәни ҡиммәттәрҙең бөгөн христиан, католик, ислам динле халайыҡтарҙың хазиналығына инеп, тырым-тырағай әрәм-шәрәм ителеүенән үкенес кенә түгел, ғәрлек тойғоһона ла бирелергә мөмкин... Ләкин... Баҡыйлыҡ даирәһендә үҙен мәртәбәле тотҡан ҡыпсаҡтарҙың рухи ҡөҙрәтенә альтернатива булырлыҡ рухиәтте, улар айырым халыҡ булып йәшәүҙән туҡтағаны бирле, бик күп быуаттар үтеүгә лә ҡарамаҫтан, бер кемдең дә тәҡдим иткәне юҡ бит әле.

Нимәнән ғибәрәт һуң был үҙенсәлек? Ҡыпсаҡтар ижад иткән культураның төп асылы империя фекерлелек һәм ватансылыҡ. Идеалдары - Йыһан әйләнеше, Йыһан хәрәкәте ҡатнашсыһы булыу. Был төшөнсәләр башҡорттоң да төп ынтылышы, төп идеалы һәм уй-аң ғына түгел, художестволы фекер даирәһе лә бит. Беҙҙең халҡыбыҙ Йыһан менән дә, тәбиғәт менән дә аяулы аралашсылыҡ ысулын барлыҡҡа килтереүгә өлгәшеүсе, уны Тәңреселек, Зороастра фәлсәфәһе, Будда тәғлимәтен формалаштырып нигеҙләүсе милләт ул.

Рәсәй тарихсылары, тарихи ваҡиғалар хаҡында һөйләгәндә, Киев кенәзлеген телгә ала, татар-монгол баҫҡынсылығын тасуирлай, ә бөйөк Ҡыпсаҡ цивилизацияһы хаҡында ләм-мим. Әйтерһең дә, Иван Грозный, Юрий Долгорукий, Тургенев, Суворов, Аксаков, Мусин, Карамзин һ.б. кеүек Рәсәй тарихы һәм культураһына мәңгелек яулаусы ҡыпсаҡтарҙың ҡыпсаҡлығын танығаһың, рус мәҙәниәтенә хилафлыҡ килә. Уларҙы татар сығышлы тип иғлан итеп маташыусылар ҙа бар. Әммә татар мәҙәниәтен ҡыпсаҡ мәҙәниәте менән бутарға ярамай.

Ҡытай, Иран, Византия, Һиндостан культураларынан кәм булмай ҡыпсаҡтарҙың ҡаҙаныштары. Тамырҙары, традициялары көслө була уларҙың. Дөрөҫ, тула-кейеҙ, күн, тире, ағас, йәнлек тиреләренән яһалған ҡиммәтле художестволы әйберҙәр Европала һаҡланған таш һарайҙарға сағыштырмалы аҙыраҡ ғүмерле. Ҡиммәтле таштар ултыртылған алтын, көмөш биҙәгестәр археологтар тарафынан әле лә табылып тора. Дәште-Ҡыпсаҡ иләндә социаль институттар, йәмғиәттең йәшәү формаһы, социаль баҫҡыстар, хәрби тәртип, дипломатия һәм, әлбиттә, донъяны, ғаләмде камил аң менән ҡабул итеү - былар бөгөнгөләр саҡ өйрәнеп маташҡан демократик-хоҡуҡи ҡанундар ул. Әйткәндәй, донъя бөгөн дә ҡыпсаҡтар формалаштырған һалым системаһы, субординация, административ буйһонғанлыҡ һәм баҫҡыстар шарттарында йәшәй. Был власть менән халыҡтың үҙ-ара һыйышып йәшәүен тәьмин итеүсе камил мөнәсәбәттәр формаһын Сыңғыҙ хан үҙе яулап алған киңлектәргә идара итеү ҡағиҙәһенә әйләндерә.

Һалым системаһын, билдәле булыуынса, һуңыраҡ Адам Смитт ғилмиләштерә, уның ҡыпсаҡтар һәм Сыңғыҙ хан барлыҡҡа килтергән нигеҙҙәре беҙгә, коммунизм төҙөүселәргә лә, бөгөнгө капиталистарға ла хеҙмәт итте һәм итә әле. Ҡыпсаҡтарҙың йәнә бер һоҡланғыс ҡаҙанышы - асыҡ һәм ябыҡ ҡаңбабалар мәктәптәре эшмәкәрлеген нигеҙләү. Был мәктәбәләр университет тип аталыуға хоҡуҡлы. Утыҙ йылға тиклем иҫәпләнгән ябыҡ типтағы мәктәбәләр медицина, астрология һәм астрономия (Арҡайым обсерваторияһы, Стоунхендж тибындағы ҡоролмалар), шәжәрә, минералогия, геология, йыһан, уның кешелек, тәбиғәт менән берҙәмлеге кеүек һәм башҡа ғилми эшмәкәрлек - былар онотолған, ләкин урыҡ-һурыҡ тарихи шаһитнамәләрҙә, аңыбыҙҙа һаҡланған үткәнебеҙ ул. Отрар ҡалаһында тупланған китапхана Александрияныҡынан кәм булмай. Монголдар ул китапхананы ете көн буйы үртәй, әммә ҡалған-боҫҡаны булһа ла тороп ҡала әле. Ул китапхананы бына нисә быуаттар буйы, Иван Грозный китапханаһы, тип эҙләйҙәр ҙә эҙләйҙәр.

Ҡыпсаҡтарҙы бөгөн ҡумыҡ, ҡарасәй, балҡар, казак, ҡаҙаҡ, татар, сыуаш, яҡут, хакас, грузин, урыҫ, венгр, әзербайжан, Ҡырым татарҙары, гагауз, башҡорт һәм башҡа милләттәр араһында осратырға мөмкин. Башҡорттар иһә ҡыпсаҡ цивилизацияһының туранан-тура вариҫтары, сөнки борон замандарҙа, ҡыпсаҡтар төрки ҡағанатты етәкләгән осорҙа уҡ, формалашҡан рухи берҙәмлек Башҡортостан ерендә әле лә ныҡ һиҙелә. Был берҙәмлек тәбиғи, ул ситтән килтерелгән һәм көсләп тағылған элемент һымаҡ сурайып күҙгә төртөлмәй, психологик ризаһыҙлыҡ, ытырғаныс тойғолар уятмай.

XX быуат аҙаҡтарында ҡыпсаҡ тарихы һәм халыҡтың Рәсәй дәүләтен формалаштырыуға индергән өлөшө хаҡындағы мәғлүмәт матбуғатта күренгеләй башланы. Күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәновтың һәм ошо юлдар авторының " Башҡортостан" гәзитендә, Ғайса Хөсәйеновтың "Ватандаш" журналында, Әхмәтгәрәй Йәнғәлиндең "Ағиҙел" журналында донъя күргән мәҡәләләре, Әхтәр Боҫҡоновтың үҙ шәжәрәһе тамырҙарын юллап эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә яҙған китаптары рухи тамырҙарыбыҙҙы барлауға ярайһы ҡыҙыҡлы өлөш индерҙе. Минең үҙемде ҡаҙаҡтың рус телле шағиры Олжас Сөләймәновтың "Аз и Я" тигән китабы, Рәшит Аҡкилдиндың диссертация өсөн туплаған материалдары менән танышыу 90-сы йылдарҙа "Ҡыпсаҡтар" поэмаһын яҙырға илһамландырғайны. Мин уны эпитафия тип атарға йөрьәт иттем. Тырым-тырағай тарҡалған ҡәүемдең ҡәберенә бер шәлкем сәскә һалып маташыуым ине. Уның мәктәп программаһына инеүе мине ҡанатландырҙы. Дөрөҫ, әҫәрҙе ҡапылғара ҡабул итеп тә бөтмәнеләр. Сөнки бының өсөн уҡыусының да мәғлүмәтле булыуы кәрәк бит. Ә инде ҡумыҡ Морат Аджиҙың "Полынь половецкого поля" тигән китабының Башҡортостанға килеп етеүе ҡыпсаҡтарҙың ғына түгел, тотош башҡорттарҙың хәтер офоҡтарын йәнә лә киңәйтеп ебәрҙе.

Грузин яҙыусыһы Константин Гамсахурдияның "Давид 1Y строитель" романында иһә ҡыпсаҡтарға кире мөнәсәбәт белдерелә. Дидгори янындағы Византия баҫҡынсылары менән һуғыш барышында Давид батша яғында 60 мең яугир ҡатнашып, шуларҙың 45 меңе Артыҡ хан етәкләгән ҡыпсаҡтар булыуҙы Гамсахурдия кисерә алмай, күрәһең. Ә бит рәхмәтле булырға тейеш грузиндар был еңеү өсөн. Дәүләтселек яҡлана. Ҡыпсаҡтарҙың күбеһе грузин халҡы эсенә ҡом кеүек һибелә. Үкенесле, шул рәүешле төрки тамырҙарын да онота.

Әйткәндәй, 90-сы йылдар аҙағында ҡыпсаҡтар Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып (башлап йөрөүселәре Рәшит Аҡкилдин менән эшҡыуар Фирғәт Әхмәтов) ырыуыбыҙ йыйынын ойошторғайны. Ул

✓ *Уларҙы бетеү итеп, үҙен һаҡлау өсөн эшләгәндәр. Тәү сиратта, түште, умыртҡа бағанаһын һаҡлау өсөн. Сөнки улар ниндәйҙер ҡөҙрәт менән халыҡтың аңына килгән, тимәк, үҙ көсө бар.*



Күгәрсен районындағы ғәжәйеп төйәгебеҙ, ҡыпсаҡтар күпләп йәшәгән Эйек йылғаһы буйындағы Мораҙым мәмерйәһе итәгендә уҙғарылды. Рухи күтәренкелек солғап алғайны беҙҙе. Рәшит Аҡкилдинды ырыуыбыҙ бейе тип һайланыҡ. Әммә был матур йолаға әүерелергә тейешле сара артабан һүнеп ҡалды. Хәтеремдә, Венгрияға сәфәр ҡылып ҡайтҡандан һуң арҙаҡлы ғалимәбеҙ Фирҙәүес Хисаметдинова радио аша тәьҫораттары менән уртаҡлашҡайны. Унда, Венгрияла, йыл һайын беҙҙәге һабантуй кеүек йыйындар уҙғарылыуы, шул йыйында ҡыпсаҡтарҙың тарихы хаҡында ла мәғлүмәт бирелеүе тураһында һөйләгәйне ул. Ҡыпсаҡ тарихын унда көтөүсенән алып ғалимға тиклем яҡшы белә, тигәйне ул. Был мине ныҡ тетрәндерҙе. Ә беҙ...

Бер йылды миңә ул саҡтағы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары министры Зөфәр Тимербулатов, шағир Ҡәҙим Аралбайға юлдаш булып, Самара (мин уны боронғо Сәмәрә исеме менән шулай тип атау яғында, ә Һамар тип түгел), Һарытау яҡтарында булырға тура килде. Ҡаҙағстан далалары менән Аҙау диңгеҙе аралығын тоташтырыусы Һырт, ҡыпсаҡтарҙың күсенеш юлы аша үтеү мине шул тиклем тулҡынландырҙы. Берсә алһыу ләләләр сәскә атҡан, берсә ҡылған сәскәһенән күк төҫкә ингән был Һырттан көньяҡҡа табан китеп барыусы ҡандаштарымдың көймәләрендә ниндәй һылыуҙар, эйәр өҫтәрендә ниндәй батырҙар тирбәлде икән? Улар араһында миңә ғүмер бирәсәк бөрәү ҙә булғандыр бит... Һуңынан ике быуат буйы әлеге Рәсәй территорияһының Көньяҡ һәм Көнсығыш сиктәрен һаҡлап ғүмер кисеүсе ҡыпсаҡ ҡағанаты, татар-монгол сиреүенә ҡаршы ике тиҫтә самаһы йыл ҡаршы тороп, яһаҡ түләү шарты менән Килешеү төҙөгәндән һуң, ныҡ ҡырылыуы, физик һәм рухи яҡтан ҡаҡшауы арҡаһында тарҡала башланымы икән?

Һәр хәлдә, XIII быуаттарҙа ул көсһеҙләнә һәм кемдер христиан, кемдер католик диндәрен ҡабул итә. Мин иһә ислам динен яҡын күреүселәр нәҫеленән. Минең зат-ырыуым бөгөн Эйек, Наҡаҫ буйҙарында йәшәй. Ҡара ҡыпсаҡтар беҙ. Боронғолар. Ҡара сәсле, йәшел йә зәңгәр күҙле һылыу кешеләр. Бөрйән районына сәфәр ҡылғанымда Бошман бейҙең ҡәбер ташына зыярат ҡылғайным. Бер йылды Ишембай районындағы Ноғман Мусин ағайҙың тыуған ауылы Ҡолғонала йәшәүсе ырыуҙаштарымда ҡунаҡта булып кинәнес кисереп ҡайттым. Ярты донъяға һибелеп йәшәгән ырыуҙаштарымды танымау мөмкин түгел. Ә төрки телле халыҡтарҙың "Туғанлыҡ" фестивалендә хакас ҡыпсаҡтары менән аралашыу ҙа онотолмай әле.

" Ҡыпсаҡтар" поэмаһында мин Юғары аңдың "Һин үҙең кем, ҡатын?" тигән һорауына: "Мин - ҡыпсаҡ", - тип яуап биргәйнем. Һәм, әлбиттә, ниндәйҙер төпкө аңымдағы державасылыҡ "сире" менән сирләһәм дә, мин башҡорт ҡыпсағы.

Донъялыр был... Уның ҡатмарлы ла, ябай ҙа төшөнсәләрен аңғарып та, аңлап та бөтөүе еңел түгел...

**(Аҙағы. Башы 17-18, 20-се һандарҙа).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СӘСМӘҮЕРЕМ, СЕЛТӘРЕМ...

**Һуңғы йылдарҙа мәҙәни генә түгел, сәйәси сараларҙа, телевидениела, хатта урамда милли биҙәүестәр таҡҡан, милли биҙәктәр менән байытылған кейем кейгән кешеләрҙе йыш осратабыҙ. Һәм был беҙҙе бер ҙә ғәжәпләндермәй, киреһенсә, һөҡланыу тойғолары ғына уята. Халыҡтың мәҙәни мираҫын һаҡлауға йүнәлтелгән бәйгеләр, этник мода конкурстары ла йыш ойошторолоп тора бит хәҙер. Үткән аҙнала Сибай ҡалаһында быйыл өсөнсө тапҡыр үткән "Сәсмәүерем, селтәрем" Төбәк-ара башҡорт милли кейеме фестивале лә хәҙер күркәм йолаға әүерелде. Унда Сибай, Өфө ҡалаларынан, Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Бөрйән, Учалы, Мәсетле райондары оҫталары көс һынашты.**



Сибай ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге, Сибай сәнғәт колледжы, Асия Ғәйнуллинаның "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе, Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ойошторған был сараның быйылдан башлап төбәк-ара статусын йөрөтәсәге лә уның кимәле тураһында һөйләй. Ошо байрамда уҡ тағы бер башланғысҡа: селтәр, һаҡал, алмиҙеү, иҙеү, хәситә, арҡыры яға, ҡашмау, таҡыя, ҡәмәр билбау кеүек тағы ла әллә күпме милли байлыҡтарыбыҙға патент алыу эшмәкәрлегенә нигеҙ һалынды. Йәғни, киләсәктә һәр оҫтаның үҙенең ҡул эштәренең рәсми хужаһы бар икәнен раҫлаған документы буласаҡ.

Ғөмүмән, Асия Солтан ҡыҙы етәкселегендәге Сибай ағинәйҙәре тотош республикала милли кейемдәрҙе тергеҙеүҙе башлаусылар булды, тиһәк тә була. Улар әле лә яңынан-яңы кейем өлгөләре тергеҙә тора, башҡаларға күрһәтә тора. Уларға ҡарап, башҡа район-ҡала ағинәйҙәре дәрт итеп тотондо был эшкә. Милли костюм - халыҡтың милли уҙаңының күрһәткесе, тип күп һөйләйбеҙ. Әммә беҙ бөгөн үҙебеҙҙең өләсәйҙәребеҙҙән зауығыбыҙ менән генә түгел, донъяға ҡарашыбыҙ менән дә айырылабыҙ. Шуға ла бөгөн минең өсөн матур булған нәмәне улар бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул итер ине. Ә милли биҙәк, милли кейем, уның теге йәки был элементының тарихи ерлеге, аңлатмаһы бар. Тап ошо йәһәттән сибайҙарҙы өлгө тип ҡабул итергә була. Бигерәк тә селтәр, ҡашмау эшләүҙә. Ағинәйҙәрҙең кемеһенән генә тотоп һораһаң, тәфсирләп аңлаталар: быныһы - алмиҙеү, уртаһынан ике-өс буй ғына тәңкә төшкән; быныһы - тәңкәле иҙеү, ул шау тәңкәнән тора һәм ҡыҙыл йә ҡара ерлеккә баҫыла; быныһы - сәсмәүер, толомдоң осона ғына тағыла. Арҡыры яға иһә башлыса башҡорт казактары ҡатындарының биҙәүесе. Генералдарҙың ошо рәүешле миҙалдарын тағып йөрөгәнен күреп, шуға оҡшатыбыраҡ яһағандарҙыр, күрәһең.

- Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының селтәр, һаҡал, яға, ҡашмауҙары - ул биҙәнеү әйберҙәре түгел. Матур булайым, тип эшләп ултырмаған улар уны, сөнки ваҡыттары булмаған, барыһы ла көн яҡтыһында ғына башҡарылған. Уларҙы бетеү итеп, үҙен һаҡлау өсөн эшләгәндәр. Тәү сиратта, түште, умыртҡа бағанаһын һаҡлау өсөн. Шуға ла борондан килгән биҙәктәрҙе ҡулланырға кәрәк. Сөнки улар ниндәйҙер ҡөҙрәт менән халыҡтың аңына килгән, тимәк, үҙ көсө бар. Мәҫәлән, өсмөйөш, ҡаҙ теше биҙәктәре теш ҡырҡыу өсөн ҡулланылған, йәки ул күҙ тейеүҙән һаҡлай. Кейемдәрҙе тергеҙәбеҙ икән, боронғо функцияһы менән тергеҙергә тейешбеҙ, - ти ағинәй Фәниә Сарбулатова. Фәниә апай шулай уҡ мәрйендән теҙелгән селтәрҙең (пәрҙә тип тә әйтәләр) тап башҡорт биҙәге булыуы тураһында ла һөйләне. Уның фекеренсә, стилләштерелгән осраҡта ла, үҙебеҙҙең стилде һаҡлау өсөн хәситәләрҙә бәләкәй генә элемент итеп булһа ла селтәр ҡулланыу мөһим. Сөнки башҡорт биҙәктәре мари, сыуаш, мордваларҙыҡына оҡшаш, һуңынан улар беҙҙең биҙәктәрҙе ҡулланғанһығыҙ тимәһен өсөн кәрәк был. "Сәсмәүерем, селтәрем" кеүек фестивалдәрҙең маҡсаты ла үҙ мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнеү, таратыу һәм үҙебеҙҙең башҡорт стилен тотоуҙарын күҙәтеү бит.



Әйткәндәй, һәр төбәк был селтәрҙәрҙе үҙенсә атап йөрөтә - муйса, һаҡал, түшелдерек, яға. Бының бер хилафлығы ла юҡ, был башҡорт теле лексикаһының байлығын ғына күрһәтеп тора. Иң мөһиме, биҙәүестәр үҙҙәре булһын. Был төрлөлөк үҫеш тураһында ла һөйләй бит. Әммә башҡорт милли кейемен, биҙәүестәрен тергеҙеү менән күптән шөғөлләнгән һәм был өлкәлә күп мәғлүмәт туплаған Илдар Ғатауллин, мәҫәлән, селтәр менән һаҡал бер-береһенән айырыла, ти: "Улай ғына ла түгел, уларҙың төрҙәре лә бар. Һаҡал Инйәр һаҡалына, Ырымбур һаҡалына, Дим һаҡалына һәм тағы бер нисә төргә бүленә". Тимәк, хәҙер ошо йәһәттән музейҙарға һаҡланған өлгөләрҙе өйрәнеү эше лә тора алдыбыҙҙа. Шуныһы ҡыуандырҙы, ошо фестивалдә ҡатнашыусы оҫталарҙың күбеһе селтәрҙәрҙе ырыуҙар, төбәктәр буйынса бүлеп ҡарап эшләгән. Мәҫәлән, Сибай педагогия колледжы уҡытыусыһы Гөлдәр Дәүләтбаева студенттар менән ошо темаға фәнни эштәр башҡара. Гөлдәр Риза ҡыҙы Шитова, Руденко хеҙмәттәренән тыш, башҡорт ғалимәһе Нәжибә Мәҡсүтованың эштәрендә биҙәүестәр, уларҙы атамаһы тураһында мәғлүмәт булыуын иҫкә төшөрҙө.

Төньяҡ-көнсығыш төбәктә йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың үҙ милли кейемен һәм биҙәүестәрен тулы тарихи ерлегендә тергеҙә алыуына ла шатландыҡ. Мәсетле районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, Тыуған яҡты һәм тарихты өйрәнеү музейы директоры Нәзирә Фазылйән ҡыҙы Ахкәмова һөйләүенсә, Салауат яуынан һуң төбәктәге ауылдарҙың барыһын да яндырғандар. Шул мәлдә бер муйсаның хаҡы бер ат хаҡына тиң булған. Сөнки был төбәк ҡатын-ҡыҙҙары уны шау көмөш тәңкәнән эшләгән һәм бер аҙ ғына аҡыҡ, йәшмә, фирүзә таштары менән биҙәп ебәргән. Шуның өсөн хаҡы ла ҡиммәт булған. Ҡайһы бер ауыл халҡы ошо муйсаларын йыйып, һалдаттарға биргән һәм шул рәүешле ауылдарын һаҡлап алып ҡалған.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# КИСӘГЕГӘ ҠАРАҒАНДА...
## бәхетлерәкһеңме?

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары экспертары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-ендә Паркинсон ауырыуы табылған. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарараланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырыға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Корнелл университеты ғалимдары раҫлауынса, дисгевзия - тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы һеҙәмтәһендә кеше ашарға ярамаған нәмәләр ашап, организмына ҙур зыян килтерә. Ғалимдар 158 ауырлы ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә тикшеренеүҙәр үткәргән. Бындай тайпылыш уларҙың 47 процентында күҙәтелгән һәм улар йышыраҡ балсыҡ, боҙ, крахмал, порошок, һабын, ҡағыҙ, пенопласт, аш содаһы ашаған. Тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы, тәү сиратта, организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Шуға ла бындай ҡатындар хәүеф төркөмөнә ҡарай, улар араһында ауырлығы нормаға тулмаған балалар табыусылар күберәк. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә ҙурая. Анемия мейегә йөгөнтө яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйберлгә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә, уның сәләмәтлеккә насар йоғонтоһо ҙур.

■ Юғары интеллектҡа эйә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, ти Буффало университеты ғалимдар. Эксперимент ваҡытында 105 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет математика менән инглиз теленән тест эшләгән. Һуңынан көслө зат ҡатын-ҡыҙҙы баһалаған, быныҡ алдынан тест һөҙөмтәләре белдерелгән. Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара алалаша башлағас та, уларға ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан. Улар был аҡыллы гүзәл заттар менән ҡабаттан осрашырға теләмәгән. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә үҙенең көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.

■ Психик яҡтан тотороҡло булған кешеләр үҙҙәренең тормошо әлеге мәлдә үткәнгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, ә киләсәк тағы ла яҡтыраҡ буласағына ышана. Депрессия мәлендә был инаныс тулыһынса юҡҡа сыға, ти белгестәр. Канада ғалимдары раҫлауынса, үткәндәргә ҡарағанда бөгөнгө яҡшыраҡ тип иҫәпләүселәр ун йылдан да ошондай уйҙа була. Ә кем үткәне менән бөгөнгөһө араһында айырма күрмәй, киләсәген дә төҫмөрләй алмай. Тап улар йылап депрессияға килә лә инде. Депрессия хәлендәге кеше киләсәге тураһында уйлауҙан бөтөнләй баш тарта. Шуға ла уларҙы дауалаған саҡта ошоно иҫәпкә алырға һәм яҡшы үҙгәрештәргә көйләргә кәрәк, ти ғалимдар.

*ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ*

**Мин бәләкәй саҡта беҙҙең яҡта "һабантуй" тип һөйләгән кеше бик юҡ ине. Күберәген "Ҡыҙҙар уйыны" йәки "йыйын" (быныһын инде минең атайым һәм ҡартыраҡ кешеләр әйтә ине) тиҙәр ине был байрамды. Һуңынан белдем - борон былар икеһе ике сара булған. "Йыйын"да башлыса ирҙәр ҡатнашҡан. Унда ауыл яҙмышына, дөйөм халыҡҡа ҡағылышлы мәсьәләләр ҙә хәл ителгән, төрлө көс һынашыу уйындары: көрәш, уктан атыу, ат сабыштырыу, йүгереү кеүек ярыштар ҙа үткәрелгән. Ә "Ҡыҙҙар уйыны"на килгәндә, исеменән үк күренеп тора - унда тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡатнашҡан. Совет осоронда инде бына ошо ике сараны өләшләтә берләштереп, һабантуй яһағандар. Һабантуйҙар, дөйөм алғанда, бөтә ерҙә лә бер төрлө уҙа. Элек тә шулай ине, әле лә шулай. Ә бына Өршәк буйы башҡорттарында һабантуйҙың иң төп өлөшөндә (көрәш, ат бәйгеһе кеүек ярыштар менән бер ҡатар, тиерлек) түңәрәк уйыны булған. Йәғни бар халыҡ ҙур түңәрәккә тотоноп, йырлап әйләнә, уртала бер нисә кеше парлашып шул халыҡтың таҡмағы аҫтында бейеп өйөрөлә. Был хәл уҙған быуаттың 60-сы йылдар баштары-урталарына тиклем дауам итте. Шуныһы ҡыҙыҡ, был уйынды йәштәр кис көнө лә дауам итә ине. Йәғни беҙҙең яҡта һабантуйҙың киске уйыны ла була торғайны. Телевидениела эшләй башлағас, күңелдә бәләкәй сағымдан хәтерҙә ҡалған "Ҡыҙҙар уйыны" байрамын фильм итеп төшөрөү хыялы тыуҙы. Әсәйемдең бер туған һеңлеһе - 1925 йылда тыуған Фәрхинур Мәһәҙи ҡыҙы Назарованан (йәне йәннәттә булһын) ошо уйын тураһында яҙыуын үтендем. Ул яҙып бирҙе. Ә мин шуның буйынса сценарийын яҙҙым. Режисссер Әмир ағай Абдразаков менән һөйләшеп килешенгәйне, тик уның эштәре күбәйеп, аҙаҡ үҙе ауырып китте. Һуңынан был эшкә режиссер Фирҙәүес Харисова менән тотонғайныҡ, телевидениела үҙгәрештәр булып, миңә икенсе редакцияға, аҙаҡ радиоға күсергә тура килде. Ҡыҫҡаһы, ваҡыт етмәнеме, ныҡышмалылыҡмы - фильм төшөрөү хыял ғына булып тороп ҡалды .
Бөгөн иһә Фәрхинур апайымдың миндә һаҡланған ҡулъяҙмаһын "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итәм.**

**Әлфиә БАТТАЛОВА,
журналист.**

# "ҠЫҘҘАР УЙЫНЫ",
## йәки меркет-мең ырыуы башҡорттарының бер йолаһы



Меркет-мең ырыыуына ҡараған ауылдар башлыса Өршәк йылғаһы буйлап теҙелгән. Ҡайһы берҙәре Өршәктән егерме-утыҙ саҡырым алыҫлыҡта урынлашҡан. Уларҙан Түрсәгәҙе ауылы шул исемдәге йылға буйында, Абдулла ауылы (Сәлих, Юлдаш), Дөйәбатҡан, Берикмәк, Дүрттояҡ, Өсбәлеш, Мостафа, Ташбаш ауылдары Өршәк йылғаһынан көнсығышта ята. Ташбаш тигән башҡорт ауылы хәҙер бөтөнләй юҡ инде. Солтанморат тигән мишәр ауылы менән ҡушылып, бындағы башҡорттар бөтөнләй мишәрләшеп бөткән. Мостафа ауылы башҡорттары менән дә шул уҡ хәл. Дөйәбатҡан, Берикмәк, Дүрттояҡ ауылдарында алтмышынсы йылдарҙан уҡытыуҙы татар теленә күсереү сәбәпле, йәштәр татарса һөйләшеүгә күсеп бөткән тиерлек. Тик оло быуын кешеләре генә башҡортса һөйләшә.

Һүҙ "Ҡыҙҙар уйыны" тип йөрөтөлгән йола тураһында. Был йола бик борондан килә. Өршәк буйы ауылдарының аралары 7-10 саҡырым самаһы ғына. Ошо ауылдарҙың һәр ҡайһыһында "Ҡыҙҙар тауы" тип йөрөтөлгән ҡалҡыу урын (был яҡтарҙа бейек тауҙар юҡ - ҡалҡыулыҡтар ҙа тау тип йөрөтөлә), йәғни тауҙар бар. Был исемдең барлыҡҡа килеүендә бер ниндәй ҙә ваҡиғалар, легендалар юҡ. Улар ошо яҡтың йолаһы булған уйын үткәрә торған урын булғаны өсөн генә шулай аталып йөрөтөлгән.

Элек-электән үк үткәрелгән ул "Ҡыҙҙар уйыны". Ләкин, заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, "Ҡыҙҙар уйыны"н үткәреү ваҡыт үтеү, заманалар үҙгәреү менән үҙгәрештәр кисергән. 1890 йылда тыуған әсәйем шулай хәтерләй торғайны:

- 20-се быуат башында ошолайыраҡ ине: аҙғы ҡыр эштәре бөткәс, көндәр йәмләнгәс, еткән ҡыҙҙар, йәш килендәр, бала-сағалар "Ҡыҙҙар тауы" тип аталған ҡалҡыулыҡҡа иң яҡшы, ҡупшы кейемдәрен кейеп, тәҙәнепбиҙәнеп, уйынға йыйылалар. Күрше ауылдарҙан да киләләр. Тау башына төрлө төҫтәге сағыу биҙәкле күлдәктәр, тәңкәле еләндәр, ҡыҙыл мәрйен, көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән ҡашмау, сәскап, сулпы, ҡара алтын ялатылған көмөш беләҙек-йөҙөк кейгән ҡыҙҙар, килендәр йыйыла. Һәр кемдең йөҙөндә - шатлыҡ, дәрт. Вағыраҡ ҡыҙҙар үҙ уйындарын башлап ебәрә: бейешәләр, арҡа һүғыш уйыны уйнайҙар, түңәрәккә тотоношоп, таҡмаҡ әйтеп бейешәләр. Уйында рәсми кешеләр килеп, бойороҡ биреп йөрөмәй. Йыл да килгән тәртип буйынса башлана, дауам итә, тамамлана. Йәш килендәр, еткән ҡыҙҙар - уйындың хужаһы. Ҡумыҙсы ҡыҙҙар йәки уйнай белгән оло йәштәге ҡатындар ҡумыҙ тарта, ҡыҙҙар бейешә. Бейеп бөткән ҡыҙ икенсеһенә бейергә баҫа. Бейешеү бейергә теләгәндәр бөткәнсе бара. Артабан түңәрәк уйыны башлана. Бында таҡмаҡ артынан таҡмаҡ бер ҙә өҙөлмәй дауам итә тора, түңәрәк уртаһында икешәрләп әйләнеп бейей торалар. Түңәрәк ҙур булһа, уртала бер нисә кеше икешәрләп әйләнеп бейей. Уйнаусыларҙы бер көй ялыҡтырһа, икенсе көй башлайҙар. Әйтелгән таҡмаҡтың мәғәнәһенә ҙур иғтибар бирелә. Көлкөлө йырҙарға рәхәтләнеп көлөшәләр. Тәртмә таҡмаҡтар ҙа әйтелә. Ләкин кемдер башҡа берәүҙе кәмһеткән таҡмаҡ әйтһә, тиҙ генә башҡа йырға йәки көйгә күсеп китеп, бәхәсте ҡуйыртып ебәреүҙе иҫкәртәләр. Ҡыҙҙар тирәһенә егет-елән килә башлаһа, еңгәләр, әбей-һәбейҙәр былға юл ҡуймай. Егеттәр алыҫтан ғына ҡарап йөрөргә мәжбүр була.

Заманалар үҙгәреү менән ҡыҙҙар уйынын үткәреү тәртибе лә үҙгәрә төшә. Октябрь революцияһынан һуң дини тәртиптәрҙең йомшарыуынанмы, ҡатын-ҡыҙға ирек бирелеү сәбәплеме, "Ҡыҙҙар уйыны"нда ир-егеттәр ҙә ҡатнаша башлай. Уйын меңмеркет ырыуының Өршәк йылғаһы башындағы тәүге ауылы Айыттан башлана. Уйын был осорҙа, ғәҙәттә, йома көн уҙғарыла (Күрәһең, был да үҙенә күрә халыҡты диндән ситләштереүгә йүнәлтелгән булғандыр. Элек бит халыҡ һәр йома мәсеткә йыйылып вәғәз тыңлаған). Уйын тамамланғанда: "Киләһе йомала "Ҡыҙҙар уйыны" Мырҙағол ауылында була", - тип иғлан ителә. Икенсе йомала Мырҙағолға йы-

✓ *Инвестиция өлкәһендәге үҙегеҙҙең генә белемгә ышанмағыҙ. Капиталын уңышлы һәм төшөмлө тотона белгән аҡыллы кешеләр менән кәңәшләшегеҙ. Шунан һуң ғына аҡсағыҙҙы хәүефһеҙ булған һәм ҡайтарып ала алған эшкә һалығыҙ.*

йылалар. Унан Сумарға, унан Моразымға, унан Төрөмбәткә, артабан Ҡаҙморонға, Өҫәйенгә, Йәнбәккә, Мерәҫкә... Өршәктән ситтәрәк ятҡан бәләкәйерәк ауылдарҙа уйын аҙна уртаһында була. Сөнки уйын Өршәктең түбәнге ауылдарына еткәнсе, иген өлгөрә башлай. Ҡыҙыу эш етә, уйын ҡайғыһы бөтә.

"Ҡыҙҙар уйыны"н үткәреү тәртибе ошолай: мәҫәлән, уйын Төрөмбәттә үткәрелә, тип, Моразымда иғлан ителә. Төрөмбәттә аҙна буйына (йоманан йомағаса) әҙерлек эштәре бара. Һәр хужалыҡ йорт тирә-яғын йүнәтә, өйөнөң тышын аҡлай, бәрәңге баҡсаларын утай, йыуылмаған булһа, өйөн йыуа, самауыр, ҡомған, еҙ тас кеүек әйберҙәрен Өршәккә алып барып, ҡом менән ышҡып, ялт иттереп йыуып ҡуя. Өйөн биҙәй: урҙаға аҫалы балаҫтарын, һандығынан сығарып, таҫтамал баштарын, матур яулыҡтарын, яңы матур күлдәктәрен элә; сөйҙәргә ҡыҙыл башлы таҫтамалдар, өрлөккә сигелгән өрлөксәләр элена. Тәҙрәләрҙә ҡорғандарҙың сигелгән-ҡайылғандары урын ала. Түрьяҡ һәм ҡаҙанлыҡ араһын шаршау бүлә; һикегә аҫалы балаҫ, түр юрғаны йәйелә; түшәк-яҫтыҡтарҙың тышы алыштырыла йәки йыуып кейҙерелә һәм ҡат-ҡат итеп һандыҡ өҫтөнә өйөп ҡуйыла; ә мейес һөткә генә иҙелгән аҡбур менән кершән кеүек итеп ағартыла. Көнө етер алдынан тары төйөп онлайҙар - белен бешерелә. Сәк-сәк, бауырһаҡ һәм, быныһы Өршәк буйы ауылдарына ғына хас ризыҡтыр, моғайын, бөрөш бешерелә (Ҡамыры бауырһаҡтыҡы кеүек баҫыла ла, бармаҡ башы хәтле итеп туралған ҡамыр эре ҡыл иләк өҫтөндә ныҡлап ҡыҫып тәгәрәтелә һәм майҙа бешерелә - был бөрөш була инде).

Ир-ат йә кесаҙна, йә йома иртүк тороп һарыҡ һуйып, ит әҙерләй. Шулай итеп өйҙә бөтә нәмә әҙер. Йома көн иртән үк бер нисә егет ҡолға күтәреп, өй беренсә йөрөй башлай. Һәр өйҙән ҡыҙҙармы, әбейҙәрме, килендәрме, йә таҫтамал, йә яулыҡ, йә ситса сығарып ҡолғаға бәйләй, уйынығыҙ һәйбәт үтһен, тәүфиҡлы булығыҙ, тип теләк теләй; берәр тиҫтә йомортҡаһын да сығарып, йыйыусыларҙың биҙрәһенә һала. Егеттәр рәхмәт әйтә, шаян һүҙҙәрен дә йәлләмәй. Асыуланған, әйберен ҡыҙғанып бирмәгән кешеләр булмай. Ауылды буйҙан-буйға барып сыҡҡансы (ауылдың ҙурлығына ҡарап), бер нисә ҡолға әйбер, бер нисә биҙрә йомортҡа йыйыла. Яңы төшкән килендәргә талап нығыраҡ ҡуйыла: яҡшыраҡ таҫтамал, йә һырлап бәйләнгән бирсәткә, сигелгән ҡулъяулыҡ бирергә тейеш йәш килен. Иң яҡшы тип табылған бүләк ҡолғаның иң осона бәйләнә һәм был затлы әйбер иң батыр көрәшсегә тәғәйенләнеп ҡуйыла. Уйын үтеп киткәс, ҡайһы килендең бүләге батырға эләгеүен оҙаҡ һөйләйҙәр әле. Йыйылған әйберҙәр, йәғни ҡолға, уйын буласаҡ тауға илтеп ҡаҙап ҡуйыла. Һәм кешеләр, күрше ауылдарҙан ғына түгел, Өршәк башынан Өршәк тамағына тиклем булған бөтә ауылдарҙан атлыһы ат менән, атһыҙы йәйәүләп, уйын булған тауға ағыла.

Ҡолға тирәһендә түңәрәк барлыҡҡа килә. Башлап йөрөүселәр көрәште алып барыусыны билдәләй. Башта бәләкәй малайҙар көрәшә. Уларҙың еңеүселәренә ҡулъяулыҡ кеүек әйбер, йығылыусыларына йомортҡа бирәләр. Артабан оло егеттәр көрәшә башлай. Ул саҡта ауырлыҡ буйынса бүленеү юҡ. Уртала ҡалған көрәшсе янына кем теләй, шул сығып көрәшә. Еңеүсегә иң матур таҫтамал эләгә. Бер кем дә бүләк бәләкәй, тип наҙланып тормай, армаһыҙ булғансы көрәшә бирә.

Көрәш барғанда малайҙар йүгереүҙә ярыша. Ә бәләкәйерәк ҡыҙҙар үҙҙәренсә уйын ҡороп ебәрә. Бында ла махсус ойоштороусы юҡ. Үҙҙәренән үҙҙәре уйнап алалар ҙа китәләр. Бер нисә төрлө уйындан һуң, түңәрәк булып тотоношоп, таҡмаҡ әйтеп, йырлап бейешәләр. Был төп уйын. Йә булмаһа, берәй ағайҙары килеп скрипка йә гармун тартһа, бейешә башлайҙар.

Был ваҡытта оло ҡыҙҙар, килендәр үҙҙәренсә уйын ҡора: берәмләп бейешәләр, "Наза" уйнайҙар, гармун, скрипка көйөнә түңәрәкләп әйләнеп бейейҙәр. Көрәште тамамлаған егеттәр ҙә килеп ҡушылалар. Хәҙер инде бер генә урын тар, өсәр, дүртәр урында бейешеү башлана. Дәртлерәктәре бер урында бейей ҙә, икенсе урындағы бейеүселәр янына йүгерә, унда тағы арығансы бейеп, дәртен баҫа.

Бейергә булдыра алмаған өлкәндәр иһә бер урынға ултырып алалар ҙа, һәүетемсә генә әңгәмәләшәләр, бөгөнгө көрәш батырҙары хаҡында, ишеткән-күргәндәре тураһында гәпләшәләр. Шунан әкрен генә итеп боронғо йырҙарын йырлашырға тотоналар. Берәй музыкант килеп сыҡһа, бейешеп тә китәләр.

Уйын башланыу менән ауыл көтөүселәре яландағы малдарҙы ауылға алып ҡайта. Ләкин тауҙағы бер кеше лә өйөнә йүгермәй. Бөгөн быҙау менән һыйырға ла байрам. Туйғансы имһен әйҙә быҙауҡай инәһен. Башҡа көндәрҙә бик тәтемәй уларға бындай бәхет. Күрше-тирәлә тауға сыға алмаған берәй әбей, һарыҡ-кәзәләрҙе ишек алдына керетеп, ҡапҡаны япһа, шул да ярай.

Көн кискә ауыша. Ауылдың ҡыҙҙары, килендәре башҡа ауылдан килгән ҡыҙ-ҡырҡынды, егеттәр башҡа ауылдан килгән тиңдәштәрен өйҙәренә сәйгә алып китә. Кис булғансы өйҙән-өйгә сәйгә йөрөйҙәр. Бала-сағалар ҙа төрлөһө төрлө урында һыйлана, тамаҡ ялғай.

Ҡараңғы төшә башлағас, йәштәр киске уйынға яңынан тауға йыйыла. Уйын башланып китә: үҫмерҙәр бер урында түңәрәк әйләнеп уйнай. Оло егет-ҡыҙҙар, ҙур түңәрәк яһап, таҡмаҡ әйтеп, әйләнеп бейешә. Таң атҡансы йыр-бейеү, гармун, скрипка тауыштары тынмай. Ниндәй генә йыр йырланмай ҙа, ниндәй генә көй көйләнмәй. "Наза" уйыны, икешәрләп тотоноп "Ҡарабай"ға бейеү, "Арҡа һуғыш" уйыны, "Өсөнсө артыҡ" һәм башҡа уйындар уйнала. Ләкин төп уйын - түңәрәктә әйләнеү. Быныһында бейеү ҙә бар, йыр ҙа бар, уйын барышында кемдер үҙе таҡмаҡ сығарып та йырлай ала. Түңәрәктә оҡшатҡан кешең менән танышырға, уны түңәрәк эсенә саҡырып, бергә әйләнергә, шуның менән уны яҡын күргәнеңде белдерергә мөмкинһең. Уйында танышып өйләнешеүселәр ҙә күп була. Уйын таң беленгәнсе дауам итә. Шунан таралышыу-айырылышыу таҡмаҡтары әйтелә. Шул ваҡыт егеттәр араларынан берәүҙе өҫкә күтәрә. Уйын тынып ҡала. Был егет: "Төрөмбәттә "Ҡыҙҙар уйыны" тамам. Төрөмбәттәргә күңелле уйындары өсөн рәхмәт. Киләһе йомала "Ҡыҙҙар уйыны" - Ҡаҙморонда", - ти. Ҡаҙморондан бер егетте күтәрәләр. Уныһы: "Киләһе йомала беҙгә, Ҡаҙморонға, рәхим итегеҙ", - ти. Йәштәр йырлаша-йырлаша ауылға табан китәләр. Ситтән килгәндәр атта йәки йәйәүләп үҙ ауылдарына йүнәлә. Күпме генә арымаһындар, йоҡламаһындар - эшкә барырға кәрәк, колхозда ял юҡ.

"Ҡыҙҙар уйыны" бына шулай үтә торғайны. Бер тамсы араҡы, әсегән бал ҡапмаған кешеләр ошолайтып күңел аса ине. Һуғышыу, әрләшеү, бәйләнешеү тигән нәмә булманы. Ләкин 60-сы йылдарҙа ауылдарға эске килеп инде. Уйында ике ауыл егеттәре араһында һуғышыу осраҡтары була башланы. Бәлки, шуғалыр ҙа власть етәкселәре "Ҡыҙҙар уйыны"н тыйҙы. Хәҙер инде колхоздар, бик күп сығымдар түгеп, һабан туйы үткәрә. Тик унда элекке кеүек олоһо-кесеһе ҙур түңәрәккә тотоноп, йырлап әйләнмәй. Киске уйындарға сығып уйнау ҙа бөттө. Шулай итеп, ғүмер буйы үткәрелеп килгән, бер ниндәй сығымдар ҙа талап итмәгән "Ҡыҙҙар уйыны" тигән йолабыҙ юғалып ҡалды.

**Фәрхинур НАЗАРОВА.**
**Ауырғазы районы**
**Төрөмбәт ауылы.**
**1994 йыл, август.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың дүртенсе ысулы: аҡсаңды юғалыуҙан һаҡла

- Бәлә беҙҙе уңышлы эшләгән саҡта ла һағалап тороусан, - тип дауам итә Аркад дүртенсе дәресен. - Шуға ла көшөлөктәге аҡсаны ышаныслы һаҡлау ҙа мөһим. Инвестициялауҙың беренсе төп принцибы - ул һеҙҙең төп капиталдың хәүефһеҙлеге. Шуға ла ниндәйҙер мөмкинлектәрҙе ҡулланыр, дуҫтарығыҙ, туғандарығыҙ тәҡдим иткән проекттарҙы ҡабул итерҙән алда ошо хәүефһеҙлекте тикшереп ҡарағыҙ, гарантияларын өйрәнегеҙ. Үҙегеҙҙҙең тиҙ байығыу кеүек романтик теләгегеҙгә бирелмәгеҙ. Кешегә бурысҡа аҡса бирер алдынан башта уның ул аҡсаны ҡайтарып бирә аламы, юҡмы икәненә ышанығыҙ.

Мин үҙем был тәңгәлдә шундай хата эшләгәйнем. Бер йыл буйы йыйған аҡсамды ҡиммәтле биҙәнгестәр алып ҡайтырға ҡушып, сәйәхәткә китеүсе ташсы Азмурға биргәйнем. Ул биҙәнгестәрҙе һатып, һуңынан аҡсаһын бүлешергә һөйләшкәйнек. Ләкин финдар Азмурҙы төп башына ултырта һәм уға быяланан эшләнгән биҙәнгестәр һата. Мин шулай үҙемдең бар аҡсамды юғалтҡайным.

Бөгөн мин үҙемдең тәжрибәмдән сығып ул саҡта ҙур ахмаҡлыҡ эшләгәнемде таныйым: ташсыға ҡиммәтле биҙәнгестәр һатып алыу эшен ышанып тапшырырға кәрәкмәгән. Шуға ла мин һеҙгә шундай кәңәш бирәм: хаталанмайым, тиһәгеҙ, инвестиция өлкәһендәге үҙегеҙҙең генә белемгә ышанмағыҙ. Иң тәүҙә капиталын уңышлы һәм төшөмлө тотона белгән аҡыллы кешеләр менән кәңәшләшегеҙ. Шунан һуң ғына аҡсағыҙҙы хәүефһеҙ булған һәм ҡайтарып ала алған эшкә һалығыҙ.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Өлкәндәр өсөн "туҡланыу пирамидаһы"

Пирамида нигеҙендә өлкән йәштәге ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ өсөн барлыҡ төр аҙыҡ-түлектән оптималь тупланма билдәләнгән.

| | |
|---|---|
| *Ярмалар* | *7-8 порция* |
| *Йәшелсә* | *4-5 порция* |
| *Емеш-еләк* | *көнөнә 2-4 порция* |
| *Һөт ризыҡтары* | *көнөнә 2-3 порция* |
| *Аҡһым продукттары һәм ҡуҙаҡлылар* | *көнөнә 2-3 порция* |
| *Майҙар, тәм-том* | *көнөнә 1-2 порция (сикләнгән күләмдә)* |
| *Һыу* | *1,5 литрҙан да кәм түгел* |
| *Тоҙ* | *көнөнә бер балғалаҡ* |

Әгәр туҡланыу рационындағы аҙыҡ-түлекте порцияларға бүлеп, кәрәкле норманы табыу уңайлы икән, һәр көн түбәндәге норманы ашарға тырышырға тейешһегеҙ:

♦ 5 - 6 порция икмәк, иген бөртөктәре, дөгө йәки макарон. Бер порция бер телем икмәккә, 30 гр ҡулланыуға әҙер иген бөртөгө (1 сынаяҡ самаһы) йәки сынаяҡ яртыһы әҙерләнгән иген бөртөгө, дөгө йәки макаронға тиң.

♦ 2 - 2,5 порция йәшелсә. Бер порция 1 сынаяҡ йәшелсә йәки ярты сынаяҡ туралған, әҙерләнгән йәки яңы уңыштан йәшелсә.

♦ 1,5 - 2 порция емеш-еләк. Бер порция алма, банан, апельсиндың 1 уртаса киҫәгенә, ярты сынаяҡ яңы, әҙерләнгән йәки консервацияланған емешкә тиң. Ярты сынаяҡ кипкән емештәр йәки ярты сынаяҡ емеш һуты.

♦ 3 порция һөт, йогурт йәки сыр. Бер порция бер сынаяҡ һөт йәки йогуртҡа, 45 гр тәбиғи сырға тиң.

♦ 1,5 - 2 порция ит, ҡош ите, балыҡ, ҡоро ноҡот борсағы, йомортҡа йәки сәтләүектәр. Бер порция 60-90 грамм әҙерләнгән иткә, ҡош итенә йәки балыҡҡа тиң. Бер сынаяҡ ноҡот борсағы, 2 йомортҡа, 4 аш ҡалағы арахис майы йәки сынаяҡтың өстән ике өлөшө сәтләүектәр (бер порция).

## Дөрөҫ туҡланыу - еңел һәм ябай

Оло йәштәге кешеләргә сәләмәт туҡланыу принциптарын үтәү өсөн бер нисә кәңәш:

♦ Һәр көн иртән ашағыҙ. Бөртөклөләрҙе, йәшелсәне, емеште һайлағыҙ. Улар хроник сирҙәрҙе кәметергә ярҙам итә, мәҫәлән, йөрәк һәм 1-се төр шәкәр сире.

♦ Майһыҙ ит, күркә ите, балыҡ йәки ҡыртышһыҙ тауыҡ ите. Һеҙҙең йәштә организмға аҙ калория кәрәк, бигерәк тә актив булмаһағыҙ.

♦ Көнөнә 3 порция майлы булмаған һөт, йогурт эсегеҙ, сыр ашағыҙ. Кальцийға һәм D витаминына бай һөт продукттары һөйәк массаһын һаҡларға ярҙам итер.

**С. КУЗИНА.**

*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

**Таулы Алтай дәүләт университетында йыл һайын студенттарҙың "Рәсәй халыҡтары телдәре һәм әҙәбиәте (төрки телдәр төркөмө)" тип аталған Бөтә Рәсәй олимпиадаһы уҙғарыла. Ун икенсе тапҡыр ойошторолған бәйге быйыл 13 -7 май көндәрендә үтте. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән студенттар араһында Башҡортостан данын өс уҡыу йорто яҡланы: Башҡорт дәүләт университеты, БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты. Мәртәбәле бәйгелә профессор Гөлфирә Абдуллина етәкселегендәге башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының II-IV курс студенттары Нурзилә Усманова, Заһит Ғүмәров, Гөлсимә Иҫәнгилдина, Лилиә Ҡаһарманова, Вәсилә Юламанова һәм Гөлиә Шафиҡованан торған команда юғары балдар йыйып, беренсе урынға сыҡты.**



# АЛТАЙҘАР ТАҒЫ САҠЫРҘЫ...

## сәмле ярышҡа

Бөтә Рәсәй олимпиадаһына башҡорттарҙан тыш, Яҡут, Алтай, Тыва, Хакас республикалары, Ҡарағанда ҡалаһы студенттары ҡатнашты. Төрлө милләттәрҙе туплаған олимпиада сәмле ярыш ҡына түгел, төрки телле халыҡ вәкилдәрен йыйынаған матур байрамға әүерелде. 12-13-сө майҙа Таулы Алтайҙа стажировка үтеүсе өс Башҡортостан вузы һәм ҡаҙаҡ студенттары өсөн Алтай университеты уҡытыусылары руна яҙмалары, төрки әҙәбиәте буйынса фәһемле дәрестәр бирҙе. Киләһе ике көндә олимпиадала ҡатнашыусылар төрки телдәр һәм төрки әҙәбиәте, фольклоры буйынса һорауҙарға яуаптар яҙҙы. Эштәр күберәк милли йолалар, әҙәбиәт, ғилми хеҙмәттәр, төрки телдәр классификациялары менән бәйле булды. Тел ғилеме буйынса руна яҙмалары, алфавит хаҡында инша яҙыу, әҙәбиәт буйынса шиғри әҫәргә анализ яһау тәҡдим ителде. Олимпиадала ҡатнашҡан студенттар өсөн бик мауыҡтырғыс экскурсиялар ойошторолдо. Улар Алтай Республикаһының М.В. Чевалков исемендәге Милли китапханаһында "Алтай китабы" фестивалендә китаптар презентацияһында, милли уйындар буйынса оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашты. Олимпиаданан һуң икенсе көндә үткәрелгән "Төрки мәҙәниәттәренең III төбәк-ара фестивале"ндә БДУ командаһы вәкилдәре Нурзилә Усманова "Кизе шәл" бейеүен, Заһит Ғүмәров Рауил Бикбаевтың "Башҡортостан бында башлана" шиғырын башҡарып, тамашасылар күңелен яуланы. "Был олимпиадала икенсе тапҡыр ҡатнашам, ул үҙенең ҡыҙыҡлы мәлдәре менән дә иҫтә ҡалды. Бигерәк тә фестивалдәр ваҡытында ҡәрҙәш халыҡтар менән аралашыу күңелле булды. Үҙем Бөрйән башҡорто булһам да, мине күптәр ҡаҙаҡ ҡыҙына оҡшата. Былтыр тимер юл вокзалында бер ағай ҡаҙаҡ телен, йәнәһе, туған телеңде, белмәйһең, тип әрләп киткәйне", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Нурзилә Усманова.

Ниһайәт, 15 майҙа бөтә ҡатнашыусылар тулҡынланып көткән мөһим мәл - бүләкләү тантанаһы үтте. Башҡорт дәүләт университеты командалар араһындағы ярыш буйынса ғына еңеү яулап ҡалманы, шәхси беренселектә IV курс студенты Вәсилә Юламанова ла беренсе урын алды. "Ярыш командалар араһында булһа ла, шәхси беренселек буйынса урындар бирелеүе ҡыуандыра. Бигерәк тә беренсе урынға лайыҡ булһаң. Олимпиадаға әҙерлегем сессия, диплом яҙыу менән бергә барһа ла, мөһим тип тапҡан мәғлүмәттәрҙең барыһын да уҡып, ятланым. Команда ағзалары менән юлда барғанда ла, ярыш иртәгә була тигән төндә лә күмәкләп ултырып әҙерләндек. Барыбыҙ ҙа татыу, берҙәмбеҙ, бында беҙҙең етәксебеҙ, уҡытыусыбыз Абдуллина Гөлфирә Риф ҡыҙының роле ҙур. Шулай уҡ олимпиада сиктәрендә Таулы Алтай ҡалаһының иҫтәлекле урындарына, Чемаль районында данлыҡлы рәссам Григорий Иванович Чорос-Гуркиндың йорт-музейына, Сростки ауылында 3 йорттан торған Василий Шукшиндың музейына экскурсия ныҡ оҡшаны", - тип үҙенең ҡыуанысы менән уртаҡлашты еңеүсе ҡыҙ.

**Лилиә ҠАҺАРМАНОВА, БДУ студенты.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИЗГЕЛЕКТӘР АРТҺЫН

"Рамаҙан айы - бик тә мөбәрәк бер ай. Уның тәүҙәге ун көнө - рәхмәт, урталағы ун көнө - мәғрифәт йәки йәһәннәм утынан ҡотолоуға сәбәп булған көндәр", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

- Рамаҙан айында һулыш алыуҙарығыҙҙың һәр береһе - Аллаһты данлау, йоҡоғоҙ - Аллаһты ололау, һеҙ эшләгән игелекле эштәрҙең һәр береһе ҡабул ителә, доғаларығыҙ яуап таба.

"Шуға ла ихлас күңел менән Аллаһтан ураҙа тотоу өсөн көс, Ҡөрьән уҡып барыу өсөн теләк һәм ҡеүәт һорағыҙ", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

Был айҙа, айҙың күркәм был көндәрендә Аллаһтың ярлыҡауын алған кеше - бәхетле кеше, ти.

"Фәҡирҙәргә һәм мохтаждарға саҙаҡа өләшегеҙ, - тип нәсихәт бирә Ҡөрьән, - ҡарттарға ҡарата игелекле, кескәйҙәргә ҡарата миһырбанлы, хәстәрлекле һәм һөйкөмлө булығыҙ".

Ғәйет көндәрендә мосолмандар кәсептәрҙән, донъя мәшәҡәттәренән туҡталып тора, әммә игелектән туҡталып ҡалмай, уны йылдың башҡа ваҡыттарына ҡарағанда ла күберәк эшләп ҡалыу ниәте менән йәшәй.

Сөнки ғәмәлдәребеҙ үҙебеҙ өсөн булһа, игелектәребеҙ - Аллаһ ризалығы, бәндәләр ҡыуанысы өсөн эшләнә.

Хәҙистәрҙә әйтелә: "Аллаһ үҙе лә бер ваҡытта ла тик тормай, көнөнә 360 тапҡыр Ул ғаләмдәрҙең ғәмәл дәфтәренә ҡарап, ҡараған һайын яҙмыштарҙы барлап һәм таратып тора", - тиелә.

Ғүмере бөткәндәр әхирәткә күсеп китә, йәшәргә тейештәр тормоштарын дауам итә, тыуырға тейештәр тыуа, дәрәжәләре күтәрелергә тейештәрҙең дәрәжәләре күтәрелә, түбән төшөргә тейештәр төшә.

Тарих менән ҡыҙыҡһынған кешеләр белә: йәһүдтәрҙә һәм насараларҙа, гректарҙа, римлеләрҙә һәм ҡытайҙарҙа - бөтәһендә лә бойороуҙарҙы үтәүҙе, тыйылыуҙарҙан тыйылыуҙы талап иткән үҙенсәлекле йолалар була. Тәүрат менән Инжил китаптарында ла ураҙа тураһында әленән-әле телгә алынып тора.

Әҙәм ғәләйһис-сәләм, тип өйрәтә дин, һәр ай башында өсәр көн ураҙа тотҡан; Тәүрат Китабын алыр алдынан Муса ғәләйһис-сәләмдең 40 көн ураҙа тотоуы билдәле; Дауыт ғәләйһис-сәләм көн аралаш, Сөләймән ғәләйһис-сәләм һәр айҙың башында, уртаһында һәм аҙағында өсәр көн ураҙала була. Ғайса ғәләйһис-сәләм йыл дауамында әленән-әле ураҙа тотоп тора.

Ураҙа ғибәҙәте диндең бер терәгенә әйләнгәнсе, Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм үҙе лә ун көнгә бер тапҡыр ураҙаға инер булған.

Ураҙа кешене әҙәпкә өйрәтә.

Бөгөн күптәр, элекке бабайҙарыбыҙ әйтмешләй, Хоҙай бирмеш көндөң ниндәй, ҡайһы ваҡыты булыуына ҡарамаҫтан, шайтан ҡотҡоһона бирелеп йөрөй: эсә, тарта, теләһә нәмә ашай, улар - шайтан ҡоло.

**Сәләх СУҠБАЕВ. "Башҡортса дини календарь"ҙан.**

*БАҠСА*

# ПОМИДОРҘЫ ҮҘЕҢ ҮҪТЕР!

**"Киске Өфө" гәзитенең "Баҡса" рубрикаһында бик файҙалы кәңәштәр баҫыла. Әле бына 20-се һандағы "Йылды туйҙырыр яҙҙың көнө" тигән махсус битте уҡып, сәскәләр, баҡса еләге һәм томат үҫтереү серҙәрен белдем.**



Эйе, бындай материалдар тап ваҡытында бирелеүе менән ҡиммәтле. Мин баҡсамда йыл һайын помидор ултыртмай ҡалмайым, сөнки уны ифрат файҙалы йәшелсә тип беләм: иммунитетты нығыта; организмдағы холестеринды кәметә; аш һеңдереүҙе көйләй. Помидорҙың сағыу ҡыҙыл төҫө иһә көслө антиоксидант - ликопин элементына бай булыуы хаҡында һөйләй. Ә ул, билдәле булыуынса, яман шеш сиренең төрлө төрҙәренә ҡаршы шифалы тәбиғи сара: рак күҙәнәктәрен юҡ итә алыу һәләтенә эйә. Ә шулай ҙа ҡайһы бер осраҡтарҙа уны сама белеп ҡулланыу кәрәк икән. Мәҫәлән, кемдәр аллергия менән яфалана, йә булмаһа, үт ҡыуығында таш булғанда һәм ҡан баҫымы юғары булғанда, көнөнә 1-2 помидор менән генә сикләнергә тура килә.

Баҡсалаш күршем агроном. Минең быйыл да помидор ултыртырға йыйыныуымды белгәс, ул бер аҙ сабыр итергә ҡушты. Быйыл яҙҙың кәмендә ике аҙнаға һуң килеүен иҫәпкә алып, тупраҡ 10 градусҡаса йылынғанын көтөргә кәрәклеген иҫкәртте, сөнки хатта теплицалағы тупраҡ та саҡ йылына башлаған ғына әле, ти ул. Йыл нормаға ярашлы килгән осраҡта помидорҙы асыҡ грунтҡа 25 майҙан 10 июнгә тиклем ултыртырға мөмкин. Үҙегеҙ сәсеп үҫтергән үҫентеләрҙе ултыртыр алдынан сыныҡтырып алыу кәрәк икән, шул саҡ улар һалҡынға бирешмәй. Бының өсөн рассаданы ваҡытлыса баҡса өйө террасаһында йә һауытында килеш теплица эсенә ултыртып торорға ҡушыла. Асыҡ грунтҡа ултыртҡанда помидор үҫентеһен тәүге япраҡтарына тиклем күмергә һәм биостимулятор ҡушылған һыу һибергә.

Әйткәндәй, үҙең үҫтергән помидорға етмәй инде ул, сөнки һатып алынғаны ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа үҫкән, ниндәй химикаттар менән ашланған - белеп булмай, ундай йәшелсәнең файҙаһынан зыяны күберәк.

**Рәфҡәт ХӘЙБУЛЛИН, һәүәҫкәр баҡсасы.**

✔ *Бары тик бик бай кеше генә намыҫсан була. Бары тик бик бай кеше генә намыҫтан өҫтөн була ала. Быларҙың ҡайһыһы хәҡиҡәт?*

*(Огюст Детеф).*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# СӘСМӘҮЕРЕМ, СЕЛТӘРЕМ...



**(Башы 11-се биттә).**

Икенсе Бөйөк Ватан һуғышы осоронда муйсалар танктар төҙөү өсөн тип, тағы ла йыйып алынған, шуға ла бөгөнгө көнгә улар килеп етмәгән тиерлек. Бар мәғлүмәт - музейҙарҙа һәм шул дәүер фотоларында ғына. Йыл ярым ваҡыт эсендә шулар буйынса төньяҡ-көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемен һәм биҙәүестәрен тергеҙеүгә өлгәшкән һәм ошондай фестивалгә сығырға йөрьәт иткән Мәсетле ағинәйҙәре Сибайҙа башҡа бәйгеселәрҙе тамбурлы сигеүгә лә өйрәтте.

Хәтегеҙҙә булһа, 2016 йыл дауамында барған "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһенән: "Хәҙер инде ҡашмау эшләүҙе әүҙемләштерергә кәрәк", - тип таралышҡайныҡ. Ҡашмауҙы ла, хәҙер инде тәңкәле ҡашмауҙы ла һәр төбәктә эшләйҙәр икәнен күрҙек был фестивалдә. Тик ҡашмауҙың баш өлөшөнөң арты ябыҡ булырға тейеш түгел. "Уның асыҡ булыуының хикмәте шунда - беренсенән, был үҙенә күрә тәбиғәт, ғаләм менән бәйләп тора, икенсенән, һауа алышынһын өсөн кәрәк. Медицина ғилемендә, тәндән бөтөн йылылыҡ баш аша сыға, тиелә. Түбәләге ҙур булмаған уйым баш эҫеп, ҡан баҫымы күтәрелеүҙән һаҡлай. Ҡашмауҙың елкәнән арҡа буйлап төшкән "ҡойроғо" - арҡалыҡ башланған ергә ике ҡортбаш тегеп, "күҙ" яһайҙар, был күҙ тейеүҙән һаҡлай. Ғөмүмән, селтәр һәм ҡашмау кешенең гормондар бүлеп сығара торған бөтөн биҙҙәрен һаҡлап тора. Әйтәйек, ҡашмау баш һөйәгенең иң нескә урыны - түбәне, үңербауы йәки һаҡалсаһындағы тәңкәләр - ҡалҡан, селтәрҙең түш өлөшөндә буй булып төшкән тимер тәңкәләр - боғаҡ, ҡор тип аталған өлөшөндәге бер нисә рәт итеп теҙелгән тәңкәләр ашҡаҙан аҫты биҙҙәрен ҡаплай, икенсе йән тигән атамаһы булған кендек тә һаҡлаулы. Шуға ла селтәргә тәңкәләрҙе лә дөрөҫ баҫыу кәрәк", - тигән кәңәштәрен еткерҙе Сибай ағинәйе Фәниә Сарбулатова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сибайҙа үткән фестиваль күрһәтеүенсә, милли кейем һәм традицион биҙәүестәрҙе тергеҙеү йәһәтенән республикала ғәйәт күп эш эшләнгән. Һәм был эш ағинәйҙәрҙең фиҙаҡәрлеге менән башҡарылған. Шуның өсөн оло рәхмәт уларға. Хәҙер беҙгә кейемдәрҙең, биҙәүестәрҙең фәлсәфәһен, ҡанундарын ныҡлы өйрәнергә кәрәк. Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжы уҡытыусыһы Юлиә Хөснуллина шулай уҡ биҙәүестәрҙе зауыҡ менән һайлаһаҡ, халҡыбыҙға хас традицион таштар, традицион металдарҙы ҡулланһаҡ ине, тигән теләк белдергәйне. Ысынлап та, беҙ юғары зауыҡлы, үҙенең баһаһын белгән халыҡ вәкилдәре. Хәҙерге заман милли кейеме лә ошо милли үҙенсәлекте һаҡлап ҡала алһа ине.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЙЫРЛАЙ ҘА БЕЛӘБЕҘ!




**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры артисы Дилә Муллабаева Силәбелә булып үткән Клавдия Шульженко исемендәге Бөтөн Рәсәй актер йыры конкурсының "Театрлаштырылған йыр" номинацияһында юғары наградаға - 1-се урынға лайыҡ булды.**

Быйыл 19 майҙа Наум Орлов исемендәге Силәбе дәүләт академия драма театрында Клавдия Шульженко исемендәге 12-се Бөтөн Рәсәй актер йыры конкурсы үткәрелде. Билдәле артистар һәм талантлы йәштәр 12-се тапҡыр инде йырҙы ҡыҫҡа, ләкин иҫтә ҡалырлыҡ драматик спектаклгә әйләндереү буйынса һәләттәрен һынап ҡараны. Был конкурста беренсе тапҡыр Өфө артисы ла ҡатнашты. Дөрөҫөрәге, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрынан. Дилә Муллабаева - З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған. Студент сағында уҡ әле ул үҙен көслө темпераментҡа һәм ҙур ижади мөмкинлеккә эйә артист итеп күрһәтте. Ә унын нисек йырлағанын ишетһәгеҙ! Был уның быйылғы йыр конкурсында икенсе еңеүе - март айында ул Өфөлә булып үткән "Яҙ актрисаһы" актер йыры конкурсында 1-се урын алғайны инде. Ә Гран-прины унда БР Милли йәштәр театрынан Алтынай Хамматова яуланы.

Ҡурсаҡ театрында Дилә өмөтлө артистарҙан иҫәпләнә. Һығылмалығы, музыканы тәрән тойоуы менән айырылып тора; ҡурсаҡтар менән оҫта эш итә, "тере" планда ла тәбиғи ҡабул ителә. Унын яңы эштәренән - "Муза-Цокотуха"лағы - Ҡыҙыҡай, "Мең дә бер кис"тәге - Әсирә, "Мөғжизәле ете теләк" спектаклендә Йәмилә ролдәрен айырып билдәләү кәрәк. Ә "Һинд легендаһы" спектаклендә ул яңғыҙ бейеү партияларын башҡарыуы менән таң ҡалдырғайны.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МИЛЛӘТ ТУРАҺЫНДА...

## унын рекламаларынан фекер йөрөт

Күмәк төкөрһә - күл итер, яңғыҙ төкөрһә - юҡ итер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәлә һабаҡ бирә ала, әммә аҡылға ултыртмай.

**(Владислав Гжегорчик).**

Тәхет, әлбиттә, кешене күтәрә, әммә уны тегеләй-былай борғоланыуҙан мәхрүм итә.

**(Владислав Гжещик).**

Ҡыҙ-ҡатындар, бар ирҙәр ҙә бер төрлө, тип уйлай - ошонда уларҙың көсө; ир-егеттәр иһә ҡыҙ-ҡатындар төрлөтөрлө, тип уйлай - ошо уларҙы харап итә лә инде.

**(Рамос Серна).**

Ахмаҡлыҡтың әллә ни зарары юҡ, шуға ла күп хәйләкәр кешеләр үҙҙәрен ахмаҡ итеп күрһәтергә ярата.

**(Зигмунд Графф).**

Аҡыллы кеше байыяcаҡ, байығас, ахмаҡланасаҡ, үҙе ахмаҡланмаһа, ҡатыны аҡылдан яҙасаҡ.

**(Финли Данн).**

Ҡатынымды башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға оҡшамаған сифаты өсөн яраттым, башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙан бер яғы менән дә айырылмағанын күргәс, үҙемде уға булған мөхәббәттән дауаланым.

**(Жак Деваль).**

Бары тик бик бай кеше генә намыҫсан була. Бары тик бик бай кеше генә намыҫтан өҫтөн була ала. Быларҙың ҡайһыһы хәҡиҡәт?

**(Огюст Детеф).**

Милләттең идеалдары тураһында уның рекламаларына ҡарап фекер йөрөтөргә мөмкин.

**(Норман Дуглас).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Аҡ һаҡаллы мулланан:**

**- Һаҡалың олораҡмы, әллә үҙеңме? - тип һорағандар.**

**- Әлбиттә, үҙем, - тип яуап биргән мулла. - Мин тыуғанда әле бер төк һаҡалым да юҡ ине.**

**- Әгәр ҙә һин һаҡалыңдан олораҡ икән, ниңә ул ағарған, ә һинең күңелең ҡарайған һуң? - тип һорағандар тағы. Әммә был һорауға мулла яуап бирә алмаған".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4787
Заказ - 917/05